Зөлфиә Ханнанова

# МИН – БАШҠОРТ, *тип танышығыҙ...*

*Шиғырҙар, поэма*

КИТАП
ӨФӨ • 2018

УДК 821.512.141-1
ББК 84 (2 Рос = Баш)-5
Х24

**Ханнанова, З. М.**
Х24 Мин — башҡорт, тип танышығыҙ... : шиғырҙар, поэма / Зөлфиә Ханнанова. — Өфө : Китап, 2018. — 224 бит.

ISBN 978-5-295-06836-2

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Зөлфиә Ханнанованың нескә күңел донъяһынан урғылған шиғырҙарға эскерһеҙлек, ихласлыҡ һәм саф күңеллелек, шулай уҡ романтик йүнәлеш хас. Уның шиғриәте кеше һәм халҡыбыҙ яҙмышындағы ҡатмарлы ҡаршылыҡтар тураһында уйландыра, яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа, юғарылыҡҡа әйҙәй, күңелдәребеҙгә аҡ нур бөркә, йәм өҫтәй.

**УДК 821.512.141-1**
**ББК 84 (2 Рос=Баш)-5**

© Ханнанова З. М., 2018
© Бикбаев Р. Т., баш һүҙ, 2018
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2018

**ТП–039/18**

**ISBN 978-5-295-06836-2**

## Нур бөркөүсе һүҙҙәр

Зөлфиә Ханнанова бөгөн халыҡ-ара майҙандарҙа ла һынатмаҫлыҡ һәләтле шағирәбеҙ. Уны студент сағында уҡ яҙған шиғырҙарынан беләм һәм ижади үҫешенә һәр саҡ ҡыуанам. Мәктәптә уҡытҡанда ла, район һәм ҡала кимәлендә яуаплы эштәр башҡарғанында ла уның өсөн шиғриәт иң изгеһе, ул ижад тип янып йәшәй, һүҙҙәрҙе бик белеп, талапсан ҡуллана.

Өфөнөң иң боронғо һәм иң затлы мәҙәни үҙәктәренең береһе булған Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында үткән «Йөрәк һүҙе» исемле шиғри бәйгенең йомғаҡлау кисәһе рухи тормошобоҙҙағы иң иҫтәлекле ваҡиғаларҙың береһе булып хәтерҙә ҡалды. Ярыштың төп бүләген хаҡлы рәүештә шағирә Зөлфиә Ханнанова менән уның ҡыҙы Гүзәлдең яулауы тураһындағы жюри ҡарарын халыҡ дәррәү алҡыштар менән ҡаршыланы.

Хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә шағирәләр һәм әҙибәләр ижады һүҙ сәнғәте үҫешендә йылдан-йыл нығыраҡ асыла бара. Милләттәрҙең бөгөнгө рухи булмышында ҡатын-ҡыҙ һүҙенең бәҫе юғары, уртаҡ ҡаҙаныштарға индергән өлөшө ҙур.

Ошондай ҡаҙаныштар юғарылығынан байҡағанда Зөлфиә Ханнанованың шиғриәте иң маҡтаулы баһаларға лайыҡ. Шағирәнең «Мин — башҡорт, тип танышығыҙ...» тигән ҡулъяҙмаһын ентекләп уҡып сыҡҡандан һуң, быға тиклем баҫылған китаптарынан алған тәьҫораттарым күпкә киңәйҙе.

Ҡулъяҙма «Бисмилләһир-рахмәнир-рахим» тигән һүҙҙәр менән башланып китә һәм авторҙың бәләкәй тыуған еренә бағышлап яҙған шиғырҙары артабан яйлап оло Ватаныбыҙ — Башҡортостан яҙмышына барып тоташа. Мосолман фәлсәфәһе менән ҡушылғас, рухи хазиналарҙың мәғәнәһе артҡан, яңыса ҡараштар, тәғлимәттәр тыуҙырыусы ҡағиҙәләр, эҙмә-эҙлекле ышаныстар менән нығытылған. Зөлфиә Ханнанованың «Шуғалыр ҙа ерҙән көс-дәрт алып, күктән илһам менән йәшәйем» тигән һүҙҙәре уның ижадының ниндәй көстәр менән бәйләнештә үҫеүен күрһәтә: тыуған ерҙән көс-дәрт алмаһаң, күктән килгән илһам менән генә әллә ни эш ҡыйрата алмаҫһың. «Китәм тиһең» тигән шиғыр:

*Китәм тиһең, кит һуң әйҙә,*
*Сит-ят ерҙәр ҡыҙыҡтырғас,*
*Алтын тауҙар ҡалҡып торғас,*
*Көмөш һыуҙар ағып торғас, —*

тип башлана ла быуа ниндәй юлдар менән тамамлана:

*Ниңә миңә замандаштар*
*Бәхет эҙләй башҡа остан?*

*Миң төҫтәрҙә балҡый Себер,*
*Ҡан төкөрә Башҡортостан!*

Шиғыр 1990 йылда яҙылған. Ул саҡтарҙа ситкә китеп эшләүҙәре бөгөнгө кимәлдә түгел ине әле, тотош ил бәләһенә әйләнмәгәйне. «Өфө етә барыһына ла» тигән шиғырын Ханнанова:

*Килгән бере сат йәбешә,*
*Береһе лә кире китмәй!*
*Илем, тиеп йәнен атҡан,*
*Ятаҡ тапмай башы ҡатҡан*
*Бер башҡортҡа урын етмәй... —*

тигән бик киҫкен һүҙҙәр менән бөтөрөп ҡуя. Икенсе бер әҫәрендә «Баш ҡалаға бик күп баштар һыйған, шағир башы ғына һыймаған» ти ул. «Утайҙар халҡымды, утайҙар» тигән һүҙҙәрҙе лә тыныс ҡына уҡып булмай. «Өфө миңә еңел бирелмәне» тигәне лә милләттәштәребеҙҙең фәһемле яҙмышы хаҡында һөйләй.

Зөлфиә Ханнановаға «Беҙҙең ғаилә миң һынауҙар үтеп, икәү бергә ҡорған нығытма» тип әйтер алдынан һөйгәнең менән күп ауырлыҡтарҙы бергә еңергә кәрәк. «Парадокс» исемле һигеҙ юллыҡ «Беҙ тыуғанбыҙ бер-беребеҙҙе бәхетле итер өсөн» тигән һүҙҙәрҙе «Беҙ тыуғанбыҙ бер-беребеҙҙе бәхетһеҙ итер өсөн» тип ҡабатлар алдынан әҙәм балаһы ниндәй тетрәнеүҙәр һәм юғалтыуҙар үтергә тейеш?! Бындай һорауҙарҙы биреүе еңел түгел, ә үҙ яҙмышыңда үткәреү өсөн ни тиклем рух нығлығы кәрәк. Быларҙы кисереүсе шәхес яҡшы белә: шағир

йөрәге тере саҡта тынғы күрмәйәсәк. Шағир яҙмышы ҡушыуы буйынса ул: «Юғалттым!» — тиеп, берсә көйҙө йәнем, «Таптым!» — тиеп, «берсә һөйөндө» тип йәшәйәсәк. Әгәр шиғыр, «Хат көтмәйем һинән, ант көтмәйем», тип башланып, «Хафаланма! Юҡ, юҡ, яфаланма! Үртәлер ҙә тымыр был йөрәк, Ҡайҙан ғына һиңә хаттар яҙҙым?! Йүләрмен дә инде бигерәк!..» тигән һүҙҙәр менән бөтә икән, был бер мәлдәге рухи халәт кенә түгел, шағирәнең бөтә ғүмере шундай өҙгөләнеүҙәрҙән, юғалтыуҙарҙан һәм табыштарҙан тора. Ләкин юғалтыуҙар күберәк...

Шиғырға «Виртуаль һөйөү» тигән һүҙҙәр килеп инһә, элегерәк сәйер булыр ине. Ә хәҙер «Исемеңде юйып булмай йөрәк тигән компьютерҙан» тип әйтеү ҙә тәбиғи ишетелә. «Табанынан ҡан ағыҙып ҡайтҡан» ете ҡыҙҙың Өфөнөң үҙәгендә һәйкәл булып терелеүе шағирәнең «Төнгөлөккә тышамағыҙ, зинһар, башҡорт аттарын» тип өҙгөләнеүҙәрен көсәйтеп ебәрә. «Атаҡайым тышта ҡарҙар көрәй...» исемле шиғырында Зөлфиә Ханнанова ҡәҙерле кешеһе тураһында «Моңһоулана бара ҡараштары, һүлпәнәйә бара көрәге» ти, сөнки «Бер көн килеп беҙҙең йорт һуҡмағын кем таҙартыр икән, кем күрәр?» Шағирәгә быларҙы ла кисерәһе бар. Әсәһе хаҡындағы шиғырҙарының береһе: «Инәйемде төштә күрҙем: сәскәйҙәре — аҡ ҡылған. Тағы бер аҙ ҡайтмай торһам, яҙыр төҫлө аҡылдан», — тип башлана. Унын һуңғы юлдары ошолай:

*Бала саҡтан хәтеремә*
*Һеңдерҙем был йоланы:*

*Инәй өйҙә иламаны,*
*Тауға китеп иланы.*

*Был тиклем дә холоҡ-фиғелем*
*Үҙенә оҡшар икән,*
*Мин дә тауға сығып китһәм,*
*Күңелем бушар микән?!*
*Күңелем бушар микән...*

Әсәһенең аҡыллы кәңәштәре хаҡында шиғырҙарҙа ҡабат-ҡабат әйтелә. Иң ауыр саҡтарында кеше тыуған яғында ҡалған ағайҙарын, апайҙарын, еңгәләрен һағынып хәтерләй. «Атайымдың йәне ҡайҙа икән? Ҡайындарға бағам, шыршыларға. Атай йәнен эҙләп китер инем, яуап тапһам әгәр ошоларға» тигән болоҡһоуҙарға «Юҡ, буранлар мине ҡурҡытмайҙар (Асыҡ маңлайыма ел ҡаҙала!..)» тигән ҡаршылыҡтар өҫтәлә. Кешенең тыуған яҡ сәскәләренә һәм башҡа матурлыҡтарына һоҡланыуын күреп өйрәнгәс, «Миңә ғәзиз аҡ ҡарым» тигән һүҙҙәр сәйерерәк ишетелергә лә мөмкин. Ҡыштың төрлө саҡтарын, далалағы күҙ асҡыһыҙ бурандарҙы ла күп күргәнем булды, ләкин «Китер юлды йәшерәм тип, тышта буран өйөрөлә» тигән күренеште Зөлфиә Ханнанованың шиғырында ғына уҡыным. Дала бурандарының ҡосағында үҫкән кешенең янында ғына булғанды нисек күрелмәгән? Зөлфиәнең бер шиғыры «Ағинәйҙәр маршы» тип атала. Быға ҡаршы киләсәктәр, ағинәйҙәр марш атлап йөрөр йәштә түгел, тип әйтәсәктәр. Ләкин шул ағинәйҙәрҙең фиҙаҡәр эштәре беҙҙе маршҡа әҙерләгәндәй

уяулыҡ сафтарына ныҒыраҡ баҫтыра түгелме һуң?

Шиғриәттең үҙ ҡанундары. Хаҡиҡәтте шағир үҙенсә раҫлай. «Әҙәм үә Һауа» тигән шиғырында «Маймылдарҙан кеше яралмаған!» тигән һүҙҙәрҙе Зөлфиә Ханнанова өндәү билдәһе менән яҙа. Тимәк, уның был раҫлауы бик принципиаль рәүештә әйтелә. «Һәр беребеҙҙә Әҙәм ҡаны аға, һөйөү уты дөрләй Һауаның», — ти шағирә. Әҙәм балаһы тигән һүҙ бик борондан телебеҙҙә һаҡланып ҡалған. Туған халҡы менән айырылғыһыҙ бәйләнештә генә әҙәм балалары кеше дәрәжәһендә ҡаласаҡ, Урал батырҙың «Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ» тигән аманатына улар тоғролоҡ һаҡлаясаҡ. Ошо еребеҙҙе йәннәт итер өсөн Әҙәм менән Һауа йәннәттән ҡыуылған. «Хәҙер минең ҡулдәккенәм түгел, йәнкәйҙәрем һығып алмалы» тигән хәлдәрҙә лә әҙәм балалары кешелек сифаттарын, кешелек булмышын юғалтмаҫҡа тейеш.

Зөлфиә Ханнанованың шиғриәте кеше һәм халҡыбыҙ яҙмышындағы ҡатмарлы ҡаршылыҡтар тураһында уйландыра. Иң мөһиме — уның һүҙе яҡшылыҡҡа, матурлыҡҡа, юғарылыҡҡа әйҙәй, күңелдәребеҙгә аҡ нур бөркә, йәм өҫтәй. «Был донъяла аҙаштым мин бары йыр эҙләп кенә», — ти шағирә. Аҙашһалар ҙа йыр эҙләп, моң эҙләп кенә аҙашһындар ине был ҡатмарлы донъяла кешеләр. Ихлас йыр барыбер тура юлға сығара.

*Рауил Бикбаев,*
*Башҡортостандың халыҡ шағиры*



*Доға ҡылам: «Илем! – тип, –*
*Минең берҙән-берем!» – тип.*
*Ерем, телем, динем, тип,*
*Ерем,*
*Телем,*
*Динем, тип!*

*Бисмилләһир-рахмәнир-рахим*

## Мин – башҡорт, тип танышығыҙ...

Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ,
Шул көлдәрҙән ҡалҡып сыҡҡан гөлдәре беҙ.
Ни үкенес: ҡыҫҡа булды көндәребеҙ –
Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ...

Яндырылған ауылдарҙың күмере беҙ,
Һеҙҙән хәйер-доғаларға тилмерәбеҙ.
Ил-ер өсөн фиҙа булды ғүмеребеҙ –
Яндырылған ауылдарҙың күмере беҙ...

Яндырылған ауылдарҙың төтөнө беҙ.
Онотмағыҙ беҙҙе, зинһар, үтенәбеҙ!
Илгә хаҡһыҙ ҡаныҡҡандың хөкөмө беҙ –
Яндырылған ауылдарҙың төтөнө беҙ...

Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ.
Онотторға беҙҙе шулай хаҡлымы һеҙ?
Танымайбыҙ, ысын башҡорт халҡымы һеҙ?!
Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ...

Яндырылған ауылдарҙың йәндәре беҙ.
Сабыйҙар ҙа шәһит китте, йәлләмәгеҙ!
Хәйер, йәлләй беләме ни йәндәрегеҙ
(Һеҙ бит хәҙер ғәфләт баҫҡан
хәлдәһегеҙ...)?

Яндырылған ауылдарҙың һағышы беҙ —
Йәнебеҙҙе көлдән эҙләп табышығыҙ!
Беҙҙең алда таҙа булһын намыҫығыҙ:
«Беҙ бөтмәнек!
Мин — башҡорт!» — тип танышығыҙ!

## Йәрем, мине ситкә алып китмә!

Көнләшәм мин ауылыма ҡайтһам
Тәндәк буйындағы еректән.
Ағастың бит ағасына тиклем
Тыуған ергә нығыраҡ ереккән.

Мин дә бында нығыраҡ кәрәкмендер,
Ана, хатта юлдың саңы ла:
«Бик һағындым һине!» — тигән кеүек,
Биттәремә килеп һарыла.

Йәрем, мине ситкә алып китмә,
Алтын һарай һалма ҡом таштан,
Минең бөтә йәшәү тамырҙарым
Тыуған ергә барып тоташҡан!

## Дыуан, тиһәм...

Дыуан, Дыуан, тиһәм,
Тыуған яҡҡа
Ҡыуан елдәр мине
Ҡыуалай.
Сит яҡтарҙа бәғерҙәрем ҡатты,
Ҡартайыуы еткән
Йыуалай.

Дыуан, Дыуан, тиһәм,
Йәндәремә
Әллә ҡайҙан килә
Еңеллек.
Илкәйемә ҡайтһам, бер ус йыуа
Йыйып алыр инем
Иң элек.

Дыуан, Дыуан, тимен,
Был донъяға
Килә ҡабат бында
Тыуаһы.
Минең өсөн иң-иң тәмле ризыҡ —
Тыуған яҡтың әсе
Йыуаһы.

* * *

Һаумы әле, һаумы, Иҫке Хәлил*!
Ҡайтып киләм хәлең белергә.
Хәл өҫтөндә ята атаҡайым,
Тыуған йортҡа нисек инергә?!
Беҙ үҫкәндә гөрләп торған урам,
Ни арала шулай ҡартайҙың?!
Иҫтән яҙып йығылырға тора
Кәртә-ҡуралары атайҙың.
Яңғыратыр ине бар ауылды
Атаҡайым элек йыр йырлап.
Күңелемә шомло уйҙар һалып,
Асылғанда ҡапҡа шығырҙап,
Тыуған йорттоң моңһоу тәҙрәләре
Ҡарамаһын ине ятһырап,
Сит ерҙәргә китеп солтан булғас,
Үҙ илемдә үҙем ят һымаҡ!
Кисерегеҙ мине, ауылдаштар,
Хаҡығыҙ бар йәнде үртәргә.
«Атайымдың хәле нисек?» — тиһәм,
Ыңғырашып ҡуя күтәрмә...
Кисерегеҙ мине, былай ҙа бит,
Намыҫ ғазабында йән тулай!
Һинең хәлең нисек, Иҫке Хәлил,
Атайҙың да хәле тап шулай...

---

* *Иҫке Хәлил* — Дыуан районындағы ауыл.

## Ауылымда мәсет төҙөлә

Матур инде быйыл көҙө лә —
Ауылымда мәсет төҙөлә!
Бисмиллалы ошо төҙөлөш
Алып килер бик күп үҙгәреш.

Тыйнаҡланыр ҡыҙҙар, егеттәр,
Хәрәм ризыҡ һатмаҫ кибеттәр.
Имен үтһен, тиеп, ҡыш-йәйҙәр,
Намаҙлығын йәйер инәйҙәр.

Бәрәкәтле булыр табындар,
Һәр бер йортта ҡорбан салырҙар.
Никах менән үтер бар туйҙар,
Бик өлөшлө булыр сабыйҙар.

Мәсет төҙөй беҙҙә ир-аттар...
Һоҡланырҙар уға ҡунаҡтар.
Моңло аҙан таңда уятыр —
Ауылыма шулай ҡот ҡайтыр!

*2007*

## Яр өҫтөндә тал ине

Ун һигеҙҙә булдым микән,
Күңелем — иләҫ-миләҫ.
Әй буйҙарына килгәйнек,
Торналар ҡайтҡан, тигәс.

Бөгөнгөләй хәтеремдә:
Яр өҫтөндә тал ине.
Кемдер берәү: «Китмә!» — тигәс,
Һүҙһеҙ генә ҡал ине...

Тик бит минең йүләр сағым:
Бер илайым, бер көләм.
«Ҡал!» — тиһә лә, китеп барҙым
Торналар тубы менән.

Их, торналар, ниңә шул саҡ
ЯһаныҒыҙ өсмөйөш?!
Сит яҡтарҙа әйтте бер ҡыҙ:
«Һинең йәр миңә тейеш!»

Шау яра булды күңелем,
Үкенескә ҡалмаһын:
«Торайыҡ, торайыҡ!» — тиһәләр ҙә,
Йүнләп тора алманым,
Хәсрәт йөкмәп ҡайттым кире —
Ҡайҙа ағас тал тигән?
Бер кем дә юҡ: «Һөйәм!» — тигән,
Бер кем дә юҡ: «Ҡал!» — тигән...

## Һарыбикә*

Һарыбикә буйы һары сәскә,
Сит-ситтәре тоташ әрәмә.
Һар(ы)бикәгә китеп оҙаҡлаһам,
Әсәкәйем, мине әрләмә.
Мин төшөндөм күптән: ниңә әсәй,
Сыҡтынииһәм өйҙән, ҡыҙғана?
Үҙемдә лә хәҙер үҫеп килә
Һарыбикә генә ҡыҙ бала.
Мин дә уны, ғәзиз ҡыҙғынамды,
Иҫкән елдән хатта көнләйем!
...Һар(ы)бикәне әгәр күрмәй китһәм,
Үкенесле булыр был йәйем.
Оҙаҡлаһам, әсәй, үпкәләмә,
Бөтөрөрмөн, ҡайтҡас, өй эшен,
Йөрәгемдә алып китәйемсе
Тыуған яҡтың кескәй мөйөшөн.

* * *

Инәйемде төштә күрҙем:
Сәскәйҙәре — аҡ ҡылған.
Тағы бер аҙ ҡайтмай торһам,
Яҙыр төҫлө аҡылдан.

---

* *Һарыбикә* — Иҫке Хәлил ауылы эргәһендәге яланлыҡ.

Ҡасан ғына инәйебеҙ
Йәш ине, матур ине.
Ҡара таң менән тороп ҙа
Һуң ғына ятыр ине.

Ул бер ваҡыт ултырманы
Ҡул ҡаушырып, эш тапмай.
Өйҙә үлем түшәгенә
Йығылған ине атай.

Етем итмәҫ өсөн беҙҙе,
Ул бит иртә ҡартайҙы.
Үҙ һаулығын юйҙы, әммә
Һаҡлап ҡалды атайҙы.

Ҡарайтырға сал сәстәрен
Ниҙәр генә бирәйем?!
Маҙартауҙа үлән йолҡоп
Илағайны инәйем.

Ҡайындарға систе серен,
Кешегә һөйләмәне.
Мин дә ҡыйын саҡтарымда
Урманға киләм әле.

Бала саҡтан хәтеремә
Һеңдерҙем был йоланы:
Инәй өйҙә иламаны,
Тауға китеп иланы.

Был тиклем дә холоҡ-фиғелем
Үҙенә оҡшар икән,
Мин дә тауға сығып китһәм,
Күңелем бушар микән?!
Күңелем бушар микән...

* * *

Ошо һүҙҙе өҙөлөп юҡһыныуым:
Әйләнәм дә йәнә ҡабатлайым,
Әсәкәйем, бары тик һин генә
Өндәшкәнһең икән: «Балаҡайым!»

Ошо һүҙҙе өҙөлөп һағынғанда
Нарыҡлайҙар мине төрлөсә:
Апайҙарым миңә: «Туғаным!» — ти,
Ҡәйнәм: «Килен!», ирем: «Эй, бисә!»

Һинһеҙ генә, әсәй, көҙгә индем,
Баландарҙы тирҙем: эй, әсе!
Яңылыштан ғына кемдер берәү:
«Балаҡайым!» — тиеп әйтһәсе...

...Мин ул һүҙҙе хәҙер төштә күрәм,
Ә өнөмдә өҙөлөп ҡабатлайым,
Тап һинеңсә мин улыма әйтәм,
Ҡыҙҙарыма әйтәм: «Балаҡайым!»

*03.07.08*

## Атаҡайым тышта ҡарҙар көрәй...*

Атаҡайым тышта ҡарҙар көрәй,
Ауыр һелтәп еңел көрәген.
Йыш-йыш туҡтап юлға ҡарап ала —
Кемдәрҙелер көтә, күрәһең.

Көтәлер шул, ә бит был һуҡмаҡтан
Беҙ, биш бала, сығып киткәнбеҙ.
Көткәнеңде белеп, яндарыңа
Ҡайтып төшһә икән бөтәбеҙ.

Ҡунаҡ ҡына булып ҡайтыуҙарҙы,
Ах, һиҙәлер атай йөрәге:
Моңһоулана бара ҡараштары,
Һүлпәнәйә бара көрәге.

Барыбыҙ ҙа ерҙә ҡунаҡ ҡына —
Уҙмаҫ, тимә, уҙыр ғүмерҙәр.
Бер көн килеп беҙҙең йорт һуҡмағын
Кем таҙартыр икән, кем көрәр?

Тыуған тупраҡ беҙгә рәнйер әле,
Тыуған ауыл хаҡлы үпкәләр.
Бәһлеүәндәй ике ағайым бар,
Хур ҡыҙындай ике апайым бар,
Барыбыҙ ҙа ниңә ситтәләр?

---

* Азамат Тимеров көйө.

Ә атайым тышта ҡарҙар көрәй,
Һаҡланмай ҙа ҡышҡы һалҡындан.
Күҙҙәренән йәштәр тамды микән —
Ынйы һаҡалында боҙ туңған.

*1990*

## Ауылым ағайҙары

Ағайҙарым көтөп торған һымаҡ,
Ауылыма ҡайтһам гел шулай:
Береһе миңә бәшмәк йыйып ҡуя,
Гармун тартып береһе ҡаршылай.

Зөфәр ағай, Илдар ағайымдың
Дуҫ-иштәре ошо ир-аттар,
Ағайҙарым ҡаршы ала (а)лмаған,
Һеҙҙең яҡҡа атлай аяҡтар...

Рим ағайым, ана Рәсүл ағай,
Илгизәр һәм Сәғит ағайҙар
Ҡайтҡаныма әллә ҡыуаналар,
Әллә миңә йәлләп ҡарайҙар?!

Ағайҙарым — гүрҙә. Һәр береһе
Типһә әгәр тимер өҙөрҙәй,
Һәр береһе һеңлеләре өсөн
Йөрәктәрен өҙөп бирерҙәй...

Зыяратҡа барып доға ҡылам,
Ҡорбан салам, үтәп йолаһын,
Шулай иртә китеп барырҙар, тип,
Ағайҙарҙы кем һуң уйлаһын?!

Тереләре —
Туған булмаһа ла —
Ҡайтҡанымда ҡуя иңдәрен
(Ғәфү итерһегеҙ, был йырымда
Иҫләмәһәм әгәр кемдәрен)!

Ағайҙарым төҫө итеп микән,
Үҙҙәренсә улар ярата:
Мин ҡайта, тип, балыҡ ҡармаҡлайҙар,
Бал-ҡаймағын тейәп оҙата...

Ринат ағай, мәтрүшкәләр тотоп,
Оҙатырға килә йүгереп!
Рәхмәт һеҙгә!
Ағайҙарым һымаҡ,
Торғанығыҙ өсөн үҙ күреп...

*декабрь, 2015*

## Еңгәләргә мәҙхиә

Ирендәре — сейә, ҡыҙыл сейә,
Ҡашҡайҙары — ҡара дуғалыр,
Еңгәләрем йәтеш, инде йәтеш!
Ағайҙарым һәйбәт, шуғалыр.

Бик оҙаҡҡа әгәр айырылып
Китеп барһам ауыл яғынан,
Ағайҙарҙы түгел, иң беренсе,
Еңгәләрем, һеҙҙе һағынам!

Ағайҙарҙан яҡын еңгәләрем.
Әйтеп ҡара шунан: сит бауыр!
Һәйбәт ағай булыу бер ни тормай,
Һәйбәт еңгә булыу бик ауыр...

Еңгәләрем йәтеш: сая ҡараш,
Йәнде ылыҡтырыр буй-һындар.
Ағайҙарға ҙур мәртәбә өҫтәп,
Еңгәләрем иҫән булһындар!

## Рауилә еңгәм иҫтәлегенә

Олотауҙың итәгендә
Еләк ҡотороп уңған.
Йыр һуҙа еңгә эргәлә,
Күнәге күптән тулған.

Мин — хыялый, хәбәр тирәм,
Күҙ ҡыҙмай артығына.
Еңгәләрҙең аҡылы күп,
Минеке — ярты ғына.

Мин — хыялый шаян ҡыҙсыҡ,
Аңланым тик һуңынан:

Иң шаталаҡ еңгәйемдең
Эсе тулы ут булған.

Яман сир йыҡты еңгәне,
Дауаһын табалманы.
Киткән саҡта ауыҙына
Еләк тә ҡабалманы.

Олотауҙа еләк уңған,
Яңғыҙ нисек тирәйем?!
Мәҙәк һөйләп көлдөрөргә
Юҡ шул инде еңгәйем.

Шау еләкле тау битләүе
Еңгәмдән ҡалған бүләк.
Күнәгем дә тулы хәҙер,
Аҡылым да түңәрәк.

Инде үҙем еңгә булып,
Ауылдан киттем йыраҡ,
Сит яҡтарҙа әллә ниңә
Йәйҙәр ҙә ҡырыҫыраҡ.

Тау битендә еләк тирәм
(Күнәгем күптән тулған!),
Буҫығып илар урында,
Ҡысҡырып көлгән булам...

## Яңғыҙ ҡатын

Бер ҡайҙан да ярҙам көтмәй,
Бер кемгә лә ҡарамай,
Яңғыҙ ҡатын бесән саба,
Эше ерле ырамай.

Бакуй булып арттарынан
Эйәреп бара ҡайғыһы.
Көлөп үтә ҡайһы берәү,
Йәлләп үтә ҡайһыһы.

Тән арыуы баҫа микән
Һағышының һарыһын,
Хатта көлөп үтһәләр ҙә,
Ғәфү итә барыһын.

Ә бит уға ниндәй исем,
Ниндәй дан тағылмаған!
Яңғыҙ ҡатын бесән саба –
Салғыһы янылмаған!

## Атай йорто

Тыуған йортто һатып ебәрҙеләр,
Түләп алыр хаҡтар тапманым.
Ҡыйып үтә алмай торам бөгөн
Ауылымдың баҫыу ҡапҡаһын.
Хыял ҡорам үҙем: байырмын да
Мин булырмын бер мәл аҡсалы.

Атай һалған йортто ҡайтарырмын,
Инәкәйем баҡҡан баҡсаны.
Ҡайтарырмын бер мәл. Ҡасан да бер
(Оло минең шуға өмөтөм)!
Ошо йортһоҙ, гүйә, донъям китек,
Ошо йортһоҙ, гүйә, мин йәтим.
Ул йорт миңә атай һымаҡ ине,
Ул йорт ине минең инәйем.
Ауылдаштар, ҡайһығыҙға ғына
Ҡайттым, тиеп, шаҡып инәйем?!
Тыуған йорт — ул кемгә һатылһа ла,
Йөрәгемдә минең ҡаласаҡ,
«Китмә!» — тиеп баҫыу ҡапҡаһында
Үкһеп илап ҡалды бала саҡ.
«Китмә!» — тине алсаҡ ауылдаштар,
Һүҙҙе йыҡмай алға атланым.
Тәҙрәләргә баҡтым, ләкин унда
Инәйемдең күҙен тапманым...
Ауылымдың иҫке генә өйө
Минең өсөн ул бит ҡот ине,
Атайымдан ҡалған йорт ине ул,
Инәйемдән ҡалған йорт ине...

*декабрь, 2016*

## Мәҙинә-гөлкәйем

«Ҡулъяулығым икәү ине,
Береһе һыуҙарға аҡты...» —
Ошо йыр гел хәтерләтте
Бәхетле бала саҡты.

Бәләкәйҙән ошо йырҙы
Отоп алдым тиҙ генә:
Һеңлем, тиеп һөйөп торған
Апайым бит — Мәҙинә.
Бер туған ғына апайым,
Түгел бит ул ят бауыр,
Күңелдәре сикһеҙ яҡты,
Яҙмышы сикһеҙ ауыр...
Өнһөҙ генә күтәрҙе ул
Төшкәнде иңдәренә.
«Мәҙинә-гөлкәйем», — тиеп,
Янманы кемдәр генә!
Миңә лә был йыр ҡәҙерле —
Апайымдан иҫтәлек.
Һағыныуҙан ғына ғүмер
Китһә икән өҫтәлеп!
Ҡырыҫ йөҙлө был донъяла,
Апайым киткәс, һыуыҡ,
Иртә таңдан шылтыратып,
Хәлемде һораусы юҡ,
Ашығып хәбәр һөйләүсе
Бер әрләп, бер көлдөрөп...
Кинәт кенә китеп барҙың
Барыһын үкендереп.
Кескәй генә һағышты ла
Нисектер һиҙә инең,
Күңелемде йыуатырлыҡ
Һүҙҙәрең теҙә инең.
Барса туған, нәҫел-затты
Йәшәнең һин үҙ күреп,

Хәл белергә һәр береһенә
Барыр инең йүгереп.
Дәфтәреңдә һәр беребеҙгә
Йырҙарың әҙер ине,
Һөйләгәнең — изге доға,
Күргәнең — йәбер ине...
Мәҙинә апай, гөлкәйем,
Йырың тағы илатты,
Апайҙарым икәү ине,
Апайҙарым икәү ине!
Береһе гүрҙәргә ятты...

*19.01.17*

## Рәфисә апайыма

Ни арала, апай, биш баланан
Ике бөртөк кенә ҡалғанбыҙ,
Иремәҫ тә кеүек һис ҡасан да
Күңелемә ҡуша туңған боҙ.
Тыуған өйгә (ул һатылды инде!)
Эркелешеп ҡайтмаҫ бишебеҙ.
Киткәндәргә доға оҙатыусы
Ике генә бөртөк кеше беҙ.
Оҙонораҡ булһын һинең ғүмер,
Иртә китмәһәмсе мин үҙем,
Был донъяла, ай-һай, ҡыйындыр ул
Тороп ҡалыуҙары бер үҙең...
Әсәйем дә, атайым да һин бит,
Апайым һәм ике ағайым —

Барыһын да һинең йөҙҙә күрәм,
Ҡайҙа әле усаҡ яғайым!
Саҡырайым сәйгә.
Икәүләшеп беҙ иҫләрбеҙ күмәк саҡтарҙы,
Йылы һүҙең, йылы ҡараштарың
Күңелдәге боҙҙо аҡтарҙы.
Килсе, апай! Йасин бағышлайыҡ,
Киткәндәрҙең рухын шат ҡылып,
Раббыбыҙҙың киң ҡөҙрәте менән
Ҡәберҙәрҙе нурлар яҡтылыҡ.
Килсе, апай, юҡһа юғалтыуҙар
Йөрәгемде өтә, ҡуҙ кеүек,
Биш баланан икәү генә ҡалдыҡ:
Беребеҙ әсәй, беребеҙ ҡыҙ кеүек.
Биш баланан икәү генә ҡалдыҡ,
Имен-аман, апай, торайыҡ,
Бер-беребеҙгә терәк булайыҡ беҙ,
Бер-беребеҙгә кәрәк булайыҡ!

*19.01.17*

## Дыуан бульвары

Автобустар үтә бер-бер артлы,
Троллейбустар үтә тағылып,
Баҫып торам Дыуан бульварында
Тыуған еркәйемде һағынып.
Аңлайым да, был алданыу ғына,
Был атама ғына ни бары:
Юҡ йомошто бар итәм дә киләм,
Ғәзиз миңә Дыуан бульвары!

Бары яҙыу ғына булһа ла бит,
Ул бит минең, минең Дыуаным!
Тыуған яҡҡа ҡайтып килгән кеүек,
Баҫып торған булам ҡыуанып.
Тыуған яҡ, тип, ауыҙ асыу ҡайҙа!
Өйҙә көтә мине ҡатайым.
«Дыуан» кибетенән* күстәнәскә
Берәй нәмә алып ҡайтайым!

*4.04.2017*

## Аҡ намаҙлыҡ халҡым түшәһен!

Минең халҡым, аҡ биләүгә төрөп,
Ҡаршы ала тыуған бәпесте.
Күңелдәре яҡты булған өсөн
Ярата ул шулай аҡ төҫтө!

Минең халҡым, йола, әҙәп һаҡлап,
Аҡ мендәргә килен төшөрә,
Сәфәр сығыр булһа, аҡ юл теләй,
Ап-аҡ һөттән ризыҡ бешерә.

Минең илем — әүлиәләр иле!
Фатихалы был ер шуғалыр:
«Аллаһ!» — тиеп улар зекер әйткән,
«Халҡым!» — тиеп ҡылған доғалар!

---

* «Дыуан» кибете — Өфө ҡалаһында урынлашҡан сауҙа комплексы.

Әүлиәләр — Хоҙай бәндәләре:
Һинең атай, минең олатай.
Сабыйҙарға ҡара: нисек улар
Доғаларҙы ихлас ҡабатлай!

Әүлиәлек беҙҙең ҡанда бит ул!
Аҡ намаҙлыҡ халҡым түшәһен!
Аҡһаҡалы булып ошо ерҙең,
Ағинәйе булып йәшәһен!

*2013*

## Башҡортостан

Башҡортостан!
Һиндә йыр һәм илһам,
Һиндә иман, һиндә ҙур аҡыл!
Тик бер үҙең шулай ихласһың һин,
Тик бер үҙең шундай ҡунаҡсыл!

Башҡортостан!
Бары һиндә генә
Әлмисаҡтан килгән саялыҡ,
Нисә быуат Рәсәй һынлы Рәсәй
Иңдәреңә тора таянып.

Башҡортостан!
Һине данлап туймаҫ
Уралымда үҫкән ҡыу ҡурай.
Исемең бит һәр бер башҡорт өсөн
Изге доға булып яңғырай!

Башҡортостан!
Йәнгә шундай ғәзиз
Туған телдең һәр бер хәрефе!
Нисек ғорур яңғырай: «Баш-ҡорт-ос-тан!»,
Ниндәй ҡеүәт бирә һүҙ: «Өфө!»

Башҡортостан!
Һин бит әсәм кеүек,
Сәңгелдәгем һиндә бәүелгән,
Һин бит — сәләм миңә киләсәктән,
Һин — аманат үткән дәүерҙән!

Башҡортостан!
Минең изге ерем,
Ата-бабам яҡҡан — тәү усаҡ,
Һин үткәнем минең, һин — бөгөнгөм,
Киләсәгем — балҡып тыуасаҡ!

*2016–2017*

## Бәхетемдер, тимен...

Башҡортостан —
Хазиналар иле:
Аяҡ аҫтым тотош йәшмәнән,
Ә күктәрҙә күпме шағир һүҙе
Утлы йәшен булып йәшнәгән!

Бәхетемдер, тимен — шул йәшендән
Йөрәгемә ҡапты бер ялҡын.
Тыуған ерем шау аҫылташ булһа,
Сәсән телле халҡым — мең алтын!

## Мөздәлифә* доғаһы

*(Хаж көндәлегенән)*

Мөздәлифә! Күкһел таштарыңды
Барлай-барлай йыйҙым атмаға.
Теге шайтанға ул тейер, бәлки,
Туған телде йөрөй һатмаға.

Мөздәлифә! Ниндәй доға уҡып
Ҡурсалайым икән халҡымды?!
Туған телкәйемде быуыр өсөн
Иблис ғәскәрҙәре ҡалҡынды.

Мөздәлифә! Эй тырышып йыйҙым,
Сәпкә тейһен инде был таштар!
Тыуған илкәйемдә доға көтә
Тел һағына баҫҡан яҡташтар.

Мөздәлифә! «Аллаһ бөйөк!» — тиеп,
Һәр бер ташҡа ҡеүәт һораным,
Минең гонаһтарым ҡалһа ҡалһын,
Милләтемде ҡотҡар, Илаһым!

*2017*

---

* Мөздәлифә яланында Хаж ғәмәлен үтәүселәр шайтанға атыр өсөн таш йыя.

## Булһаҡ ине илгә беҙ терәк!

*БСТ каналының «Көндәлек» тапшырыуын ҡарағандан һуң*

Шәхестәрҙе ҙурлау, рух үҫтереү —
Маҡсаттарың изге, «Көндәлек».
Туған телгә һөйөү тәрбиәләү —
Ул эшебеҙ булһын көндәлек.

Белем менән беҙ бит мәртәбәле,
Белем менән беҙ бит көслөрәк,
Зыялы ла башҡорт балалары
Булһаҡ ине илгә беҙ терәк!

Айырым булһаҡ, ҡом бөртөгө кеүек,
Бергә булһаҡ, беҙ тау саҡлыбыҙ,
Улар беҙгә маяҡ булды, тиеп,
«Бишле» ҡуйһа ине халҡыбыҙ!

Хоҙай алдарында яуап тотһаҡ
(Эштәребеҙ бөткәс көндәлек),
Әйтһәк ине: «Бушҡа йәшәмәнек,
Халҡыбыҙҙы алға өндәнек!»

# ТОРАТАУ ДӘФТӘРЕНӘН

## Ил инәһе әйткәне

Аң булығыҙ! Ни яҙһаң да,
Түҙә ҡағыҙ.
Торатауға, зинһар өсөн,
Ҡағылмағыҙ!

Кем таларға бирә тыуған
Төйәктәрен?!
Ҡуҙғатмағыҙ әүлиәләр
Һөйәктәрен!

Тамерландың ҡәберен асҡас,
Һуғыш сыҡҡан,
Ә Торатау Еребеҙгә
Беҙҙең ҡалҡан.

Торатау бит бөкө һымаҡ —
Башы таҡыр.
Ҡуҙғатһағыҙ уны, Ерҙә
Туфан ҡалҡыр!

Ҡуҙғатһағыҙ, килер Ергә
Ахыр(ы)заман!
Йә, әйтегеҙ, кемдәрегеҙ
Бахыр һаман?!

Аҡса ҡоло! Уйламаған
Алдағыһын...

Аҫаба йән шуны нисек
Аңламаһын!

Һеҙҙең өсөн оялыштан
Булдым көйөк...
Торатауға ҡағылмағыҙ,
Аллаһ Бөйөк!..

*12.08.11*

## Батырҙарҙың әйткәне

Торатауға ҡағылмағыҙ, зинһар,
Ул байҙарҙың быуа алҡымын.
Тауын ғына һаҡлар хәле барҙыр
Ажар рухлы башҡорт халҡының?!

Ил байлығын уйһыҙ таратырға...
Шуның өсөнмө ни баш һалдыҡ;
Һеҙ түгелме ергә ысын хужа,
Һеҙ түгелме илдә баш халыҡ?!

Милләттәштәр! Тауға йоғоноусы
Бахыр ғына йән бит, бер өтөк,
Батыр ирҙәр ҡайҙа? Ни арала
Бөтөргәндәр һеҙҙе өркөтөп?!

Ил ирҙәре, ғәмһеҙ булмағыҙсы,
Күтәрегеҙ әле башығыҙ!
Талпан булып ергә йәбешегеҙ,
Ҡалҡан булып илгә баҫығыҙ!

Илгә ҡалҡан булыр инек беҙ ҙә,
Ятып ҡына ҡалдыҡ алыҫта.
Торатауҙы яҡлай алмаһағыҙ,
Ер-һыуҙарҙы һаҡлай алмаһағыҙ,
Барыһы ла һеҙҙең намыҫта!
Барыһы ла һеҙҙең намыҫта...

*12.08.11*

## Сәсәндәрҙең әйткәне

Аслы-туҡлы түгелһең,
Шыр-яланғас түгелһең:

Өҫтәлеңдә һыйҙар бар,
Һимертелгән ҡуйҙар бар,
Күңел асһаң, туйҙар бар,
Ҡайғы баҫһа, уйҙар бар.

Бер хәсрәт һәм ҡайғыһыҙ,
Йәшәй бөгөн ҡайһығыҙ?

Бер хәсрәтһеҙ шул йәшәй —
Кемдең йәнен май бөргән,
Бер ҡайғыһыҙ шул йәшәй —
Кем иленә төкөргән.

Һин бахырмы был илдә,
Һин батырмы был илдә?

Бахыр булһаң, боҫоп ят,
Баш күтәрмәй, иҙәндә.
Батыр булһаң, ҡаршы сыҡ
Илгә бәлә килгәндә!

*12.08.11*

## Аҡһаҡалдар әйткәне

Һай, аҫаба ырыу башлыҡтары,
Һеҙ түгелме бында ҡор йыйған?
Торатауҙың ҡөҙрәттәре сикһеҙ:
Көсөн бирә бында бар Йыһан.
Һеҙ бит быны күптән беләһегеҙ,
Кәрәкме ни әйтеү ҡабаттан?
Хоҙай беҙҙе ошо изге ерҙең
Һаҡсылары итеп яралтҡан.
Хәтерегеҙ мүкләндеме әллә
Тауыш-тынһыҙ ниңә бөтәгеҙ?
Йыйылышып йәнә ҡор йыяйыҡ,
Торатауҙа һеҙҙе көтәбеҙ!
Торатауҙа булыр бөтәбеҙ!

*12.08.11*

## Әүлиәләр әйткәне

Ишелһә лә тауҙар
Бер-бер артлы,
Кире аҡһалар ҙа

Йылғалар,
Эй, Торатау!
Ҡағылмаҫтар һиңә:
Һаҡлап торор
Беҙҙең доғалар...
Хоҙай ҡушмаҫ
Һине тәләфләргә,
Ә шулай ҙа
Уяу булығыҙ!
Дөрөҫ микән
Йәшәү рәүешегеҙ,
Иманлымы
Ҡыуған юлығыҙ?!
Кешеләр бит хәҙер
Ни эшләптер
Уйһыҙ-ғәмһеҙ
Ҡурсаҡ һымаҡтар...
Торатауҙы
Эйе, беҙ һаҡларбыҙ,
Үҙегеҙҙе бына
Кем һаҡлар?!.

*12.08.11*

* * *

Телһеҙ, моңһоҙ мин кем инде?
Йортһоҙ-илһеҙ — мин ҡайҙа?
Ауыҙлыҡһыҙ уйҙар кеүек,
Аттар саба туғайҙа...

Аттар саба. Азатлыҡтың
Белә улар хаҡтарын.
Төнгөлөккә тышамағыҙ,
Зинһар, башҡорт аттарын!

Тышамағыҙ! Ер күп бит ул
Рәсәй тигән киңлектә.
Исмаһам, бер таңға саҡлы
Аттар сапһын иректә!
Аттар сапһын иректә...

*12.04.2002*

## Башҡортлоҡтоң орлоҡтарын сәсәм

Урыҫ мәктәбендә дәрес бирәм,
Өйрәтәмен башҡорт теленә.
Кем өсөндөр ҡыҙыҡ минең дәрес,
Кем өсөндөр сәйер күренә.

Телһеҙ башҡорттарҙы телле итеү —
Бөгөн минең изге бурысым.
Башҡорт менән бергә белем ала
Татар, мордва, сыуаш, урыҫым.

Телде белеү төрлө милләттәрҙе
Дуҫлыҡ, татыулыҡҡа өйрәтә.
Тик бер һүҙгә теле байыһа ла,
Күңелдәре байый меңләтә.

Башҡортлоҡтоң орлоҡтарын сәсәм.
Эйе, ауыр минең был эшем.
Килер бер көн, ағас үҫеп сығыр,
Һәм ул ағас бирер емешен.

Ә әлегә өс һүҙ белһәләр ҙә,
Күңелемдә арта ырыҫтар.
«Һаумыһығыҙ!» — тиеп саф башҡортса
Һаулыҡ ҡуша миңә урыҫтар.

* * *

Тиңләмәгеҙ аҡҡоштарға,
Күммәгеҙ алҡыштарға,
Иҫем китмәй сәхнәләрҙә
Уйнаған балҡыштарға.
Тауҙар үре булған саҡта
Нимә ул сәхнә түре?!
Аҡҡош булғым килмәй минең,
Булғым килә күк бүре.
Сәхнәгә менеү — мәртәбә,
Тауҙарға менеү — ирлек.
Инә бүре булғым килә
Халҡымды эйәртерлек.
Бүре булам, ырыуымды
Йотмаҫ борон ҙур йыһан.
Һеҙ бит мине танырһығыҙ
Айға ҡарап олоһам?!
(Һуң кемдәлер йәшәйҙер бит
Мин ышанам: ул тере!

Ырыуыма юл күрһәткән
Күк бүренең хәтере?)
Халҡыма мылтыҡ тоҫҡайҙар,
Ауыр замандар килә,
Йә, әйтегеҙ, тағы кемдең
Бүре булғыһы килә?!

*2003*

## Мин бит әле башҡорт ҡыҙы

Үтәйемсе, атта елеп,
Тау-урманды, ялан-ҡырҙы,
Саялығым нәҫелемдән —
Мин бит әле башҡорт ҡыҙы.
Һығылып торған өҫтәлемдә
Ҡымыҙ ҙа бар, икмәк-тоҙо,
Тәбиғәттән ҡунаҡсылмын —
Мин бит әле башҡорт ҡыҙы.
Йырлайымсы, күкрәк кереп,
Оҙон көйгә моңло йырҙы,
Күңелемдә меңйәшәр моң —
Мин бит әле башҡорт ҡыҙы.
Ата-бабам усағының
Йөрәгемдә дөрләй ҡуҙы,
Төйәккенәм — Башҡортостан,
Ә мин үҙем башҡорт ҡыҙы!

*1989*

## Ҡыуанмағыҙ!

Йәнем ҡубарыла, һөйләһәләр
Тыуған илкәйемде бөлгән, тип,
Кемдер уға бысраҡ өйгән, тип,
Кемдер унан әсе көлгән, тип.
Бер бөгөнмө беҙгә ҡаныҡҡандар,
Һөйләгәндәр әсе ялғанын.
Онотолған, тиеп уйлайҙармы
Ошо ерҙең көлгә ҡалғанын?!
Көлгә ҡалғас, ҡабат ҡалҡыр өсөн
Ниндәй ҡөҙрәт кәрәк, билдәһеҙ?!
Илкәйемә бысраҡ өйгән йәндәр,
Минең өсөн тере һөлдә һеҙ!
Тере һөлдә... Ҡурай моңон көткән
Ҡәберендә һуңғы башҡорттоң,
Ә бит һеҙҙе шундай яҡын күреп
Ҡабул иткән минең баш йортом.
Тыныс урын эҙләп һыйынғандар,
Йә, әйтегеҙ әле, һеҙме шәп?
Аҫаба ла башҡорт ерҙәрендә
Минең халҡым түгел килмешәк!
Ҡыуанмағыҙ! Әле һеҙ белмәгән
Халҡым күңелендә серҙәр бар.
Урап та ғына ҡайтыр ерҙәр ҙә бар,
Ҡурай ҙа ғына тартыр ирҙәр бар!

## Ағинәйҙәр маршы

Ағинәйҙәр күңеле — талир тәңкә,
Шуға нурлы минең баш йортом.
Милләт рухын бәпләр ил инәһе барҙа
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!

Ағинәйҙәр аҡылы — алтын һандыҡ,
Ябай түгел улар: сер-ҡатын!
Иргә иңен терәр ил инәһе барҙа
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!

Ағинәйҙәр рухы — изге бетеү,
Ят күҙҙәрҙән һаҡлар ил ҡотон.
Ил, тип, доға ҡылыр ил инәһе барҙа
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!

*ноябрь, 2015*

## Ил өҫтөндә иң яманы...

Ил өҫтөндә иң яманы —
Эскән бисә,
Ирҙән иргә, ҡулдан ҡулға
Күскән бисә.
Ил өҫтөндә иң яманы —
Эскән ирҙәр,
Ҡатын-ҡыҙҙың фиғеленә
Күскән ирҙәр.
Ил өҫтөндә иң яманы —

Эскән бала,
Беләгенә ағыу ҡаҙап
Үҫкән бала.
Эсһә бисә, эсһә ирҙәр,
Эсһә бала,
Был донъяла ҡыуанырлыҡ
Низәр ҡала?!

* * *

*Н. Некрасовҡа эйәреп*

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Һылыулығы телдән яҙҙыра,
Һыны рәссамдарҙы әсир итә,
Ҡараштары шиғыр яҙҙыра.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Һеңдереп тә генә һүҙ әйткән.
Күңелдәрҙе аяп, йәнде имләп,
Ҡылған хаталарҙы төҙәткән.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Ирҙәр күтәрмәҫлек йөк тартҡан,
Дошмандарға зәһәр уғын атҡан,
Сабып килгән атты туҡтатҡан.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Бар халҡымдың рухын күтәргән,

Йәнкәйҙәрен тапап уҙһалар ҙа,
Юғарыраҡ улар күптәрҙән.

Илкәйемдә шундай апайҙар бар,
Бәндәбикә ише һәр бере!
Ғәзиз күреп, йәнен иретәйек,
Ус төбөндә генә йөрөтәйек,
Ҡыҫҡа бит ул бәндә ғүмере!

## Күрешергә һуҙ усыңды...

Миллионлаған башҡорт башын һалды,
Миллионлаған!
Түгел йөҙ, ҡыр(ы)ҡ.
Әле һаман беҙҙең баш осонда
Яуыз көстәр төйнәй йоҙ(о)роҡ!

Беҙ бит, Рәсәй, һиңә тоғро ҡалдыҡ,
Тоғролоҡҡа тарих өйрәтте.
Туған күреп беҙгә ус һуҙғанда,
Беҙ һуҙабыҙ һиңә йөрәкте!

Миллионлаған башҡорт башын һалды,
Миллионлаған!
Түгел йөҙ, ҡыр(ы)ҡ.
Һинең ҡулыңдағы бармаҡтар беҙ,
Бармаҡтарҙан төймә йоҙ(о)роҡ.

Бер бөртөгө унының һыҙлаһа ла,
Ауыртырға тейеш бөтә ҡул!
Нисек инде һинең ҡул суҡтарың
Береһе иптәш булһын, береһе — ҡол?

Беҙ бит, Рәсәй, һиңә тоғро ҡалдыҡ!
Был ерҙәме, ситтә, алыҫта
Күпме аҫыл ирҙәр башын һалды?!
Барыһы ла һинең намыҫта!

Бар милләттәр һине туған күреп,
Йәшәһендәр, тиһәң, дуҫ булып...
Бөйөк Рәсәй! Бармаҡтарың торһон
Күрешергә һуҙған ус булып!

*2010*

## Ултыртайыҡ ҡарағайҙар!

Ҡарағайҙы ауҙарҙылар,
Торманылар һис бер аяп.
Ул йыҡылғас, урынында
Ҡалды төпһә, ҡалды таяҡ.

Ҡарағайҙы ауҙарҙылар —
Ул урманда берәү ине,
Йәш үҫенте ағастарға
Таяныс һәм терәү ине!

Дауылдарҙа ҡалҡан булған
Ундай ағас үҫә һирәк,
Ул йығылғас, урындарын
Баҫып алды тал да тирәк.

Ә илде һуң кем ҡурсалар
(Арта бара шөбһәләрем
Күргән һайын урмандарҙа
Ҡарағайҙың төпһәләрен)?!.

Тал да тирәк әрһеҙ инде,
Ҡайҙа ғына юҡтар улар
(Шыйыҡ талдан һуйыл эшләп,
Халҡыбыҙҙы һуҡтыралар)!..

Бер көн минең башымды ла
Оҙатһалар Кроношпанға,
Кемдер әйтер: «Батыр ине!»,
Кемдер әйтер: «Алдашҡанға!»

Яла яғып маташырҙар,
Ундай халыҡ ялағай ныҡ,
Тик шыйыҡ тал үрсей алмай,
Үҫкән ерҙә ҡарағайлыҡ!

Түрҙәгеһен ҡолатһалар,
Төпкөлдәрҙә бар ағайҙар!
Бейек тауҙың үренә лә,
Ил-йортобоҙ түренә лә
Ултыртайыҡ ҡарағайҙар!
Ултыртайыҡ ҡарағайҙар!!!

## Аманат

*Милли батырыбыҙ Салауат*
*Юлаевҡа 260 йыл тулыу айҡанлы*

Һиҙмәнегеҙ. Барығыҙҙың иртән
Ҡағып сыҡтым күңел ишектәрен,
Юлай улы Салауат рухына, тип,
Доға ҡылғандарҙы ишетмәнем.

Юғалттығыҙ микән ҡиблағыҙҙы,
Бүтән микән хәҙер асманығыҙ?
Барығыҙҙың күңеле бикле ине,
Берегеҙ ҙә ишек асманығыҙ!

Тәҙрәләргә килдем. Таң атыуға
Асырһығыҙ, тиеп, ҡорғандарҙы,
Тик күрмәнем, салауаттар әйтеп,
Намаҙлыҡта уяу торғандарҙы.

Ғәфләт мендәренә башын терәп,
Өҫтәренә ҡаплап ҡалын юрған,
Иҙ(е)рәп китеп йоҡлай ине халҡым,
Ғәзиз халҡым — рухы һындырылған!

...Мәңгелектең һалҡын ҡосағына
Кире борам тиһәм юрғаларым,
Салауаттың рухы шат булһын, тип,
Бер изге зат ҡылды доғаларын...

Ҡабул булһын доға:
Хужа итеп Хоҙай илгә бирһен һөйөклөһөн!
Танырһығыҙ уны,
Аманатҡа
Ҡалдырып китәм рухым бөйөклөгөн...

## Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға?

Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға?
Алдарымда ята аҡ ҡағыҙ:
Һеҙ үҙ-ара мөлкәт бүлешкәндә
Бер-берегеҙҙе, зинһар, ҡаҡмағыҙ!

Ни үкенес, әгәр ҡыҙыҡһағыҙ
Мал-мөлкәткә, затлы әйберҙәргә,
Өйрәнегеҙ, йәндәй туған күреп,
Бер-берегеҙҙе тәүҙә ҡәҙерләргә!

Һаулығығыҙ булһын! Аҡсаға ни
Һатып алып була йөҙ юрған,
Тик булмаһын һөмһөҙ әҙәмдәр, тип,
Һеҙҙең тарафтарҙан йөҙ борған!

Иманығыҙ булһын! Иманһыҙлыҡ —
Ул ҡыуаныс түгел, ҙур ғәрлек!
Изге эштәр күберәк башҡарығыҙ,
Бәндәселек менән ҡай саҡ ҡылған
Бар гонаһтар өсөн түләрлек!

Балаларым! Китеп барһам әгәр,
Кәфендәргә мине төрөгөҙ,
Риза булһын һеҙҙән Хаҡ Тәғәлә,
Тыуып ҡына үҫкән ерегеҙ.

Риза булһын халҡым! Ейәндәрем
Туған телдең бәҫен һаҡлаһын!
...Бер көн килеп әгәр Әжәл ҡаҡһа
Мин йәшәгән йорттоң ҡапҡаһын,

Илашмағыҙ! Үкенерлек булмаҫ
Әйткәнемдә теүәл тотһағыҙ!
Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға?
Алдарымда ята аҡ ҡағыҙ...

## Бауырҙашым, тиеп...

Ҡаҙағстан — данлы Абай ере,
Йәнтөйәге изге Жамбылдың,
Рух-ҡеүәтең мине әсир итте,
Ҡайтыу менән шуға һағындым!

Һоҡландырҙы далаң киңлектәре,
«Үҙ илемдә!» — тигән иркенлек.
Азатлыҡтың тәмен тойҙом шул саҡ,
Булһа ла ул бары бер көнлөк.

Минең дә бит халҡым шундай ғорур,
Ихласыраҡ инде унлата!

Ҙур киләсәк юрап милләтемә
Алып ҡайтайымсы аҡ бата.

Рух тигәнең, ул бит һәр башҡорттоң
Хәтер төпкөлөндә һаҡлана...
Ҡыйыулығың менән арбаның да
Күҙҙе ҡыҙҙырҙың шул, Астана!

Үҙ илеңдең ысын хужаһы һин,
Эй, оҡшай ҙа ошо һыҙатың!
Бауырҙашым, тиеп ҡабул иттең,
Именлектәр теләп оҙаттың...

*2013*

## Оҡшашлыҡ

Һайлағанда баҙарҙарҙа
Алманың ҡыҙылын тик,
Һорай ҡуйҙы һатыусыһы:
«Һин Шәреҡ ҡыҙымы?» — тип.

Йән тартмаһа, ҡан тарталыр,
Тап иттегеҙ һарт ҡыҙын.
Ырыуымдың тарихы ла,
Үткән юлы ла оҙон.

Һеҙҙзең илде күрмәһәм дә,
Иңләйем уйҙарымда.
Миңә оҡшаш ҡыҙ йәшәйҙер
Һырдарья буйҙарында.

Мин үрәмен ике толом,
Ул үрәлер етенән,
Көн дә ҡояш иркәләйҙер
Уны ҡуңыр битенән.

Уға сүл ҡомо яҡындыр,
Миңә — ғәзиз аҡ ҡарым.
Йәшәр өсөн был донъяла
Көс-дәрт бирә Уралым.

...Һайланым да баҙарҙарҙа
Алманың тик ҡыҙылын.
Яуап бирҙем: «Ырыуым — һарт,
Ләкин башҡорт ҡыҙымын!»

## Таш-ҡатын

*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел*
*һәм әҙәбиәт институтының*
*ишеге алдында урынлаштырылған таш менгерҙе күргәс...*

Күҙҙәремә ҡапыл салындың да
Тыныслыҡты минең ҡаҡшаттың,
Сырайҙарың үтә таныш һымаҡ,
Кемдең һыны һиндә, Таш-ҡатын?!
Һәйкәл итеп тергеҙерлек булғас,
Ябай булмағандыр асылың,
Йөрәгемә ҡеүәт өҫтәй ҡеүек

Саҡматаштан ғына хасил һын.
Тәрән мөхәббәтен белгерттеме
Һәйкәлеңде уйған уҙаман,
Килер быуындарҙы уйға һалып
Торғаныңа инде ни заман?!
Һине Аллаһ күреп, бер осорҙа
Табындымы әллә мәжүси?
Ҡайғыларҙан ташҡа әйләндеңме,
Йөрәгеңде өттө кем үсе?
Тораташҡа әйләнерлек итеп
Рәнйетте һуң һине, әйт, кемдәр?
Хәйер, күпме генә ялынһам да
Өндәшмәҫһең, беләм, таш меңгер.
Мин кем инде һинең алдарыңда,
Ә шулай ҙа һының бик яҡын,
Сал быуаттар аша икебеҙҙе
Ниҙер бәйләй кеүек, Таш-ҡатын!
Тик бер генә ымың етер миңә,
Таш булһаң да, эшлә ишара!
Күңелем бит һинең менән бергә
Яуға сапҡанына ышана.
Сырайҙарың таныш... Йәндә һағыш...
Күтәрергә уны көс етмәй,
Эй, ҡатын-ҡыҙ, ҡайһы быуаттарҙа
Йәшәгәнең булды интекмәй?!
Һинең һынды оло сабырлыҡтың
Һәйкәленә хатта оҡшаттым,
Ни булһа ла, йәнгә ғәзизһең һин,
Ҡәҙерләһең миңә, Таш-ҡатын!

## Өнһөҙләк

Таш йорттарҙы, гүйә, йәнле итә
Үҙебеҙҙең милли орнамент,
Ошо матурлыҡҡа хайран ҡалып,
Күҙҙе алмай торам, арбалып.
Боронғолоҡ күсә йәндәремә,
Хәтерләтмәй ҡалам сит илде,
Ата-бабам Урал тауҙарына
Ырып яҙған тарих шикелле,
Бик күп әйбер һөйләй миңә таштар.
Кәмһетелгән. Еңгән. Онталған...
Әммә бирешмәгән! Ана, нисек
Мең төҫтәрҙә балҡый баш ҡалам!
Түбәтәйле ҡарттар сифатында
Сәләм биргән кеүек таш йорттар.
Их, йәшәһен ине шул йорттарҙа
Милли кейем кейгән башҡорттар!
Һөйләшһендәр ине туған телдә
Аҫыл балалары халҡымдың!
Их, ҡысҡырғым килде ошо хаҡта!
Их, ҡысҡырғым килде... Тартындым.
Әллә ҡурҡтым микән?! Уйланыммы
Үҙем тураһында иң элек:
Иңдәремдә — елән, ә телемдә —
Таш йорттарҙан күскән
Өнһөҙләк...

*2015*

## Урам булып...

*Баш ҡалабыҙ Өфөлә*
*Салауат Юлаев урамы менән*
*Зәйнулла Рәсүлев урамы*
*тоташҡан урын бар*

Һеҙ бергәлер унда,
И остаздар
(Йәндәр күккә аша)!
Урам булып
Килеп күрештегеҙ
Сал быуаттар аша.
Рухи батыр менән
Рухи батша —
Әйтерһең дә,
Ҡалҡан:
Аҙан булып
Илгә яңғыраған,
Ғәскәр булып
Ҡалҡҡан!

## Ете ҡыҙ

*И. И. Ялалов башланғысы менән*
*баш ҡалабыҙ Өфөлә «Ете ҡыҙ»*
*һәйкәле асылыу айҡанлы*

Сал тарихтан тыйнаҡ етәкләшеп
Ҡала уртаһына ҡайттығыҙ,
Асылына тоғро йәндәр аша
Таптығыҙмы юлды, ете ҡыҙ?!

Беҙәр өсөн генә ҡайтманығыҙ
Гүзәлдәрҙән-гүзәл илдәрҙе,
Ҡайттығыҙ һеҙ уйландырыр өсөн,
Уфтандырыр өсөн ирҙәрҙе...
Һиҫкәндерер өсөн ҡатын-ҡыҙҙы
Ҡосағында саҡта яттарҙың,
Һыҙландырһын өсөн көтмәгәндә
Күңел төпкөлөндә ятҡан моң.
Ете һылыу һыу сәсрәтеп уйнай,
Һағыштарын сайҡай Иҙелдә.
Үҙ иләндә ҡол булырмы кеше,
Ҡол булмағас хатта сит илдә?!
Табанынан ҡан ағыҙып ҡайтҡан
Ете ҡыҙҙың һомғол буй-һыны
Һеңдерә бит йәнгә рух ныҡлығын,
Ватансылыҡ тигән тойғоно.
Милли асыл ерҙә тапалғанда,
Бик ваҡытлы бит һеҙ ҡайттығыҙ,
Сәңгелдәктә батырҙарҙы бәпләр,
Илдең ҡотон һаҡлар Ете ҡыҙ!

*2015*

## Башҡортлоҡ

Мине дарға аҫып ҡуйһалар ҙа,
Шыбырлар бит күкһел иренем:
«Мин бары тик бер тамсыһы ғына
Ҡанһыраған башҡорт еренең!»

Мин бары тик бер тамсыһы ғына,
Әммә көсөм таштар ярырлыҡ.
Ата-бабам рухын ҡалҡан итеп,
Ҡөҙрәтем бар алға барырлыҡ.

Эйе, мин гел алға барасаҡмын,
Башҡортлоғом — ҡанат иңемдә.
Таң ҡалырлыҡ эштәр эшләйһем бар
Башҡортостан тигән илемдә.

Батырҙарҙың ҡаны урғый миндә,
Рухың йәшәй миндә, Салауат!
Хатта дарға аҫып ҡуйһалар ҙа,
Терелермен шуға мең ҡабат.

Сал тарихым менән көсләмөн мин,
Һынмаҫ рухым менән теремен.
Мин бары тик бер тамсыһы ғына
Йәйрәп ятҡан башҡорт еренең!

## Һаҡлар өсөн

Ырымбурҙан Силәбегә тиклем,
Һарытауҙан алып Һамарға —
Киҫкеләнгән башҡортомдоң ерен
Нисек итеп бөгөн ямарға?!

Ошо ергә беҙ бит һәр саҡ хужа,
Беҙ ошонда һәр саҡ аҫаба
(Сит ҡулдарға күсеп үкһеҙ ҡалған
Нисә ауыл, нисә ҡасаба)!

Йасин уҡып урап сығыр инем,
Еребеҙҙе ҡайҙан ҡамарға?
Минзәләмдең башҡорттарын барлап,
Ҡуҙғалайым микән Һамарға?

Пермь менән Ҡурған тарафына
Мин юлłармын шунан доғамды,
Таныр өсөн һәр бер изге затты,
Табыр өсөн һәр бер туғанды...

Сәләмдәрем Силәбегә етер,
Доға көсөн тойор Ырымбур!
Һаҡлар өсөн ерем бөтөнлөгөн,
Беҙ йыйырбыҙ шунан оло ҡор...

Иҫбатларға теләп башҡортлоҡто
(Күрһәтергә кемдең кемлеген!),
Яуға сабыр өсөн түгел, дуҫтар,
...Һаҡлар өсөн Ерҙең кендеген!

## Утайҙар...

Утайҙар халҡымды, утайҙар.
Кем ҡалыр был ерҙә —
ҡытайҙар?!
Һағынып ирәбе саҡтарын
Ер-һыуҙар, сал тауҙар һыҡтайҙар.
Берәүҙәр ҡаныға тауыма,
Берәүҙәр телемде быуырҙай.

Берәүҙәр юхалап күҙ быуа,
Берәүҙәр ҡылана убырҙай.
Күлдәр бит — ул беҙҙең күҙ йәштәр,
Йылғалар — ул ҡанлы ярабыҙ.
Ҡәҙерле беҙгә һәр беребеҙ
(Былай ҙа аҙ ҡалып барабыҙ)!
Тарханлыҡ юҡ хәҙер... Тарҡаулыҡ!
Белмәйем, ҡасан һуң туҡтайҙар?!
Береһен бер(е)һенә һөсләтеп,
Утайҙар халҡымды, утайҙар...

*2015*

## Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡтан көлөп була,
Халыҡты бүлеп була,
Ҡурҡыштан бөлөп була,
Халҡым, тип, үлеп була —
Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡты һөрөп була,
Алҡымын бөрөп була,
Эт һымаҡ өрөп була,
Илгә йән өрөп була —
Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡтан ҡасып була,
Халыҡты аҫып була,
Халыҡты баҫып була,
Уға юл асып була —
Кем һуң нимәне һайлай...

Халыҡты һөйөп була,
Уға сүп өйөп була,
Бошоноп, көйөп була,
Күктәргә сөйөп була —
Кем һуң нимәне һайлай...

## Ватаным, тип...

Ҡыйыҡтағы ике әләм
Әллә бәхетем, әллә бәләм.
Береһе менән күккә ашам,
Береһе өсөн түбәләнәм.
Ҡыйыҡтағы ике әләм
Йыраҡтарҙан бирә сәләм.
Берсә һөйөп, берсә көйөп —
Ватаным, тип, үрһәләнәм...

## Сөйөмбикә манараһы янында

Ҡыҙыҡтырмай мине бер ҙә
Һинең йәшәгән өйөң,
Көс алыр өсөн йәнемә
Килдем мин, ғорур Сөйөм!

Манараңда ай йылмая,
Алаһыңдыр ҡот унан,
Милли рухың көсләрәктер
Хатта тамуҡ утынан.

Һин йәнеңде фиҙа ҡылдың
Һаҡлап иман-ырыҫты,
Бөгөн нисә татар ҡыҙы
Ҡыуандыра урыҫты?

Сөйөм! Милли ғорурлыҡтың
Тарат ергә ҡуҙҙарын,
Рухың менән ҡурсалап тор
Башҡорт, татар ҡыҙҙарын!

Уңда тәре, һулда тәре,
Күреп милләт аҙғанын,
Һинең кеүек манаранан
Ташланырға яҙмаһын!

## Глобализацияға ҡаршы

Мин урыҫты яратмайым түгел,
Мин урыҫты ихлас яратам.
Урыҫҡа ла, башҡортҡа ла ғәзиз
Рәсәй генә тигән киң Ватан.

Башҡортостан тигән илемдә лә
Асыҡ уға һәр бер өй эсе,
Ләкин урыҫ урыҫ килеш ҡалһын,
Башҡорт ҡалһын башҡорт көйөнсә!

## Өфө етә барыһына ла...

Йә, әйтегеҙ кемдән беҙҙә
Баш ҡаланы тарһыналар?
Өфө етә барыһына ла:
Ҡараһына, һарыһына ла.

Өфө етә һәммәһенә:
Төрөгөнә, әрмәненә,
Ҡытайҙар ҙа, фатир табып,
Йәшәп ята эре генә.

Килгән бере сат йәбешә,
Береһе лә кире китмәй!
Илем, тиеп йәнен атҡан,
Ятаҡ тапмай башы ҡатҡан
Бер башҡортҡа урын етмәй...

* * *

Мине, һүнгән, тимәгеҙсе,
Имен саҡта ҡурайым,
Ҡайғыларҙан бөгөлһәм дә,
Моңдан ҡабат тураям.

Мине, күнгән, тимәгеҙсе,
Шатланмағыҙ көн элек,
Мин бер ҡасан йәшәмәнем
Милләтемдән төңөлөп.

Мине, бөлгән, тимәгеҙсе,
Илем барҙа — мин тере!
Батырҙарҙың һынмаç рухын
Һаҡлай халҡым хәтере.

Мине, үлгән, тимәгеҙсе
Ал таңдарҙа булмаһам,
Бар халҡымды уятырлыҡ
Ҡалыр минән йыр-аһәң!

*12.04.2002*

## Ил, тием дә...

Ил, тием дә илгә бағам,
Ҡуям шунан иң(е)рәп,
Башҡортомдоң далалары
Булған элек киңерәк.

Башҡортомдоң урмандары
Булған күпкә ҡуйыраҡ,
Булмаһа тик булмағандыр
Йылғалары буй(ы)раҡ.

Булмаһа тик булмағандыр
Туған телен онотҡан,
Сит-ят ерҙә торлаҡ ҡорған,
Сит яҡтарҙа моң отҡан.

Булмағандыр сәсәндәре
Ил, тиеп йырламаған,
Ил, тиеп йырлағандарҙың
Йырҙары һуңламаған.

Ил, тиеп мин йыр йырлайым,
Илгә бағам иң элек,
Был аяуһыҙ донъяларҙа
Көҫәгәнем — именлек!

*12.04.2002*

## Инә бөркөт

Һауаларҙа оса инә бөркөт,
Аҡлы ҡаурыйҙары нисә икән?
Мал-тыуарым ишле, донъям етеш,
Йәнкәйемде ниҙәр кисә икән?!

Инә бөркөт кеүек ҡанат ҡаҡ та
Тотош илкәйеңде иңләп сыҡ.
Миңә бары ниҙер етмәҫ һымаҡ,
Таба алмаҫ йәнем тыныслыҡ.

Ҡырҙарыма ҡайтһам, тауҙар етмәй,
Тауға килһәм, етмәй күк далам.
Инә бөркөт ерҙе күҙәткәндә,
Уйым менән күккә уҡталам.

Бәхет өсөн миңә, ай, күп кәрәк,
Риза түгел йәнем барына.
Зәңгәр күктә минең хыял булып
Инә бөркөт ҡанат ҡағына...

## Аҡымбәттән* – Күсембәткә**

Был сәфәргә сыҡмаҫ инем,
Хәлебеҙ булһа һәйбәт,
Аҡымбәттән сәләм һиңә
Алып килдем, Күсембәт!

Һиҙемләйем икегеҙҙең
Ҡан-ҡәрҙәштәр булғанын:
Ул атайың булды микән,
Булды микән туғаның?

Икегеҙҙе ике яҡҡа
Илткән яҙмыш елдәре,
Был донъяла һеҙ икәүҙең
Ҡалды икән кемдәре?

Ҡурҡыу белмәҫ батыр микән,
Әүлиә микән улар?

---

* *Аҡымбәт* — Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылындағы тау.

** *Күсембәт* — Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылындағы тау.

Уяу булһа нәҫелдәре
Ҡара көскә сик ҡуйыр!

Уяу булһа нәҫелдәре
Ташлар илгә оранын,
Мин, мосафир, Аллаһунан
Ошо хаҡта һораным!

Илай-илай, доға ҡылдым,
Ҡулыма алдым Ҡөрьән.
(Батырҙарҙың нәҫелдәрен
Сүпләйҙәр берәм-берәм!)

...Аҡымбәттән Күсембәткә
Килтерҙем мин күп сәләм,
Ил-йортомдо,
Милләтемде
Һаҡла, Хоҙай Тәғәләм!

* * *

«Беҙҙең ҡыҙҙар ҡырыҫ бит ул...»

*Һөйләшеүҙән*

Һылыуҙары күп халҡымдың
Ҡурсаҡтай —
Аҫыл ирҙәрҙе мәрйәләр
Ҡосаҡлай.

Ил улдары ҡарамаған
Ҡырыҫҡа,

Ҡыҙҙарыбыҙ сығып бөттө
Урыҫҡа.

Ҡалҡып сыҡты шулай яңы
Ҡалалар:
Ни башҡорт, ни урыҫ түгел
Балалар...

*11.07.08*

## Китәм, тиһең

Китәм, тиһең, кит һуң әйҙә,
Сит-ят ерҙәр ҡыҙыҡтырғас,
Алтын тауҙар ҡалҡып торғас,
Көмөш һыуҙар ағып торғас...

Кит, кит әйҙә, күҙ алдыңда
Һикерешкәс эре һандар.
Һине унда кем һуң һанлар?
Ҡыйын саҡта кем һуң аңлар?

Ана бара асфальт юлың,
Сыҡ ауылдың батҡағынан.
Тупраҡ ҡәҙерен белә кеше
Сит ерҙәрҙән ҡайтһа ғына.

Хушлашма ла йәштәр менән,
Сәләм бирмә ҡарттарына,

Тыуған ерҙән мәңгелеккә
Тамырҙарың аҡтарыла.

Аулаҡ өйөн, ауыл көйөн
Былай булғас онот, онот!
Атайыңдың йөҙө кеүек
Ҡалҡып сыҡты ҡара болот.

Әсәйеңме, булып ямғыр,
Күҙ йәштәрен һибә генә.
Хаталанма тигән кеүек,
Ел йәбешә итәгеңә.

Ниңә минең замандаштар
Бәхет эҙләй башҡа остан?
Мең төҫтәрҙә балҡый Себер,
Ҡан төкөрә Башҡортостан!

*1990*

* * *

Һыҙҙырт әле ҡурайыңды,
Һыҙҙырт әле, йәш егет.
Бейеү көйөн беләһеңдер,
Һиндә генә бар өмөт.

Милләтем ауыр йоҡонан
Арына алмай һаман.
Һүҙҙәрендә — өмөтһөҙлөк,
Ҡолағы тулы ялған.

Үҙ телен, моңон онотҡан
Был халҡыма ни булған?
«Барыня»ға бейеп ялҡтыҡ,
«Ҡарабай»ға баҫ, туған!

Минең халҡым моңһоҙмо һуң?
Дәртле, һәләтле, уңған.
Ул баҫҡанда сәхнә түгел,
Урал һелкенеп торған.
Сал тарихта ҡанлы яра
Булып иңрәй үткәндәр.
Беҙ Уралды төйәк итһәк,
Сәхнә итте бүтәндәр.

Ҡунаҡсыл башҡорт күҙенән
Аҙмы һағыш түгелгән,
Сәхнәләрҙә уйнанылар
Халҡым яҙмышы менән!
Тик һынманы халҡым рухы,
Тик тынманы ҡурайҙар,
Күрегеҙсе: «Ҡарабай»ға
Йәштәр бейеп урайҙар!

Һыҙҙырт, егет, ҡурайыңды:
Туңған күңелдәр ирер,
Моңһоҙҙар моңға күмелер,
Телһеҙҙәр телгә килер!

*1990*

## Баҙарҙа тыуған уйҙар

Ҙур баҙарҙа һатыу итә
Мәрйәләр һәм башҡалар,
Кеҫәләрен ҡалынайтып,
Төшә беҙҙең аҡсалар.

Һатҡанды һатып алырға
Беҙ оҫта иллә-мәгәр.
Һанда һирәк кенә бында
Башҡорт атлы сауҙагәр.

Ундай кәсепте белмәгәс
Борондан өләсәбеҙ,
Кемдең йәне нимә теләй —
Беҙ бушлай өләшәбеҙ.

Өләшәбеҙ ерҙе-һыуҙы,
Өләшәбеҙ ҡаланы.
Уң яҡтан да, һул яҡтан да
Илде күптәр таланы.

Һәм дә беҙҙең йомартлыҡҡа
Барлыҡ тараф инанды,
Тик яҙмаһын юғалтырға
Рухты, телде, иманды!

## Мәскәү бесәйенә

Һаумы, Кузька! Һаумы, эре бесәй,
Ҡараштарың ниндәй, ҡот оса!
Баш ҡалала үҫкәс, һин дә, туған,
Аңламайһың инде башҡортса.

Хәйер, һиңә минең һис үпкәм юҡ,
Ана, хатта беҙҙең Мыяубай,
Үҙебеҙҙең Өфөләрҙә йәшәп,
Тик урыҫса ғына мыяулай.

Ә мин, Кузька, һиңә ярайым, тип,
Боҙоп тормам инде телемде.
Урыҫсалап һиңә һүҙҙәр ҡушҡан
Хужаларың ҡыҙыҡ күренде.

Алдарыңда бейеп тора улар,
Һин, ахырыһы, бында шәп түрә!
Беҙҙең бахыр башҡорт бесәйҙәре
Сысҡан тотоп ҡына көн күрә...

Әллә оҡшатманың беҙ килгәнде?
Оҡшатмаһаң, әйҙә, ни булған?!
Белгең килһә, көйәҙ хужабикәң
Апайым ул минең бер туған.

Ярар, Кузька, һинең хөрмәтеңә
Мин бер туҫтаҡ буҙа эсәйем.
Хөрмәт итмәй ҡайта буламмы һуң
Мәскәү һынлы Мәскәү бесәйен!

*1995*

## Яҙмышыбыҙ беҙҙең бер икән

Бер яғымдан Ямантауым баҡһа,
Көрһөнә лә Иҙел бер буйҙан.
Башҡортостан, тиһәм, башым сатнай,
Аҡылыма һыймаç мең уйҙан.
Тере һыуҙар уртлап бөркәйемме,
Ҡоролоҡло быйыл далаһы.
Үҙ телкәйен белмәй үçеп килә
Нисә быуын башҡорт балаһы!
Тере һыуҙар уртлап бөркәм, тиһәм,
Иҙел үҙе тулы ыу икән.
Телгенәңде яттар һанламаһа,
Телһеҙ башҡорт булып тыу икән!
Күкрәк кенә киреп һулар һауам
Торбаларҙан сыҡҡан быу икән.
Бөрйән һынлы Бөрйән таланғанда
Күҙһеҙ генә булып тыу икән!
Ҡайғыларҙан ҡара янған һымаҡ,
Ямантауҙың башы ҡыу икән.
Ерһеҙ башҡорт, тиеп көлмәç элек,
Һаңғырау ҙа булып тыу икән.
Мәскәүҙәрҙән төшкән әмер менән
Таланасаҡ тағы ни ҡала?!
Илебеҙҙе яҡлар азаматтар
Башҡайҙарын һала Чечняла...
Рухыбыҙға беҙҙең бығау һалып,
Ҡанлы тарихтымы ҡабатлау?
Түҙер әмәлдәре ҡалмай бер көн
Ғәрлегенән шартлар Ямантау.

Башҡортостан! Уйсан тауҙар иле!
Сал тарихы аҡыл иңләмәç.
Бер яғында Иҙел көрһөнгәндә,
Бер яғында иңрәй Төйәләç.
Һин — ситлеккә һыймай тыбырсынған
Йөрәккәйемише ер икән.
Башҡортостан, тиһәм, башым сатнай,
Яҙмышыбыҙ беҙҙең бер икән шул,
Яҙмышыбыҙ беҙҙең бер икән!

*1993*

## Йәмәлетау

*(Һыҡтау)*

Ау!!!
Йәмәлетау,
Әмәлле тау,
Сисә алмаç
Ғәмәлле тау!
Ҡөҙрәттәрең —
Яманлыҡмы?
Быуындарың
Әле ныҡмы?
Йәмәлетау,
Әмәлле тау!
Ҡаяларың —
Ташлы-ташлы,
Оя ҡорған сәмреғошоң
Нисә башлы?

Нисә башлы?
Йәмәлетау,
Әмәлле тау!
Түбәләрең —
Таҙ икән дә...
Һине Мәскәү тартып алды
Үҙ ерҙәре
Аҙ икән дә!
Теткеләнгән ҡуйындарың
Баҙ икән дә!
Баҙ икән дә...
Әле һаман шул баҙҙарға
Ерләйҙәрме дейеү затын,
Ниңә һинең яңы атың
Ямантау һуң?
Ямантау һуң?
Аһ, Ямантау,
Йән алған тау!
Күкрәктәрең
Селтәр икән.
Һин шартлаһаң,
Мәскәү ҡалыр,
Башҡорт башы
Китер микән?!
Аһ, Ямантау,
Йән алған тау!
Тыңла, зинһар,
Шарт атайым:
Тотош илде
Шартлатҡансы,

Йөрәгемде
Шартлатайым!
Аһ, Ямантау,
Йән алған тау!
Ау!..

## Юлаусы

Мин дә, ахыры, ҡалышмайым
Далалағы ҡамғаҡтан.
Ил-еремде иңләй торғас,
Табандарға ҡан ҡатҡан.

Туҡтар инем, үҙ илемдә
Йәнгә яҡын һәр биҙәк.
Гүзәллеккә табыныусы
Ҡамғаҡҡа мин — игеҙәк.

## Ҡурай йыры

Аҫыл баҡсаларҙа
Үҫмәнем.
Иҫ китерлек түгел
Төҫкә мин.

Бер мәл төптән киҫеп
Алғастын,
Тәндәремә яра
Һалғастын —

Һыныр, тигәйнеләр,
Һынманым!
Тымыр, тигәйнеләр,
Тынманым!

Күңелемдә башҡа
Ғәм ине,
Йөрәккәйем тулы
Сәм ине.

Яңғыраны йырым
Бик йыраҡ,
Ярам артҡан һайын,
Моңлораҡ!

Ҡитғаларҙы бөгөн
Ураймын.
Ҡырҙа үҫкән ябай
Ҡураймын!..

## Шүлгәнташҡа өндәшеү

Шүлгән!
Хәл алырға тиеп һиңә килдем
Мин бик күндәм,
Тәү усаҡтың тере ҡуҙын бирсе,
Рухым һүнгән.
Шүлгән!

Бер ус ҡына һыу уртлаһам әгәр
Зәңгәр күлдән,
Булмышымды табалырмын төҫлө
Хатта көлдән!
Шүлгән!
Мин маңҡортҡа әйләнеүҙән ҡурҡам,
Хәтерем үлгән.
Өр-яңынан бар ҡыл асылымды
Затлы түлдән.
Шүлгән!
Ата-бабам бында усаҡ яғып,
Уйнап-көлгән.
Уйнар инем, көлөр инем мин дә,
Халҡым бөлгән...

*1998*

## Хәйбуллалар миңә шәл яптылар

*Әбеш ауылы ағинәйе*
*Рәхимә Маннановаға*

Хәйбуллалар миңә шәл яптылар,
Күңел йылыһына ойоном!
Хәтерләтте ул шәл мәрхүм булған
Ғәзиз әсәйемдең ҡуйынын.
Һыйпағанда ошо дебет шәлдең
Күпереп тә торған мамығын,
Таңда мине наҙлап уятыусы
Әсәйемдең ҡулын таныным...

Иңдәремдә булыр был шәл ҡышын,
Гел янымда булыр йәйләһәм.
Һәр күҙенә ҙур мәғәнә һалып,
Ил инәһе уны бәйләгән.
Һәр биҙәккә иман нурын ҡушҡан
Һәм йәшергән унда үҙ серен,
Йәнем менән тоям, мәле еткәс,
Ағинәйҙең сере күсерен!
Күҙ өҫтөндә генә тотам уны,
Ҡалдырырға хатта йәл инде:
Йә һоҡланып уға ҡарап алам,
Йә ҡыуанып иңдәремә һалам
Хәйбуллалар япҡан шәлемде!

## Ностальгия

Йәшмә күҙле күлдәр иле!
Бик оҡшаны Ирәмәлең,
Тик арбама, үткән инде
Ҡосағыңда ирер мәлем.

Ылыҡтырма, бары ҡапмам
Юлдарыма ҡорған ауға.
Ашҡына ла тора йәнем
Ямантауға, Ямантауға!

Гел шул яҡҡа ҡарап тала
Күҙ ҡараһы күҙемдеке.
Ямантауҙы яман тимә,
Яман, ләкин үҙемдеке.

Һай, Ирәмәл! Кем генә һуң
Һиңә ҡарап ҡыҙыҡмаған,
Ләкин минең Ямантауҙа
Улым ҡалған, ҡыҙым ҡалған.

Ләкин минең Ямантауҙа
Ҡалған ярты йөрәккенәм,
Шуға бында толҡа тапмай,
Ҡайтам тим дә йөрәкһенәм.

*2002*

## Таныр микән?

Ана ғына Сочи тора,
Ана ғына — Киленсәк*.
Шелтәләмәç микән диңгеҙ,
Үтә ғәмһеҙ күренһәк?

Ҡайғы һөйләп һыйынырға
Диңгеҙ буйы ҡайынһыҙ.
Кипарис та пальма бында
Беҙҙең кеүек вайымһыҙ.

Диңгеҙ өçтө — зөмрәт тулҡын,
Диңгеҙ төбө — гәрәбә!

---

* *Киленсәк* — Геленджик (урындағы халыҡ телендә ошо мәғәнәне аңлата).

Килеп кенә ҡайтыу инде
Беҙгә төшкән йәрәбә.

Ана ғына Сочи тора,
Ана ғына — Киленсәк.
Таныр микән беҙҙе диңгеҙ,
Тағы килеп күренһәк?

Килгән-киткән мосафирҙы
Нисек, ти, ул онотмаҫ?!
«Киттегеҙ ҙә баттығыҙ!» — тип,
Шелтәләр ҡайтҡас Талҡаҫ.

## Ҡәйнә теле*

Борма-борма юлың менән
Ҡурҡытма әле, Ҡырым!
Беҙҙә лә бар Ҡәйнә теле —
Бик хәүефле бер урын.

Устарыма ҡыҫып йәнде
Йыш үтәм Ҡәйнә телен,
Сал Елмерҙәк һынап тора:
Булдыҡлымы был килен?

---

* *Ҡәйнә теле* — Белорет районындағы Елмерҙәк итәгендә текә боролошло юл.

Иламаҫмы, ҡоламаҫмы,
Аҫта — упҡын-йәһәннәм!
Ә үрҙәрәк үҙе шул уҡ
Һынауҙы үткән ҡәйнәм.

Аяулымы, аяуһыҙмы —
Һуңғы һүҙҙе ул әйтер:
Ситкә типһә, даным һатыр,
Үҙҙәй күрһә, өйрәтер!

...Ҡырлы-ҡырлы юлың менән
Ҡурҡытма әле, Ҡырым!
Сит яҡтарҙа күтәралмам,
Ҡараһаң әгәр ҡырын.

Юлаусы мин, йыраусы мин,
Түгел ябай бер ҡатын.
Үҙемдең дә тормош юлым
Тотошлайға серпантин.

Ҡәйнә теле ҡайҙа ла бер,
Белмәйһең ни көтәһен,
Килә минең шул юлдарҙы
Һынатмайса үтәһем!

## Казбек

Казбек тауҙарына менгән дә юҡ,
Бейек микән улар Уралдан?!
Сәм булдымы, сикһеҙ һоҡланыумы
Хистәремә килеп уралған.

Онотолдо барлыҡ доғаларым,
Онотолдо хатта тәүбәһе!
Төштәремә генә инде лә ул —
Аһ иттерҙе Кавказ түбәһе.
Аҡ сәлләле ине,
Ә эсендә
Урғый ине вулкан бик әүҙем,
Ут ямғыры әлдә атылманы,
Ул бит сере ине икәүҙең!
Текә ине Казбек!
Ғорур ине —
Тәү күреүҙән ҡалдым арбалып,
Күпме ҡараһаҡ та, бер-беребеҙҙән
Ҡараштарҙы айыра алманыҡ.
Был төш ине...
Әллә төш ине ул!
Тик икәүҙең әллә хисеме?!
Иҫләмәйем...
Бары шуны беләм:
Казбек ине тауҙың исеме...

*2017*

## Тартылыу

Булғаным һуң бармы минең
Көнсығышта?!
Бик оҙаҡ та булғаным юҡ, ашығыс та.
Күргем килә Сәмәрҡәндтең ҡорамдарын,
Гиҙгем килә Бохараның урамдарын.

Ингем килә иң боронғо мәсеттәргә,
Тыныслығын юйған йәнгә көс өҫтәргә.
Бөткән саҡта тәҡәттәрем, түҙемдәрем,
Өҙөп ҡапҡым килә баллы йөҙөмдәрен.
Шағирҙарын күргем килә Фирғәнәнең,
Шәреҡ моңдарында килә тирбәләһем.
Нисек кенә түҙмәк кәрәк был һағышҡа,
Ниҙер тарта мине һәр саҡ Көнсығышҡа.

## Саҡ менән Суҡ

Бер әсәнең ике улы
Суҡ менән Саҡ,
Саҡ менән Суҡ
Ыҙғышалар үҙ-ара гел:
«Минеке бар, һинеке юҡ!»
Булғанын һис бүлалмайҙар
Ҡайһы Суҡҡа,
Ҡайһы Саҡҡа?
Асыҡларға һәр әйберҙе
Ҡайтыр кәрәк
Әлмисаҡҡа.
Тик Суҡҡа ла һәм Саҡҡа ла
Тарих күптән онотолған.
Береһен береһе уҙҙыра шул
Был баш бирмәҫ ике туған.
Ана шулай ыҙғышҡанға
Күп нәмәнең
Юҡ тоҡомо.

Хәҙер аныҡ әйтеп ҡара
Саҡтыҡымы,
Суҡтыҡымы?
Өҫтөнөрәк булыр өсөн
Әйтһәләр ҙә
Гел киреһен,
Һағыналар үлә яҙып,
Күрмәй торһа
Бер-береһен.
Ә бит улар шундай яҡын,
Оҡшаш хатта
Көҙгөлә лә,
«Суҡ», — тиеп Саҡ илай бик йыш,
«Саҡ», — тиеп Суҡ өҙгөләнә.
Гелән бергә һәм айырым
Оса алмай
Улар ары.
Саҡ менән Суҡ кеүек була
Ҡайсаҡ милләт аралары...

## Күршеләргә

Өшөгәндә мин ут һорап
Күршеләргә инәм.
Ил бар ерҙә сәпсек үлмәҫ —
Халҡым шулай тигән.

Ҡайғы баҫһа, кәңәш һорап
Күршеләргә инәм.

Кәңәшле эш тарҡалмай ул —
Атам шулай тигән.

Байрамда ла яңғыҙ түгел,
Гел күршеләр менән!
Күрше хаҡы — Тәңре хаҡы —
Әсәм шулай тигән.

Уңыштарҙан, шатлыҡтарҙан
Күккә тейһә түбәм.
Бәхетемдең сатҡыларын
Күршеләрҙә күрәм!

## Германия – Юбирленген*

*2002 йылдың 2 июлендә Германия*
*күгендә фажиғәле һәләк булған*
*сабыйҙар иҫтәлегенә*

Ил хәсрәтен аңлатырға
Бер һүҙ етә — Юбирленген.
Уның аяҙ күктәрендә
Нисәмә йән йәберләнгән!

Был гонаһһыҙ сабыйҙарҙы
Һаҡламаның ниңә, Аллам?!
Нисек түҙҙең, ялбарышып
Һорағанда улар ярҙам?!

* Артур Кәбиров көйө.

Юбирленген... Баҫыуҙарың
Беҙҙәгеләй йәшел икән,
Түгелеп тә яуған ямғыр
Сабыйҙарҙың йәше микән?

Беҙҙә лә бит әле булһа
Күҙ йәштәре туҡтамаған,
Бер атай юҡ уйһыҙ ҡалған,
Бер әсә юҡ һыҡтамаған.

Әйләнер ҙә ҡайтыр инде
Күкте ҡаплап ҡара болот,
Әммә ямғыр тамсылары
Йәнде өтөр ялҡын булып.

Йөрәгемде өтөр был һүҙ:
Германия — Юбирленген.
Янып төшкән самолеттай,
Минең йәнем күмерләнгән.

*2003*

* * *

Эй замана! Асылымдан биҙеп,
Ҡасыр сиккә етәм алыҫҡа.
«Сәскәйҙәре оҙон, аҡылы ҡыҫҡа!» —
Тейҙе ләһә был һүҙ намыҫҡа.

Асылымдан биҙҙем. Мин — ҡатын-ҡыҙ,
Аяуһыҙ ҙа заман ҡоломон.

Нәфислектең бер билдәһе ине
Киҫеп ырғытылған толомом.

Аҡыл оҙонлоғон кем үлсәһен,
Ҡыҫҡа хәҙер минең сәстәрем.
Иңдәремә оло толом итеп,
Йөкмәттеләр заман хәстәрен.

Эй замана! Асылымдан биҙҙем:
Аҡылдарым оҙон, сәс ҡыҫҡа!
Берәйегеҙ оҙон толомдарын
Биреп тормаҫ микән бурысҡа?!

## Тауҙар менән

Тауҙар менән йәшәйем мин
Иңгә-иң.
Хыялдарым тауҙар менән
Типә-тиң.
Мин сәм алам, ҡөҙрәт табам
Ҡаянан,
Көсөм бөтһә, тик тауҙарға
Таянам.
Сыҙамлыҡ бар ҡаяларҙа,
Ғорурлыҡ,
Ел-дауылға, утҡа ҡаршы
Торорлоҡ.
Кемдәр генә ҡормай юлда
Ауҙарын,

Абынһам да, ҡотҡаралар
Тауҙарым.
Тауҙар менән йәшәйем мин
Иңгә-иң,
Шуға бәхетем тауҙар менән
Типә-тиң!

*13.06.2000*

## Китәм инде

Китәм инде, һау булығыҙ,
Таянысым — ҡаялар!
Өфөләрҙә ҡыйын саҡта
Кем һуң мине аялар?

Гелән һынап торһағыҙ ҙа
Килгән өсөн йыраҡтан,
Һеҙ инегеҙ бит, тауҙарым,
Илатҡан һәм йырлатҡан.

Көтмәгәнһегеҙҙер, бәлки,
Саялыҡты килендән,
Ташлап китеү һеҙҙе, дуҫтар,
Булмаһа ла еңелдән,

Китәм инде. Өфөлә лә
Тупһалар бар, түрҙәр бар,
Һеҙ тауҙарҙан бейегерәк
Яуланаһы үрҙәр бар.

*25.02.2001*

## Ауыл һәм ҡала

Йәйге селлә. Июль айы.
Тын алғыһыҙ тынсыу ҡала.
Урамдарға сығыу менән,
Хәлһеҙ тәнде йонсоу ала.

Йәйге селлә. Июль айы.
Ауылда ла берҙәй эҫе,
Тик, урамға сығыу менән,
Йәнде имләй еләк еҫе.

## Һаумы, ҡала!

Һаумы, ҡала! Ярар инде, улай
Күрмәмешкә мине һалышма.
Шулай бик тиҙ генә онотоорға,
Беҙ бит әле яҡшы таныштар.

Шул уҡ йорттар, шул уҡ йүкә, ана,
Юлдарыма ҡоя алтынын.
Шул уҡ дуҫтар үтә яндарымдан,
Тик танымай ауыл ҡатынын...

Һаумы, ҡала! Килмәгәйнем һиңә
Урын һорар өсөн түреңдән.
Тәкәббер ҙә йөҙлө был урамдар
Элек нисек матур күренгән?!

Миңә йылы ҡараш етә ине!
Тик тойманым уны бер кемдә.
Ҡырыҫ йөҙөң менән мине, ҡала,
Әйләндерҙең тере етемгә.

...Килгәйнем дә, эй, ашығып ҡайтам,
Һауаланған дуҫтар самаһыҙ.
Ҡала минһеҙ йәшәй алған кеүек,
Йәшәй алһам икән ҡалаһыҙ!

* * *

Өфө миңә еңел бирелмәне,
Ул торманы мине «өф» итеп,
Нахаҡ һүҙҙәр, мәкер менән тәүҙә
Йөрәгемде алды өшөтөп.

Өфөм! Өфөм! Көсһөҙ түгел дә мин —
Йөрәгемә таптым дарыуҙар.
Ғәйбәттәргә иҫем китмәй хәҙер,
Һөйләмәйҙәр уны арыуҙар.

Мин еңелер өсөн килдемме ни?!
(Үҙ еремдә баҫып торамын!)
Имеш-мимеш, ялған һүҙгә ҡаршы
Тик йылмайыу минең ҡоралым.

Күңелемә ситен тарсылыҡтар,
Йырлы йәнем — оло биләмә.
Үҙем кеүек йырға ғашиҡ йәндәр
Йыйылырҙар эргә-тирәмә.

Барыһына етер күңел нурым,
Барыһына йылы һүҙ етер.
Гелән мине ҡағып тормаç Өфө,
Ихласлығым өсөн үҙ итер!

*2001*

## Өйһөҙлөк...

Ҙур түрәнең ишек төбө —
Инә алмай торамсы.
Ошо ҡыçҡа ғүмеремдә
Булғым килмәй һорансы.

Теләнселәү төç түгел дә,
Тик башҡа шул ҡанундар.
Беҙҙе шул көнгә төшөргән
Түрәләрме — ҡарундар?

Йә әйтегеҙ: кемдә байлыҡ
Йыйылған келәт-келәт?
Бәғзеләргә ҡыйыҡ та юҡ,
Алмаһа теләнселәп.

Ҙур түрәнең ишек төбө —
Инә һал, алабарман!
Тағы ҡыйыҡһыҙ ҡалам бит,
Боролоп китеп барһам...

*2001*

## Баштар һәм башҡалар

Баш ҡалала баштар бик күп икән,
Ҡайһы дүрткел, ҡайһы йом(о)ро.
Ҡаҡлығып та китеп шул баштарҙан
Маңлайымда ҡалҡты күп оро.

Ҡыҙыҡ эҙләп түгел, ҡыйыҡ эҙләп
Шул баштарға барып баш һалам.
Минең кеүек өйһөҙ шағир менән
Туп-тулы шул хәҙер баш ҡалам.

Ҡайҙан беҙгә торлаҡ өмөт итеү?!
Йәшәһендәр унда хужалар.
Тик йыр булып байрам мәжлестәрен
Биҙәй беҙҙең әсе нужалар.

Йыр ҡайғыһы миндә (хыял инде!),
Әлдә уны бер кем тыймаған!
Баш ҡалаға бик күп баштар һыйған,
Шағир башы ғына һыймаған.

*2001*

## Көҙгө ҡала

Эй шыҡһыҙ көҙ көнө,
Ҡалала өй эсе.
Йылынып алырға
Юҡ ауыл мейесе.

Өшөтә ҡалала
Тышта ла, эстә лә.
Етмәһә, боҙҙай туң
Ҡараштар өҫтәлә.
Ауылда йылы нур
Бөркөлә кешенән.
Ҡалала тәкәббер
Йөҙҙәрҙән күшегәм.
Ә минең бик килә
Бар ерҙе йылытҡым.
Тик усаҡ яғырлыҡ
Ҡалала юҡ утын.
Үсексән түгел дә,
Өшөксән кеше мин.
Әйтегеҙ йылы һүҙ:
Өшөнөм, өшөнөм!

## Ҡарағайҙар

Ҡарағайҙар,
Ҡарағайҙар,
Ғорур һынлы дәү ағайҙар.
Улар миңә ҡарамайҙар,
Улар мине аңламайҙар.

Улар бейек,
Улар бөйөк,
Күккә ашҡан ҡарағайҙар.
Яндарында, ялт-йолт килеп,
Бөтөрөлә ялағайҙар.

Улар әрһеҙ,
Улар ғәмһеҙ,
Ялтырауыҡ ялағайҙар —
Ҡарағайҙар ышығында
Йылы урын һағалайҙар.

Ә мин яңғыҙ,
Ә мин һанһыҙ,
Мине елдәр яғалайҙар,
Ә янымда ҡымшанмай ҙа
Баҫып тора ҡарағайҙар.
Дәү ағайҙар...

## Шыршы булһам

Ҙур бер ҡала уртаһында
Баҫып торам, шыршы һымаҡ.
Тәү ҡарашҡа шундай күркәм,
Тәү ҡарашҡа ҡупшы һымаҡ.

Ә, асылда, юҡ шул минең
Шаҡ ҡатырғыс ылыҫтарым.
Юҡ энәләр, ҡыуаларға
Кешеләрҙең ҡырыҫтарын.

Шыршы булһам, булмаҫ инем
Ел-дауылға бирешерлек,
Үҙемдә көс табыр инем
Маҡсаттарға ирешерлек.

...Шыршы булһам, бер туҡтауһыҙ
Ағыр ине сайырғынам,
Күтәргеһеҙ ауыр һүҙҙән
Ҡанаттарым ҡайырылған.

*2001*

* * *

Инәкәйем йөн иләй ҙә
Орсоҡ зырлап өйөрөлә,
Әллә бейеп китәйемме
Ҡулды ҡуйып бөйөрөмә?
Инәйемдең яндарында
Бар ҡайғылар онотола,
Шатлығымды баҫа алмай
Бураны ла, болото ла.
Инәйемдең — мең шөғөлө,
Һис бер эшһеҙ торғаны юҡ,
Ҡуйсы әле, бейемәйем,
Тәҙрәнең ҡорғаны юҡ.
Уны үҙем йыуып ҡуйҙым —
Тәҙрәләр ҙә көлөп торһон.
Ҡайтҡанымды күрше-күлән,
Дуҫ-иштәрем белеп торһон!
Сеү, инәйем ниңә илай?
Үтмәй ана төйөрө лә.
Китер юлды йәшерәм тип,
Тышта буран өйөрөлә.

* * *

Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ғәмһеҙҙәрҙең күңел ҡылын ҡаҡһын өсөн,
Үлән кеүек халҡым ҡабат ҡалҡһын өсөн,
Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн!

Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ҡараңғыла яҡты юлды тапһын өсөн,
Хаҡлыҡ эҙләп ул ҡояшҡа баҡһын өсөн,
Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай, халҡым өсөн!

Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн,
Күңелдәргә иман нуры яҡһын өсөн,
Ил-дәүләтем күкрәп сәскә атһын өсөн,
Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн!

*2010*

## Эй, башҡортом*!

Эй, башҡортом, кей түбәтәй!
Эй, башҡортом, әйт аҙан!
Ата-бабалар йолаһын
Тергеҙәйек ҡайтанан!

Эй, башҡортом, йәй намаҙлыҡ,
Теләк телә сәждәлә!

---

* Дилара Рафиҡова көйө.

Ил-йортобоҙ тыныс булыр,
Урап үтер мең бәлә.

Эй, башҡортом, тарт тиҫбеңде,
Әйт һин: «Аллаһу әкбәр!»
Киң ҡөҙрәте менән Хоҙай
Бар халҡымды бүләкләр!

Эй, башҡортом, тот ураҙа,
Эй, башҡортом, сал ҡорбан!
Йөрәгеңдә иман артһын,
Күңелеңдә — миһырбан.

Эй, башҡортом, ҡалдыр ил тип,
Доға ҡылырлыҡ бала,
Ошо изге еребеҙгә
Хужа булырлыҡ бала!
Лә иләәһә илләллаһ!
Лә иләәһә илләллаһ!

(Мөхәмәҙүр рәсүлуллаһ
Саллалаһу ғәләйһи үә сәләм)

## Аллаһу — Раббүл ғәләмин*

Күктә серле тамғалар бар,
Күктә — сихри буяуҙар,
Күрә уны бары ла тик
Ҡәлептәре уяуҙар.

---

* Раббүл ғәләмин (ғәр.) — Ғәләмдәр хужаһы.

Күктәр — затлы,
Ҡатлы-ҡатлы!
Ҡабатлайым шуға мин:
Собхан Аллаһ!
Собхан Аллаһ!
Аллаһу — Раббүл ғәләмин.

Күктә матур яҙыуҙар бар,
Күктә — көслө доғалар.
Тик һиҙгерҙәр уҡый уны,
Ғәмһеҙҙәргә — юҡ улар!
Күктә — серҙәр!
Изге һүҙҙәр
Ҡабатлайым шуға мин:
Әлхәмдүлилләһ!
Әлхәмдүлилләһ!
Аллаһу — Раббүл ғәләмин.

Күктә оло ғилемдәр бар:
Аҡыл етмәҫ сикһеҙ аң!
Күктән яуа бәрәкәттәр
Аң булһаң, уяу булһаң!
Күктә — бәхет,
Көрси-тәхет!
Ҡабатлайым шуға мин:
Аллаһу әкбәр!
Аллаһу әкбәр!
Аллаһу — Раббүл ғәләмин.

## И Рамазан – нурлы ай!

Рәжәп айы — ғәжәп ай,
Бәрәкәткә тулған ай,
Хаҡ Тәғәләм, Раббым өсөн
Бик ҡәҙерле булған ай.

Шәғбан айы — ғәзиз ай,
Хикмәттәргә, сергә бай,
Аллаһуның Хаҡ Илсеһе
Ҡәҙер иткән изге ай.

И Рамазан — нурлы ай,
Йәнгә ғәзиз ул шулай!
Мәрхәмәтле, оло ай,
Мең сауапҡа тулы ай!

## Йәннәтле бул, милләтем!

— Йә, Мөхәммәт (с.ғ.с.),
Әйтсе, зинһар, ниҙә һинең зиннәтең?
—Таныуымда, табыуымда
Хаҡ Тәғәлә ҡөҙрәтен!
— Йә, Мөхәммәт (с.ғ.с.),
Әйтсе, зинһар, ҡайҙан һинең
көс-дәртең?
—Таныуымдан, табыуымдан
Хаҡ Тәғәлә йәннәтен!

— Йә, Мөхәммәт (с.ғ.с.),
Табырмы һуң йәннәтеңде милләтем?
— Мин өҙөлөп саҡырырмын:
«Өммәтем!
Өммәтем!
Өммәтем!»

* * *

Ер йөҙөнә
Әлмисаҡтан
Күпме нәби килгәндер —
Барыһы һинең
Балаларың,
Олуғ Әҙәм пәйғәмбәр (ғ.с.)!

Әҙәм булып,
Әҙәм булып(!)
Ер йөҙөнә килгәндәр
Аллаһуны һинең кеүек
Һөйһөн ине,
Йә Ибраһим пәйғәмбәр (ғ.с.)!

Ялбарайыҡ,
Кемдәр бөгөн
Аҡ намаҙлыҡ йәйгәндәр,
«Өммәтем!» — тип саҡырғанда
Һинең сафта
Булһаҡ ине,
Йә Мөхәммәт пәйғәмбәр (с.ғ.с.)!

## Шул хис менән йәнем Ергә килде...

Аллаһу Тәғәләгә инаныуҙан һуң иң беренсе ғәмәл — халыҡҡа ҡарата мөхәббәт күрһәтеү.

*Башҡортса дини календарҙан*

Хәҙистәге һүҙҙәр йөрәгемдә
Ҡояш кеүек, гүйә, balҡыны:
Аллаһтан һуң һин халҡыңды ярат,
Аллаһтан һуң ярат халҡыңды!
Ниндәй оло мәғәнәгә эйә,
Ниндәй көскә эйә был һүҙҙәр!
Беҙ Аллаһты барыбыҙ һөйһәк ине,
Булһаҡ ине барыбыҙ илһөйәр!
Һин ни хәлдә, илем?! Доғаһыҙҙар
Күрһәтерме беҙгә хаҡ юлды?
Минең ҡәүемемә нисә йылдар
Аллаһ тиеп әйтеү тыйылды.
Бөгөн килеп, инде бөгөн килеп,
Яҡты булғанда ла уй-ниәт,
Кем өсөндөр: «Халҡым!» — тиеү — хәүеф,
Кем өсөндөр хатта — енәйәт!
Төрлө-төрлө аҡланыуҙар табып,
Бөгөн килеп ниҙәр тиһәк тә,
Аллаһ һүҙе ҡан тамыры менән
Беркетелгән беҙҙең йөрәккә.

Һәм әйттермәҫ өсөн ошо һүҙҙе
Тапһалар ҙа бөгөн мең сәбәп,
Йөрәктәрҙә мәңге йәшәйәсәк
Халҡыбыҙға булған мөхәббәт.
Шул хис менән йәнем Ергә килде,
Шул хис менән күккә талпынды:
Мин иң тәүҙә Аллаһуны һөйәм,
Өҙөлөп һөйәм шунан халҡымды!

*декабрь, 2016*

## Доға ҡылам

Иле юҡтың ғына теле юҡ!

*Рәми Ғарипов*

Аңлар өсөн аҡыл етмәй —
Кемдәр нимә ҡылғандар?!
Халҡымды бит аяп тормай
Дин өсөн дә ҡырғандар,
Ер өсөн дә,
Ил өсөн дә,
Тел өсөн дә ҡырғандар.

Ошо ғәзиз дүрт төшөнсә
Ҡибла кеүек дүрт яҡтан,
Уны ҡабат үртәр өсөн
Кемдәр бөгөн ут яҡҡан?!

Ерһеҙ ҡалһаҡ — ил бөтөр,
Илһеҙ ҡалһаҡ — тел бөтөр,
Телһеҙ ҡалһаҡ — дин бөтөр,
Динһеҙ ҡалһаҡ — көн бөтөр...

Үрсем артыр — ер булһа,
Күсем артыр — ил булһа,
Көсөм булыр — дин булһа,
Был донъяла БАШҠОРТ тигән
Исемем булыр — тел булһа!

Ер — беҙҙе йортло иткән,
Ил — беҙҙе ҡотло иткән,
Дин бит ул һаҡлы иткән,
Тел бит хоҡуҡлы иткән!

Доға ҡылам: «Илем! — тип, —
Минең берҙән-берем!» — тип.
Ерем, телем, динем, тип,
Ерем,
        Телем,
                Динем, тип!

*декабрь, 2016*

* * *

Бер-беребеҙҙе кисерәйек,
Кисерәйек, кисерәйек,
Яуап тотор мәлебеҙҙе
Иҫебеҙгә төшөрәйек!

Бер-беребеҙҙе ҡәҙерләйек,
Ҡәҙерләйек, ҡәҙерләйек,
Донъя — фани. Үҙебеҙҙе
Ахирәткә әҙерләйек!

Бер-беребеҙҙе йыуатайыҡ,
Йыуатайыҡ, йыуатайыҡ,
Һуңғы сәфәр, һуңғы юлға
Доға менән оҙатайыҡ!

Бер-беребеҙҙе һағынайыҡ,
Һағынайыҡ, һағынайыҡ,
Ожмах беҙҙе осраштырһын —
Аллаһуға табынайыҡ!

* * *

Их, яулыҡһыҙ йөрөйбөҙ шул, ҡыҙҙар,
Бар ирҙәрен илдең аҙҙырып,
Бар ирҙәрен илдең меҫкен итеп,
Һуңғы иманынан яҙҙырып.

Ә бит ниндәй ирҙәр булған элек,
(Мин ишетеп беләм йырҙарҙан)!
Ил терәге улдар тыуыр микән
Ярым шәрә ҡатын-ҡыҙҙарҙан?!

Илдә мәхшәр хәҙер, шул мәхшәрҙең
Булыр микән берәй туҡтары?!
Яулыҡ ябынмаған ҡатындарҙың
Ҡарашында — иблис уҡтары.

Яулыҡ ябынмаған ҡыҙ-ҡырҡынды
Аяр микән ирҙең аҙғыны?!
Шулмы инде илдең күрәсәге,
Шулмы хәҙер беҙгә яҙғаны...

Яулыҡ ябынмаған ҡатын-ҡыҙҙар —
Мәс(е)кәйме ул беҙ, убырмы...
Яулыҡ ябынмаған инәйҙәрҙең
Доғалары ҡабул булырмы?

Ә бит бар ғәмебеҙ һыйған уға,
Ябай әйбер түгел ул яулыҡ,
Уның көсө, уның хәсиәте
Йәһәннәмдән ҡалҡан булырлыҡ!

Аҡ яулыҡлы инәй доға ҡылһа,
Фәрештәләр баҫыр күс һырып...
Ҡуй, яулыҡһыҙ йөрөмәйек, ҡыҙҙар,
Илдең бәрәкәтен осороп!..

## Алғыш

*Изге Рамазан айында донъяға*
*килгән сабыйҙар: Йәғәфәр,*
*Сәлимәкәй һ.б. ихлас сәләмләп*

Лә иләәһә илләллаһ!
Уңған булһын был бала!
Был донъяны йәмләр өсөн
Тыуған булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Батыр булһын был бала,
Барса кеше һоҡланырлыҡ
Матур булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Ипле булһын был бала,
Ил тип фекер йөрөткәндә,
Төплө булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Зирәк булһын был бала,
Ил-йортона, үҙ халҡына
Терәк булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Ғорур булһын был бала,
Илде яҡлап ҡалҡан һымаҡ,
Торор булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Оло булһын был бала,
Аллаһуның иң һөйөклө
Ҡоло булһын был бала!
Собхан Аллаһ! Ма ша Аллаһ!

*2013*

## Сирләгәндә

Аҡрын ғына Ер өҫтөнән үтеп барам,
Ҡыҫҡартам, ти, үтер юлды Яҙмыш — һаран,
Берсә һыҙлай кемдер һалған тел яраһы,
Берсә һыҙлай, әрнеп һыҙлай йөрәк ярам,
Аҡрын ғына теге яҡҡа китеп барам...

Китеп барам, йәнгә яҙам ҡырҙар төҫөн...
Шул ҡырҙарҙың матурлығын йырлар өсөн
Мин килгәйнем. Инде бына үтеп барам...
Ҡотҡар, Хоҙай, йырланаһы йырҙар өсөн!

Ашыҡтырма теге яҡҡа, тар ҡәбергә!
Өлгөрәйем хаталарҙы төҙәтергә,
Изгелекте, игелекте күбәйтергә,
Тәүбә һүҙен йөҙ әйтергә, мең әйтергә,
Ашыҡтырма теге яҡҡа, тар ҡәбергә...

Унда яуап бирәһем бар ҡырҙар өсөн,
Еңел-елпе егеттәр һәм ҡыҙҙар өсөн,
Әсәйемә мин өҫтәгән һырҙар өсөн,
Яҙылған һәм яҙылмаған йырҙар өсөн.
Йырҙар өсөн...
Йырҙар өсөн...
Йырҙар өсөн...

## Аҡ ҡорбан

Был гонаһлы донъяларҙа
Артмаҫмы тип миһырбан,
Балаҡайҙарым хаҡына
Инселәнем аҡ ҡорбан.

Йылынһаң да ят усаҡта,
Арбаһа ла сит ерлек,
Мин Хоҙайҙан көс һораным
Һине ғәфү итерлек.

Ураҙалы саҡта йәнем
Ризыҡ һалмай уртыма,
Ут һораным усағыма,
Ҡот һораным йортома.

Ә үҙемә йыр һораным
Бар ғүмергә етерлек,
Киткәндә лә был донъяға
Аҡ нур һибеп китерлек!

*1998*

## Сабыр ит, бәндә!

Йәнең бар икән
Әлегә тәндә,
Намаҙҙар уҡы
Иртәнге мәлдә.

Уянам тиһәң
Иманлы хәлдә,
Сабыр ит, бәндә!
Сабыр ит, бәндә!

Ҡояш көлгәндә
Һинең түбәңдә,
Кәмселек тимә,
Булһаң түбәндә.
Дауам ит көндө
Иманлы хәлдә,
Сабыр ит, бәндә!
Сабыр ит, бәндә!

Төндәй ҡараңғы
Гүргә кергәндә,
Булырға тырыш
Иманлы хәлдә.
Раббың уятыр,
Үлдем, тигәндә.
Сабыр ит, бәндә!
Сабыр ит, бәндә!

* * *

Мин бары тик
Бер сүп кенә:
Туҙан инде!
Нимә туплап
Ахирәткә
Уҙам инде?!

Мин бары тик
Бер бисара
Шиғыр яҙған:
Зекер ҙә юҡ.
Фекер ҙә юҡ —
Күңел аҙған...

## Көрткә сумды ҡала

Аллаһу Тәғәлә фәрештәләренең иҫәбе-һаны юҡ. Бер тамсы һыуҙы ергә тиклем бер фәрештә оҙатып төшә. Был уның вазифаһы. Артабан ул кире һауаға күтәрелә. Ҡар яуғанда иһә ҡар бөртөктәрен оҙатып төшкән фәрештәләр ерҙә тороп ҡала. Шуның өсөн ҡарҙың бәрәкәте ҙурыраҡ. Ҡар яуғанда Аллаһу Сүбхәнә үә Тәғәлә бәндәләренә тағы ла нығыраҡ рәхимле була. Шуға күрә рәхмәтле була белергә кәрәк. Ҡыҙғаныстҡа ҡаршы, кешеләр рәхмәтле түгел.

*Солтан әүлиә, Нәкшбәндиә тәриҡәте шәйехе Мөхәммәт (Мехмәт) Әдил Хаккани сөхбәтенән*

Көрткә сумды ҡала. Ир-егеттәр
Ҡар көрәргә сыҡты, түҙмәне.
Кемдер мәҙәк һөйләп албырғаны,
Кемдер иһә ғәйеп эҙләне.

Интернетҡа теҙҙе юҡ-бар хәбәр,
Кемдәр көйөп, кемдәр һөйөнөп.
Ә бит күктән доға яуҙы шулай
Һәм бәрәкәт яуҙы өйөлөп.

Талашҡанда шулай әҙәми зат,
Бер-береһенә утлы ҡуҙ атып,
Һәр бер ҡар бөртөгөн ергә тиклем
Фәрештәләр төштө оҙатып!

Тик күрмәне халыҡ. Боронғолоҡ
Һәм киләсәк бында күреште.
Белһәң ине, фәрештәләр менән
Урал һырттарына ни төштө?!

Халҡыбыҙҙың яҡты киләсәктә
Йәшәүҙәрен көҫәп бар булып,
Иман ямғырҙарын теләгәйнек,
Яуҙы микән әллә ҡар булып?!

Аҡ нур булып, аҡ фатиха булып,
Яуҙы бит ул беҙҙең көткәндәр,
Тойҙо уны яҡты күңел менән
Шул аҡ ҡарҙан атлап үткәндәр...

Доға ҡылды берәү! Кем һүгенде,
Кем гәзиткә теҙҙе үстәрен.
Көрткә сумды ҡала. Фәрештәләр
Ҡамап алды ерем өҫтәрен...

*30.03.2017*

* * *

Намаҙлыҡ ишеме, алдымда
Аҡ ҡағыҙ.
Нахаҡтан, ялғандан
Йәнемде һаҡлағыҙ!
Ҡыш яңы башлана,
Һағындым яҙ айын.
Күңелде иретер
Доғалар яҙайым.
Ышанам: аҡ бәхет
Йылмайыр миңә бер
(Ҡыш яңы башлана —
Өшөтәниңәлер...)!
Кәфенгә оҡшаған:
Ер өҫтө — аҡ ҡағыҙ.
Яҙаһы йырым күп,
Йәнемде һаҡлағыҙ!

## Ауыр һүҙ әйтһәм...

Әллә аҡыл кермәгәнме,
НыҒынмағанмы быуын?!
Эй, күтәрә белмәйем шул
Һүҙҙәрҙең ауырлығын.
Өнһөҙ ҡалам. Ә күңелдә
Яралар әрнеп һыҙлай:
Ауыр һүҙ әйтһәм кешегә,
Йөрәгем ярылырҙай.

## Бөжәктәр тураһында

Оло юлда машиналар,
Гүйә, бөжәк.
Көнө-төнө бер туҡтауһыҙ
Тора гөжләп.

Юл аша ла сығам тимә,
Ағым көслө.
Ябай түгел был бөжәктәр —
Үлемесле.

...Ерҙә бәғзе кешеләр ҙә
Бөжәк һымаҡ.
Ҡайһы һине ысын саға,
Ҡайһы уйнап.

Ҡыҙыҡ өсөн! Бар бит кеше
Ҡара эсле.
Ундайҙарҙың ағыуы ла
Үлемесле...

*25.04.2002*

## Кешегә ҡарап рәнйемә!

Кешегә ҡарап рәнйемә,
Кеше бит ул һин түгел.
Һәр кемдең үҙ манараһы:
Башҡа уй, башҡа күңел.

Кешегә ҡарап рәнйемә,
Урманға барып түгел:
Йөрәгеңә ҡара ятмаҫ,
Йәнеңә булыр еңел.

Кешегә ҡарап рәнйемә,
Ҡара уйҙарҙан төңөл,
Был донъя бит фани ғына,
Был донъя ысын түгел!

## Килен булып әйткәнем

Абынһам да, һөрөнһәм дә,
Килермен ипкә.
Мин үҙ балаң булмаһам да,
Тибәрмә ситкә.

Ризалыҡтарыңдан яҙһам,
Һүнер өйҙә йәм.
Ғәйептәрем булһа, кисер,
Рәнйемә, ҡәйнәм!

Күңелемдең тулған сағы:
Мин шундай илаҡ!
Ярат әле берҙе генә
Әсәйем һымаҡ!
Әсәйем һымаҡ...

## Көртмәле

Шул хәтлем бейеккә менеп
Үҫмәһәңсе, көртмәле!
Бикәстәрҙән ҡалдыниһәң —
Эй телдәре төртмәле.

Ҡайһылай ҙа күп һин быйыл —
Һауып ҡына үтмәле.
Күнәктәрем тулды инде,
Тик серҙәрем бөтмәне.

Күңелем дә тулған минең,
Илар, тиеп көтмә (ә)ле,
Яңғыратып йыр йырлармын
Үҙәктәргә үтмәле.

Ә төртмә тел бикәстәрем:
«Ауһар еңгә!» — тиһендәр,
Еңгә хәлен, еңгә булмай,
Улар ҡайҙан белһендәр?!

*1993*

## Семафор

Дуҫлаштыҡ та, буғай, һинең менән,
Таныштыҡ та инде яҡшылап,
Бер үк ерҙә бер үк поездарҙы
Оҙатып һәм тағы ҡаршылап.

Бер үк ерҙә бер үк поездарҙы
Бер беҙ генә түгел көткәндәр,
Яман һүҙҙән, имеш-мимештәрҙән
Ҡолаҡтарың тоноп бөткәндер...

Ә шулай ҙа көлөп торһаң да һин,
Түҙемлегең йыйып, бирмәй һыр,
Күҙкәйҙәрең ҡыҙыл: йәрең киткәс,
Һин дә илайһыңмы, семафор?!

*1993*

## Иҫән-һау йөрө!

Ҡайҙа ғына йөрөһәң дә,
Иҫән-һау йөрө!
Кемдеңдер бит Ер йөҙөндә
Һин берҙән-бере.
Кемдеңдер ғәзиз атаһы,
Кемдеңдер улы,
Һине көткән ҡатындың да
Уң булһын юлы!
Доға ҡылам. Рухым һиңә
Түгел ете-ят,
Миңә түгел,
Миңә түгел,
Илгә кире ҡайт!
Үҙем өсөн һорамайым:
Иҫән-һау йөрө!
Илемдең бит, халҡымдың бит
Һин — берҙән-бере!!!

## Эштәрем булғанға...

Йәшәргә ярамай
Күҙ йәшкә төйөлөп,
Юҡ-барға бошоноп,
Юҡ-барға көйөнөп.
Кешене юҡ итә,
Терелтә бер ҡараш,
Мин һеҙгә йылмаям
Күҙ йәше аралаш.
Мин һеҙгә йылмаям,
Күңелем тулғанға.
Дәрт итәм йәшәргә
Эштәрем булғанға.
Эштәрем китәләр
Өйөлөп-өйөлөп,
Шул эштәр булғанға
Йәшәйем һөйөнөп!

## Ҡояшым бар!

Күктә илай, йәшен һылай
Ҡап-ҡара болот,
Гүйә, күңелем сыуағын
Алмаҡсы йолоп.
Йөрәгемдә ҡояшым бар:
Нуры яп-яҡты,
Болоттарҙы бар тип белмәй,
Нурлай ян-яҡты.

Кешеләрем! Мин бит һеҙгә
Бәхет теләйем,
Йөрәгемдәге ҡояшым
Һеҙгә тәғәйен!
Күктәге ҡара болоттай
Булмағыҙ бойоҡ,
Йәшәгеҙ һеҙ йөрәгемдең
Йылыһын тойоп!

* * *

Аҫыл ирҙең күңелендә
Эйәрле-йүгәнле ат булыр,
Уға төрлө ҡаршылыҡтар,
Ығы-зығы ят булыр.

Аҫыл ирҙең йөрәгендә
Ут яныр ялҡын булып,
Тәү ҡарашҡа ғына үҙе
Күренер һалҡын булып.

Аҫыл ирҙең эргәһендә
Ҡатын-ҡыҙ тыйнаҡ булыр,
Холоҡ-фиғеле — тотанаҡлы,
Хистәре йыйнаҡ булыр.

Аҫыл ирҙең аҡылына
Аҡһаҡалдар таң ҡалыр.
Аҫыл ирҙән йөрөгән ерҙә
Батыр тигән дан ҡалыр!

* * *

Икмәк һалған ҡатын-ҡыҙҙың
Өйөндә ырыҫ була,
Ҡамыр баҫмаҫ ҡатындарҙың
Йөҙҙәре ҡырыҫ була.

Икмәк телер ирҙәр барҙа
Өй эсе нурлы була,
Яман иргә юлыҡҡандың
Маңлайы һырлы була.

Бәрәкәтле йортта ғына
Икмәк күпереп уңа,
Хужаларҙы, икмәгенең
Йөҙөнә ҡарап, һына.

## Буй еткерҙе инде улым...

Алдымда ғына ултырған
Малайым муйыл күҙле,
Кем уйлаһын, йылдар үткәс
Булыр тип ауыр һүҙле.
Ҡосаҡта ғына тирбәткән,
Сабыйым — ҡолонсағым,
Күңеле бөгөн һиҙә микән
Хәлемдең ҡыйын сағын?
Буй еткерҙе инде улым,
Дәү генә шул, дәү генә!
Ләкин һаман йөрәгемдә
Сәңгелдәге бәүелә...

*2016*

## Миҙгелдәр

Минуттарын һанай-һанай
(Көндәре лә оҙон ҡалай!),
Йәштәр көтә төн булғанын.

Шомланып һәм хафаланып,
Йоҡлай алмай яфаланып,
Ҡарттар көтә көн тыуғанын.

Урта йәштә игеҙ һымаҡ —
Көн дә,
Төн дә тигеҙ һымаҡ.

*1993*

## Һеңләмә

Көҙгө сыуаҡ. Күрекһеҙ ҙә булған
Миләштәр ҙә инде ҡыҙарҙы.
Күҙ теймәһен, тиеп, ҡарап ҡалам
Миләш кеүек еткән ҡыҙҙарҙы.

Алһыу йөҙҙәреңә төҫ кенә бит,
Яҡут муйынсаҡты таҡ, һеңлем,
Һинең кеүек мин дә матур инем,
Тик ҡыҙылдан күптән төңөлдөм.

Күҙ ҡыҙҙырыр миләш булмам хәҙер,
Ҡып-ҡыҙылдан хатта кейенһәм.

Суҡлы тәлгәштәрҙең быйыл тағы
Ҡыҙарыуын күреп һөйөнәм.

Апайыңа шул да шатлыҡ бөгөн
(Торған һайын ғүмер бәҫлерәк!).
Урам йәме булып атла, һеңлем,
Һин бит минән күпкә йәшерәк...

*2001*

## Апай булғас...

Наҙлы ғына ҡыҙ бала
Бигерәк етеҙ ҡуҙғала!
Йөрәгемә ҡуҙ һала,
Ҡайһы ваҡыт тоҙ һала,
Ҡайһы ваҡыт боҙ һала...
Ә мин һөйөп ҡарап ҡалам
Яндарымдан уҙһа ла.

## Бикәсте оҙатҡанда

«Һөйгән һөйгәненә бара,
Һөйгән һөйгәнен ала...»
Йөрәктәргә ҡан һауҙырып,
Өйҙән китә ҡыҙ бала.

Юҡ, көсләшеп алманығыҙ,
Алдығыҙ һорап ҡына.

Инде өйгә ҡайтһа ла ул
Булыр тик ҡунаҡ ҡына.

Йәндәй ғәзиз күреп үҙен
Аяп үҫтергән бала,
Таянысһыҙ, сит-ят ерҙә
Яңғыҙы тороп ҡала!

Үҫтерҙек шул һөйөп кенә,
Сәсен икенән үреп,
Һеҙ ҙә уны яратығыҙ
Үҙ балағыҙҙай күреп!

Ышанысы — оло һөйөү
Һүнмәһен, һүрелмәһен,
Һеҙҙең яҡта ҡыҙыбыҙҙың
Күҙ йәше түгелмәһен!

Һеҙҙең яҡта ҡыҙыбыҙҙың
Бер шатлығы биш булһын,
Беҙҙең өсөн — ҙур ҡыуаныс,
Һеҙҙең өсөн иш булһын!

*июль, 2002*

## Теләк

Берегеҙ — тупһа,
Берегеҙ — баҫҡыс.
Берегеҙ — йоҙаҡ,
Берегеҙ — асҡыс.

Берегеҙ — тәҙрә,
Берегеҙ — ишек.
Берегеҙ — пәрҙә,
Берегеҙ — бишек,
Берегеҙ — усаҡ,
Берегеҙ — утын,
Һүндермәгеҙ
Һөйөү утын!
Бәхет һеҙгә
Күпләп килһен:
Күктән килһен,
Ерҙән килһен,
Балаларҙан,
Ирҙән килһен,
Көтөлмәгән
Ерҙән килһен!

## Ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар

Рәхмәт яҡты йөҙөгөҙгә,
Бик тәмле булды һыйҙар,
Табын күрке һеҙҙең менән,
Ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар!

Уртаҡ бөгөн беҙҙең байрам
Һәм уртаҡ беҙҙең уйҙар,
Гелән бер һүҙле булайыҡ,
Ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар!

Туғанлыҡ ебен нығытып,
Ялғанһын туйға туйҙар,
Тағы осрашырға яҙһын,
Ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар!

* * *

Беҙ икәүгә сүп өйәләр —
Йыйылғандыр сүмәлә,
Таҙарыныр өсөн хатта
Ярҙам итмәҫ өмә лә.
Ә бит донъя шундай фани!
Күпме генә түбәлә,
Тигеҙләй ул барыһын да
Ҡара ергә күмә лә...
Беҙ икәүгә сүп өйәләр,
Таҙарыныу — мең бәлә.
Турайығыҙ, ҡалҡығыҙ, тип,
Минең кеүек балҡығыҙ, тип,
Ҡояш көлә түбәлә...

## Йоҡоһоҙлоҡ

Сума алмай ыҙаланам
Ҡараңғылыҡ ҡосағына,
Күҙ алдымда — ап-аҡ ҡарҙар
Оса ғына, оса ғына.
Йоҡоһоҙлоҡ эленеп тора
Керпегемдең остарында.

Маңлайымда — күрәсәгем,
Яҙмыш юлы — устарымда.
Барын барлап, парлап ятам,
Ап-аҡ ҡарҙар оса ғына!
Минең дә бит осаһым бар
Был донъяның усағынан
Мәңгелектең ҡосағына...
Кемуҙарҙан елә ҡарҙар,
Әйтерһең дә, үткән көндәр.
Көндәй елеп йылдар үтә,
Үтмәй ләкин оҙон төндәр.
Әллә йәмләп шул төндәрҙе
Ап-аҡ ҡарҙар оса ғына.
Улар сәләм алып килә
Мәңгелектең ҡосағынан
Беҙҙең тормош усағына...

*2000*

## Шиғырһыҙ төн

Өркөтөп тә һандуғасты,
Ярһытып төн бишеген,
Эңер төшһә, олой башлай
Бәйле эте күршенең.
Үҙәктәргә үтеп шыңшый,
Тик түҙһен генә ҡолаҡ!
Ҡолаҡ нимә! Һандуғастар
Ҡушылып олор һымаҡ.

Эт күңелен аңлайым да
(Ул иреккә туймаған!),
Һуң бит мине, көсөк һымаҡ,
Бер кем бәйләп ҡуймаған...
Мин — иректә! Тик күңелем,
Әйтерһең дә, ҡыу ағас,
Инде бөҙрә талдарыма
Пар һандуғас ҡунмағас,
Ҡанһыраған йөрәк кеүек,
Һыҙылып та ата таң...
Илһам ҡошон осорғанға
Олой яҙып ултырам!

## Төнгө ҡунаҡ

Ялтыр лампа яҡтыһында
Баш осомда, түбәләге
Әллә бейей, әллә оса
Яңғыҙ шайтан күбәләге.

Эй, бахыр йән! Ҡайғынанмы,
Шатлыҡтанмы тулап-тулай.
Ә ут һүнһә, ҡараңғылыҡ
Төшөр ҡоҙғон ҡанатылай.

Төн — ул ҡанун. Бөтөнләйгә
Ҡотолорға юҡ шул сара.
Ҡараңғынан әлегә тик
Түшәмдәге ут ҡотҡара.

Ос, ос әйҙә! Яҙҙыртмайым
Һуңғы өмөт — янған уттан.
Һин дә мине ҡотҡарҙың бит
Йән өшөткөс яңғыҙлыҡтан...

*2001*

## Төнгө күбәләк

Тәҙ(е)рәмә һуғылды бер
Күбәләк.
Мин һораным: «Һиңә төндә
Ни кәрәк?

Урамда төн. Аңлашылмай
Осоуың.
Ниҙәр көҫәп, тәҙ(е)рәмде
Ҡосоуың?»

Талпынды ла, яһаны ла
Түңәрәк,
Яуап бирҙе миңә төнгө
Күбәләк:

«Урамда төн. Ҡотолоуҙар
Юҡ унан,
Ә мин бары яҡтылыҡҡа
Ынтылам.

Ҡурҡма минән. Бер нием юҡ
Өркөрлөк.

Мин — күбәләк. Ғүмер юлым
Бер көнлөк.

Сәйерме ни утҡа ҡарай
Осоуым?
Шулай баҫам йөрәгемдең
Бошоуын».

Эй күбәләк, өркөттөң шул,
Өркөттөң.
Юҡ шул миндә йөрәктәре
Бөркөттөң.

Ташлаһа ла яҙмыш бик йыш
Түбәләп.
Өнһөҙ түҙәм. Мин — бер көнлөк
Күбәләк.

Төн һәм мәкер... Ҡотолоуҙар
Юҡ унан,
Ә мин бары яҡтылыҡҡа
Ынтылам.

Мин йыр яҙып баҫам йөрәк
Бошоуын
Һәм был минең утҡа ҡарай
Осоуым.

Тәҙ(е)рәмә һуғылды бер күбәләк...

* * *

Ҡыр ҡаҙҙары, тағы ҡайттығыҙмы
Йырға сорнар өсөн донъямды?
Һеҙ ҡайтҡанса йәнем, им тапмайса,
Мең өшөнө инде, мең янды.
Һеҙ ҡайтҡанса саҡ-саҡ түҙҙем бына
(Мин йырһыҙлыҡ менән ауырыйым!)
Осор өсөн ҡанат һорамайым,
Ҡалдырығыҙ илһам ҡаурыйын!
Һеҙҙең кеүек мин дә ашығам бит,
Ваҡыт үлсәмдәре, ай, тығыҙ.
Тауыш бирмәй генә уҙаһығыҙ,
Әллә быйыл йырһыҙ ҡайттығыҙ?
Ҡыр ҡаҙҙары!
Юғалмағыҙ күҙҙән,
Ҡалдырығыҙ илһам ҡаурыйын!
Һеҙ ҡайтҡанса саҡ-саҡ түҙҙем бына,
Мин йырһыҙлыҡ менән ауырыйым.

## Ҡурҡам

Хәлһеҙ генә көҙгә инәм,
Көсө бөткән күс һымаҡ.
Алтын кәрәҙгә ҡыҙығып,
Йәнемде талай һурнаҡ.

Нисек кенә ҡышлар быйыл
Затлы умарта-ҡумтам?
Бал ҡорто балһыҙ ҡалғандай,
Йырһыҙ ҡалыуҙан ҡурҡам.

## Яҙ башы

Ҡыш та ялҡытты,
Йәйгә лә йыраҡ.
Төҫһөҙ киноны
Ҡараған һымаҡ,
Мин ергә бағам:
Офоҡҡа саҡлы
Бөтә тирә-йүн
Ҡаралы-аҡлы,
Ҡаралы-аҡлы.

Ә мин һағындым
Зәңгәр һауаны,
Хыял төҫөндә
Күктең дауамы.
Өмөтөм — йәшел,
Һағышым — һары,
Етер ине лә
Миңә шул бары.

Теләһәң, үкһе,
Теләһәң, һыҙыл,
Юҡ әле йәшел,
Юҡ әле ҡыҙыл.
Йырһыҙ талсыҡҡан
Йәнемә саҡлы,
Бөтә тарафым
Ҡаралы-аҡлы,
Ҡаралы-аҡлы...

## Мин уртала

Өҫтә ҡояш,
Өҫтә һый-аш,
Нурлы тәхет,
Ләкин һинһеҙ
Ниңә кәрәк
Миңә бәхет?

Аҫта упҡын,
Аҫта ут-һын,
Һинең һының.
Дөрләй утта
Минең ижад
Ҡауырһыным...

Үрләйем мин,
Дөрләйем мин
Һәм туҡталам:
Аҫта түгел,
Өҫтә түгел,
Ҡап уртала...

## Атым туғарылды

Атым туғарылды. Инде шулай
Сығыр микән минең яманатым?!
Һинең яйға юрта алмайым тип,
Ауыҙлығын өҙөп ҡасты атым.

Өмөттәрҙең иң-иң яҡтыларын
Тейәгәйнем мин дә — үҙе бер йөк.
Юл сатында ҡалған буш арбаға
Ҡарап тороуҙары — тере көйөк.
Әле йәйәү генә юртаҡ эҙләп,
Йүгән тотоп китеп барыуҙарым.
Һүнгән өмөттәрҙе барлай торғас,
Үҙәгемә үтте арыуҙарым.
Әҙәм хурлығына ҡалмаһамсы
(Ҡамыт һынған, атым туғарылған)!
Ҡанаттарың булһа, йүгәнлә, тип,
Аҡбуҙатым көлә юғарынан...

## Мин – йөк аты

Үҙ хәлемде үҙем беләм —
Бәйгеләргә әйҙәмәгеҙ.
Ялдарыма ҡушып үреп,
Ал таҫмалар бәйләмәгеҙ.
Сығырымдан сығармағыҙ,
Юртып киләм күндәм генә.
Уҙыш түгел, донъя йөгө
Төшкән минең иңдәремә.
Йөк атына мөһим түгел
Алға сығыу, артта ҡалыу,
Мөһим барлыҡ йөктәремде
Һөрлөкмәйсә тарта алыу.
Ә сабышҡа әйҙәмәгеҙ,
Ундай даным таралмаған.
Мин — йөк аты, мин, дуҫтарым,
Бәйге өсөн яралмаған!

## Тышаулы толпар

Кәртә эсендә бер толпар тора.
Ҡарау шәптер, ахыры — төйөрөм.
Ярһый ҙа бит малҡай, нимә ҡылһын —
Юғалтҡан ул үҙенең өйөрөн.

Аяуһыҙ ҙа йәнле хужалары
Аҡылдарын әллә юйғандар:
Йөк атына тиңләп сабыш атын,
Аяҡтарын тышап ҡуйғандар.

Яҡшы атты эләктерҙек, тиеп,
Ҡыуаналыр улар табышҡа...
Ирек даулай толпар! Ирек кәрәк
Әҙерләнер өсөн сабышҡа.

Их, ҡанатһыҙ толпар! Мин дә күптән
Егелгәнмен инде тәртәгә.
Ярһыуҙарым һыймай йөрәгемә,
Хыялдарым һыймай кәртәгә.

Күптән уҙышҡан юҡ. Мин дә хәҙер
Бәйгеләрҙә килмәм иң алдан:
Аяғымды ҡуша тышанылар
Төңөлдөрөр өсөн хыялдан.

Еңелдем мин, әммә төңөлмәнем,
Рухым һыймай сынйыр бигенә.
Был донъяла тик көсһөҙҙәр генә
Хыялынан артҡа сигенә!

## Йорт ҡаҙы монологы

Кейек ҡаҙҙар! Һеҙҙең арттан
Эй талпындым, осам, тиеп,
Һеҙҙең кеүек зәңгәр күкте,
Болоттарҙы ҡосам, тиеп.

Тик мин бейек осалманым:
Ҡанаттарым көсһөҙ ине.
Бер бейектән ергә төшкәс,
Донъя шундай төҫһөҙ ине!

Күктә — ирек! Ерҙә иһә
Йәшәүҙәре нужа икән:
Осмаһын, тип, ҡанат осон
Киҫеп алды хужабикәм.

Кейек ҡаҙҙар! Һеҙҙең кеүек
Мин дә ҡаҙ бит. Тик йорт ҡаҙы.
Бәхет өсөн, шатлыҡ өсөн
Кәрәк миңә аҙҙың-аҙы.

Алдан белеп торһам да мин
Хужаларҙың бысаҡларын,
Эй килгәйне тере саҡта
Болоттарҙы ҡосаҡлағым.

Үкһеп тамған ҡан таптарын
Ҡаурыйҙарым күмгәс кенә,
Мин дә күккә ашырмын бер
Үлгәс кенә! Үлгәс кенә...

* * *

Күк көмбәҙе — түңкәрелгән кәсә,
Биҙәк булып төшкән аҡ болот.
Эй көнләшеп ошо болоттарҙан
Ҡарап торам әле онотолоп.

Күл өҫтәре — семәрле лә көҙгө,
Күҙен алмай унан бер ҡатын.
Һомайғоштор йәне. Йөҙө моңһоу,
Бәреп һындырғандар ҡанатын.

Ер өҫтәре — йәшел генә бәрхәт,
Нағыш булып сәскә сигелгән.
Үлеп яратһам да һине, ерем,
Хыялымдан артҡа сигенмәм.

Тотошлайға мине һура алмаҫ
Төпһөҙ күлдәй тәрән ҡайғылар.
Шау мәтеле юлым. Атлағанда
Аяҡтарым бик йыш тайғылар.

Ер күтәрер, ҡосағына алыр,
Иҫтән яҙып бер саҡ йығылһам.
Тик аңламаҫ мине зәңгәр күктәр
Ташлап китһә әгәр йыр-илһам.

Мин — Ер ҡыҙы. Әммә күккә ғашиҡ.
Һауа минең тәүге Әсәйем.
Шуғалыр ҙа ерҙән — көс-дәрт алып,
Күктән илһам алып йәшәйем.

## Ҡәләмдәштәремә

Беҙме инде бошмаҫ әҙәм,
Беҙме инде ҡырағай,
Арабыҙҙа берҙәмлек юҡ,
Барыбыҙ тырам-тырағай.
Араларҙа берҙәмлек юҡ,
Ә ғүмер ҡыҫҡа ғына:
Бер килеп быуа алҡымдан,
Бер килеп башҡа һуға.
Бер-беребеҙҙән ситләшкәс,
Кемгә арҡа терәйһең?..
Илашыуҙан ниндәй файҙа
Алып киткәс берәйһен...
Ғүмер уҙа... Ваҡыт тигән
Машина китеп бара,
Тырам-тырағай беҙҙәрҙең
Башына етеп бара...

*2011*

## Ә шағирә, ил, тип яна...

*Әхирәтем, билдәле шағирә*
*Лариса Абдуллинаға*

Мөлкәт туплап йорттарында,
Мал туплап ҡураһында,
Күп шағирҙар шиғыр яҙа
Мөхәббәт тураһында.

Ҡаурыйынан тама һүҙҙәр:
Сәскә... Һөйөү... Күбәләк...
Ә шағирә: «Ил!» — тип яна,
Китһәләр ҙә түбәләп...
Кемдер берәү дан көҫәйҙер,
Кемдер аҡсаһын һанай,
Ә шағирә ШИҒЫР яҙа,
Итәген ямай-ямай.
Итәк нимә, йөрәгенә
Нисәмә уҡ тоҫҡалған?!
Айырырмын тимә ҡапыл
Ысын дуҫты дошмандан...
Эй башҡортлоҡ! Бөтәһенә
Күрһәтә инең ҡәҙер
(Һине һатҡан әпкәләйҙәр
Илең һатырға әҙер!)...
Һин: «Халҡым!» — тип өндәшкәндә
Йөрәгең ҡанай-ҡанай,
Күп шағирҙар, ышыҡланып,
Итәк артыңдан ҡарай.
Аяп тормай, уҡ тоҫҡайҙар
Арҡаңдан ҡаҡҡан булып...
Их, яныңа баҫһаларсы,
Илемә ҡалҡан булып!
Халҡыма ҡалҡан булып!..

* * *

*Яҡташым, Башҡортостандың*
*халыҡ шағиры Тимер Йосоповҡа*

Әйлеләрҙең яугир уҙаманы,
Аҫыл ырыу-заты һартайҙың,
Сал сәстәрең күрһәң, көймә, ағай,
Әйтмә, зинһар, әйтмә: «Ҡартайҙым!»
Икебеҙҙә күпме оҡшашлыҡ бар:
Күңел офоғобоҙ — бер асман.
Икебеҙ ҙә шулай бер ҡатлы беҙ,
Икебеҙ ҙә бер иш ҡарасман.
Ил тойғоһо менән, ер тойғоһо
Ҡәлептәрҙә беҙҙең бер үлсәм,
Күңелебеҙҙә бер үк әрнеү ята,
Йәнебеҙҙе әйҙәй бер үк сәм.
Дыуанымда нисә генә ауыл,
Һорамағыҙ, ҡайҙа һарттарым?
Бисәләрҙе Себер оҙатҡандар,
Яндырғандар ауыл ҡарттарын.
Юҡ ителгән һуңғы һартайҙарҙың
Рухын күрәм һинең төҫөңдә.
Был донъяла һин йәшәргә тейеш
Үҙең өсөн, улар өсөн дә!
Сал башыңды эйеп, уфтанмасы,
Әйтмә, ағай, зинһар: «Ҡартайҙым!»
Һинең кеүек ирҙәр һирәк әле,
Илкәйемә һин бик кәрәк әле,
Ғорур йәнле минең һартайым!

## Төш*

*Иҫке Хәлил яңы бәшмәк йыя,*
*Бәшмәк йыя көн дә бар ауыл.*
*Ҡунаҡ ҡаршыларға, оҙатырға,*
*Күстәнәскә лә бит бара ул.*

Ирек Кинйәбулатов

Мин төш күрҙем бөгөн. Нимәгә лә
Юрай белмәй уны хәл бөттө,
Иҫке Хәлил — тыуған ауылымды
Сихырлаған кейәү егете.

Имеш, хәҙер минең ауылдаштар
Башҡасараҡ донъя көтәләр:
Шиғыр менән улар уяналар,
Шиғыр уҡып йоҡлап китәләр.

Шау шиғырҙан, имеш, барса мөхит,
Шау шиғырҙан, имеш, уй-ниәт,
Кемдер берәү ҡапыл сирләп китһә,
Диагнозы уның — шиғриәт.

Иген урынына шиғыр үҫә,
Тик шиғырҙан тора аш-һыйҙар,
Һылыу йәш килендәр һыу ташымай,
Көйәнтәләп илһам ташыйҙар.

---

* Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылы кейәүе, күренекле шағир Ирек Кинйәбулатовтың 75 йәшлек юбилейы айҡанлы.

Мин дә шиғыр яҙам икән тигән,
Тәңгәленә еткәс хыялдың,
Баш осонда сәғәт шылтыраны!
Ни үкенес: килеп уяндым...

Бөтә Иҫке Хәлил бәшмәк йыя,
Бәшмәк йыуа һыуҙа ҡыҙ-ҡырҡын.
Төштә түгел, өндә илһамланып
Ирек ағай уҡый шиғырын.

Күстәнәскә бер аҙ бәшмәк алыр,
Ҡайтып китер шунан йыр тейәп,
Ғүмер буйы сирле булды еҙнәй,
Диагнозы уның — шиғриәт!

## Юҡһыныу

*Туҡай урамында илаһи мәл —*
*Алтын миҙгел итә тантана,*
*Йырлап торған Нәжми йүкәһенән*
*Япраҡ түгел, гүйә, моң тама.*

Ҡол-Дәүләт

Туҡай урамына көҙ килермен —
Һинең йүкәләрең алтынланғас,
Улар һинең һәр йырыңды белә,
Ул йырҙарҙы тыңлап танһыҡ ҡанмаҫ.

Туҡай урамына ҡыш килермен —
Һоҡланырмын ҡарҙың аҡлығына.

Йыуатырмын мин дә ҡошсоҡтарҙы
Түҙегеҙ, тип, яҙға саҡлы ғына!

Туҡай урамына яҙ килермен —
Тәбиғәттең ҡабатланмаҫ мәле!
Төштәремә инһәң, мин һөйләрмен
Нисек унда йүкәләрҙең хәле...

Туҡай урамына йәй килермен —
Сәскә еҫтәренә иҫерергә.
Рәнйеп кенә китеп барҙың микән,
Өлгөрҙөңмө икән кисерергә?!

Туҡай урамына гел килермен...

*25.02.2001*

## Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла...*

Өндә — һеҙ юҡ,
Төштәремдә
Өндәшһәгеҙ нимә була?!
Һағындыра ағайҙарым:
Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла.

---

* Күренекле шағирҙар Рәмил Ҡол-Дәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла Зарипов иҫтәлегенә.

Өсөгөҙ ҙә иртә китте,
Үкһеҙ ҡалды улдарығыҙ.
Күңелемде шаҡып, илай
Яҙылмаған юлдарығыҙ.

Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла,
Өнөмдә — юҡ, төштәһегеҙ,
Ни әйбергә тотонһам да,
Иҫтәремә төшәһегеҙ.

Һеҙҙең әрнеү беҙгә күсте,
Ауыр икән күтәргеһеҙ.
Һеҙ әйтерҙе әйтеп бөткәс
Килермен мин. Көтәрһегеҙ...

Һеҙ бит мине өйрәттегеҙ:
— Былай яҙма, яҙ тегеләй!
Остаздарым! Һәр берегеҙ
Булған алтын бөртөгөләй!

Ағайҙарым! Яндарымда
Һеҙ юҡлыҡтан йән һыҙыла:
Беҙгә терәү инегеҙ һеҙ,
Илдә берәү инегеҙ һеҙ,
Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла...

* * *

*Әхмәр Үтәбайға*

Ике алма тотоп килдең:
«Әйҙә, алма ашайыҡ!»
Иңгә ятҡан хәсрәттәрҙе
Әйҙә(ә)ле алмашайыҡ.

Бәләкәйе һиңә булды
Уттай ҡыҙыл алманың.
Тауҙай ҡайғы күтәрһәң дә,
Иңдәремә һалманың.

Миңә һутлы алма һондоң,
Һинең алма — әселер.
Йөрәгемә изгелегең
Орлоҡ булып сәселер.

Күңелемде, фәрештәләй,
Ҡурсый һинең яҡты һын.
Минең йөгөм ауыр түгел,
Һин күтәргәс яртыһын.

Йыуатам тип дуҫтарыңды
Пар алмалар өҙәһең,
Тик һин үҙең ғазаптарға
Нисек кенә түҙәһең?

Һағышыңды баҫыр инем,
Килтереп бер уңайын.
Әйтсе, зинһар, ҡыйын саҡта
Ҡасан алма һонайым?!

## Бесән өҫтө

*Ҡәләмдәшем Айһылыу Ғарифуллинаға*

Һаумы, Айһылыуҡай! Беҙҙә лә шул
Бесән өҫтө инде: ваҡыт тар.
Ҡыштырҙап та торған бакуй булып,
Теҙелешеп ята шиғырҙар.

Мин дә сабынлыҡта. Әрәм итеп
Булмай ҙаһа көнөн Алланың,
Оҫта салғысы ла түгел инем,
Шағирә лә була алманым.

Һин дә унда бесән сабаһыңдыр
Ирҙәр менән рәттән, бирмәй һыр.
Һәүкәшкә ни бесән генә булһын,
Кем сапһа ла уға барыбер.

Беҙ икебеҙ — эшем эйәләре,
Ниндәй «сая», ниндәй «сос» халыҡ
(Бөтә булған шиғри табыштарҙы
Кәбән менән бергә осланыҡ)!

Бесән мәле тик бер генә, тиҙәр,
Ни үкенес, ҡалай ваҡыт тар:
Осланмаған кәбән рәүешендә
Теҙелешеп ята шиғырҙар...

## Бына шулай минең хәлдәрем

*Башҡортостандың атҡаҙанған*
*артисткаһы, Тәтешле ҡыҙы*
*Гөлзәмиә Ситдиҡоваға*

Ҡалаға тип киткән юлсыларҙы,
Эй көнләшеп, оҙатып ҡалған мәлдәр
Иҫкә бик йыш төшә.
Тыуған ауылым,
Бына шулай хәҙер минең хәлдәр...
Бына шулай хәлдәр!
Тик ҡалала
Серле донъя,
Йым-йым иткән уттар...
Шул ҡалаға тиҙерәк мине лә бер
Алып китһен ине аҡ болоттар!
Шулай хыялландым! Ихлас әйткәс,
Ҡабул булған инде теләгем.
Мин ҡалаға киттем, ғүмер буйы
Һағыныр өсөн һине, төйәгем!
Һағыныр өсөн көтөү ҡайтҡандарын,
Төтөн еҫен, еләк тәмдәрен.
Бер нәмәгә алмаштырмаҫ инем
Ауылымдың ошо йәмдәрен.
Шулай хәҙер минең хәлдәрем...
Сәхнә балҡыштары һушты алмай,
Ем-ем килгән ҡала уттары
Ҡыҙыҡтырмай күптән.
Төшкә инә
Бүрәнәле
Ауыл йорттары.

Киң күңелле, шаян ауылдаштар,
Һәр һүҙегеҙ ине кинәйә.
Күпме илдәр гиҙҙем.
Ләкин бары
Һеҙҙең янда
Офоҡ киңәйә.
Тик ошонда йәшлек мөхәббәтем,
Тик ошонда ысын дуҫтарым.
Һөйгәнемдең ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына
Етәкләгән йылы устарын
Юҡһынамын һаман.
Их, ауылым! Йәтеш тыуған яғым —
Тәтешле!
Әллә ҡайтып киләйемме икән
Тирә-яҡҡа һелтәп
Бар эште.
Ҡайтырмын да... Иҫке яраларҙы
Мин китермен тағы ҡуҙғатып.
Ауыл осондағы ҡалҡыулыҡта
Моңһоу бер ҡыҙ ҡалыр оҙатып.
Бала сағым бит ул!
Ҡалһын, әйҙә!
Киткән ҡыҙҙы бына йәлләнем!
Ул ҡыҙ инде хәҙер
Өлкән ханым...
Һағынып йәшәй йәшлек мәлдәрен!
Бына шулай минең хәлдәрем!!!

*2016*

## Аҡ тирмәләр ҡороп йәшәнең

*Башҡортостандың халыҡ*
*шағиры Ҡәҙим Аралбайҙың*
*75 йәшлек юбилейы айҡанлы*

Их, күрергә ине берҙе, ағай,
Ниндәй булды икән йәш мәлең?!
Өфөлә бит йәнең толҡа тапмай,
Аҡ тирмәләр ҡороп йәшәнең.
Үҙһенмәнең ҡатлы кешеләрҙе,
Йырламаның заман көйҙәрен,
Һин данланың алыҫ бала саҡтың
Аҡ балсыҡлы саман өйҙәрен...
Тел осонда булды гел Таналыҡ,
Йөрәгеңдә булды — Таңатар,
Ил тип янғас, беҙгә күңелле ул
Һинең менән атлау бер ҡатар.
Гәлсәр шәмдәл элеп әле күптәр
Биҙәгәндә фатир түшәмен,
Һин бит, ағай, халҡың күңеленә
Аҡ тирмәләр ҡороп йәшәнең.
Сал ҡылғанда аунап үҫкән малай —
Сәсән иткән һине Ер-әсә.
Ҡурсалаймы икән Бәндәбикә,
Ҡуллап тора микән Ерәнсә?!
Ни булһа ла, һин өлөшлө, ағай
(Был донъяла яна үҙ шәмең!),
Башҡортостан тигән изге йортта
Аҡ тирмәләр ҡороп йәшәнең!

*2016*

# Һин тораһың ғаләм уртаһында

*Ҡәләмдәшем Салауат Әбүзәргә*

Нисек Хоҙай һине яралтҡандыр
Башҡаларға һис бер тиңләмәй,
Үрҙәреңде йәнем тоя минең,
Үрҙәреңде аҡыл иңләмәй.
Һин йыһанда. Ғаләм уртаһында
Туғарылған һинең юртаҡтар,
Ул кимәлгә беҙгә етеү ҡайҙа,
Уй-хыялдар әлдә уртаҡтар!
Хыялый бер дәрүиш күренһәң дә,
Алдап буламы ни Алланы?!
Ерҙәгеләр нимә? Күктәр күптән
Бөйөк икәнеңде аңланы.
Ғаләмдәге бөтә заттар менән
Аңлашаһың һин бит йыр аша,
Бер яғыңдан фәрештәләр ҡурсый,
Бер яғыңда ендәр талаша.
Һине Хоҙай бик хикмәтле иткән,
Һине Хоҙай сөйгән күктәргә
Һәм төшөргән ергә... Ябайлығың
Фәһем булһын өсөн күптәргә!
Затлы исем биреп әүрәтмәгән,
Данға күмеп бәҫһеҙ итмәгән,
Шағир иткән һине! Шундай шағир —
Исемдәре телдән китмәгән!
Йөрәгеңә һинең йыһан һыя,
Был Ер шары ғына ни бары!
Һин тораһың ғаләм уртаһында —
Шундай түбән, шундай юғары...

*ғинуар, 2017*

## Әкиәт һөйлә әле!

*Әхмәт Сөләймәнов ағай иҫтәлегенә*

Һин киткәстен әкиәтһеҙ ҡалдыҡ,
Ысынбарлыҡ йәнде ҡайыҙлай,
Инде терәр ирҙәр китеп барғас,
Беҙ йәшәргә тейеш ҡайһылай?!
Төҫһөҙләнде донъям...
Әхмәт ағай!
Әкиәт һөйлә әле тағы бер!
Кире ҡайтмаҫыңды беләм дә бит,
Ышанаһы килмәй барыбер...
Иҫкә алам шатлыҡ кисергәндә,
Иҫкә алам күңел тулһа ла,
Әкиәт һөйлә әле, Әхмәт ағай,
Төштәремә инеп булһа ла!
Кинәйәһен үҙем таныр инем,
Табыр инем төштән яуапты.
Ҡәбереңә яткан ап-аҡ ҡарҙар
Зиһенемде ҡапыл таратты.
Һулға китһәм, алда ниҙәр көтөр,
Тура юлды ҡайҙан табайым?
Үҙе тере булһа, хаталарҙан
Их, ҡурсалар ине ағайым...
Уңға китһәм, юлым уңыр микән,
Һағалармы әллә ялғандар?
Хаҡ тормошҡа күстең...
Нисек йәшәр
Әкиәттә тороп ҡалғандар?!

*2016—2017*

## Улар сөйөр әле бөркөттәр!

*Арҙаҡлы шәхесебеҙ Рәшит Шәкүрҙең*
*80 йәшлек юбилейы айҡанлы*

Йәшәгәнме халыҡ гел баҫылып,
Йәшәгәнме халыҡ гел өркөп,
Әйтсе, Өршәк?! Ҡайҙа икән бөгөн
Сиреү-сиреү булған мең, меркет?!
Юҡ, ут төртөп бөгөн яндырмайҙар,
Яндыралар хәҙер ыу бөркөп.
Ҡайҙа ҡәүем, ғәййәрлеге менән
Тирә-йүнде торған өркөтөп?!
Тарих хәтерендә ҡалдымы ни
Айбарлыҡтар һеҙҙең, мең, меркет?!
Уйҙарымды бүлде бейектәрҙә
Ҡолас йәйеп осҡан бер бөркөт...
Шәһит киткән ата-бабаларҙың
Рухын һаҡлай бөркөт ҡарашы.
Сиреү-сиреү ирҙәр Себер китә,
Ҡайҙа икән унын мең башы?!
Раббым, һаҡла ошо ҡәүемдәрҙе
Исемдәре булыр мең, меркет!
Ата-бабам ҡаны тамған ергә
Тамырҙарын, зинһар, ныҡ беркет!
Ошо ерҙә, ошо изге ерҙә
Улар сөйөр әле бөркөттәр:
Нуғайҙарға ҡаршы торған меңдәр,
Сыңғыҙхандан ҡурҡмаҫ меркеттәр!

*17.04.2017*



*Оло мөхәббәттән тыуған Кеше,*
*Мөхәббәттән донъя яралған!*

## Ҡот

*(поэма)*

Йүгереп йөрөп мин өй йыйыштырам,
Гөлдәр ҡуям тәҙрә төптәренә,
Аҡ ашъяулыҡ йәйәм өҫтәлемә,
Матур күлдәк кейәм өҫтәремә.

Өйөм бола кеүек. Ҡотһоҙ өйөм,
Булмаһа ла һис буш торғандарым:
Иҙәндәрҙе ҡырып йыуып алам,
Алмаштырам тәҙрә ҡорғандарын.

Өлтөрәп тә йөрөп аш өлгөртәм.
Икмәк бешә, ана, мейесемдә.
Беләм үҙем: тырышлығым бушҡа,
Нур уйнамаҫ беҙҙең өй эсендә.

Сынъяһау ҙа донъям, тик барыбер
Толҡа тапмаҫ хәҙер минең күңел.
Өйөбөҙҙөң ҡото затлы йыһаз,
Аҫыл балаҫ, гәлсәр шәмдәл түгел.

Донъям етеш тә бит, ҡыҙыҡмағыҙ
Тырышып та йыйған байлығыма.

Күҙҙәремдә бөтмәҫ һағыш минең,
Башҡайымда — ҡара ҡайғы ғына.

Йүгереп йөрөп мин өй йыйыштырам,
Арынырға теләп ошо шомдан.
Өйөм түгел, йәнем ҡотһоҙ минең,
Етеш донъям быуа алҡымымдан.

Селпәрәмә килгән көҙгө төҫлө,
Китек яҙмыш миндә, китек күңел.
Йортобоҙҙо йәмләр нур киҫәге
Гәлсәр шәмдәл, затлы балаҫ түгел.

Өйөбөҙҙө йәмләр нур киҫәге —
Ул йәнемдә утлы төйөр кеүек.
Уфтанмайса түҙәм, мин уфтанһам,
Бар донъялар ҡара көйөр кеүек.

Ҡасан ғына әле ер йөҙөндә
Мин инем бит иң бәхетле ҡатын.
Йәрем күҙҙәренән мин наҙ тирҙем,
Ирененән һурҙым һөйөү татын.

Иң бәхетле ҡатын! Бөгөн иһә
Күмерләнеп бөткән усаҡ бары.
Йәнде телә намыҫ бысаҡтары.
Тамуҡ ише йәрем ҡосаҡтары.

Берҙән-берем! Үпкәм ҙур ҙа һиңә,
Ҡайғы-хәсрәтемде, зинһар, ишет!

Өй түренә затлы шәмдәл түгел,
Элер инем бары кескәй бишек.

Шул бишеккә аҡ биләүгә төрөп,
Һөйөү гөлөбөҙҙө һалыр инем,
Һәм мин ғазапланмаҫ инем былай,
Нурлы ҡатын булып ҡалыр инем.

Донъябыҙҙы йәмләр затлы йыһаз
Ул сәңгелдәк ине, беләһеңдер.
Аҫыл шәмдәл ниңә эләһеңдер,
Аңламайым, ниңә көләһеңдер?!

Көл, көл әйҙә! Был — мин!
Йәнһеҙ ҡатын!
Өшөйһөңдөр, йәрем, утым юҡ.
Сәңгелдәкһеҙ өйҙә ҡояш көлмәй,
Сәңгелдәкһеҙ өйҙөң ҡото юҡ...

* * *

Тәнем һыҙлай минең, йәнем һыҙлай,
Ни хәл генә итеп түҙермен.
Сабыйымдың ғүмерен өҙҙөм бөгөн,
Бер гонаһһыҙ сабый ғүмерен.

Тәнем һыҙлай минең. Быҙдай эшкә
Нисек барҙы икән ҡулыҡайым?
Ни тиермен хәҙер, илай-илай,
Туған таптырғанда улыҡайым...

Ул ғәйепләме ни беҙҙең мәңге
Донъя хәстәрҙәре бөтмәгәнгә,
Күҙ йәштәрем ҡайсаҡ кипмәгәнгә,
Нимәгәләр аҡса етмәгәнгә?!
Ниндәй хурлыҡ!

Ни ғәйебе уның? Ана, яңғыҙ
Бер мөйөшкә боҫҡан моңһоу ғына,
Муйыл күҙҙәренән ынйы йәштәр
Ҡойолоп китер төҫлө бына-бына:

— Бер үҙемә күңелһеҙ!
Атай менән икәү һеҙ
Миңә туған алығыҙ:
Ике малай, ике ҡыҙ!

— Аҡса етмәй шул, балам.
Теләйһеңме ат алам?
Көрәген дә табырбыҙ,
Ҙур машина алырбыҙ!

— Юҡ, кәрәкмәй атығыҙ,
Үҙегеҙ уйнатығыҙ!
Нимәгә миңә көрәк,
Миңә бит туған кәрәк!

Балаҡайым! Ниндәй һүҙҙәр табып,
Йыуатайым һине, эй, Хоҙайым.
Әкиәттәр һиңә һөйләйемме,
Әллә талғын ғына йыр һуҙайым?

Һин бәләкәй әле. Бәлки, тиҙҙән
Онотолор барлыҡ ҡайғыларың.
Ә үҙемде кем йыуатыр икән,
Кем генә һуң аңлар әсә зарын?

Мин дә өйҙә толҡа табалмайым,
Таралыр ҙа һымаҡ зиһендәрем,
Аһ, үртәмә мине, балаҡайым,
Аһ, йыуатма мине, һөйгән йәрем!

Йыуатмағыҙ мине! Мин ҡәһәрле.
Үтмәҫ минән мәңге был төйөр.
Тураҡлап та алған сабыйымдың
Йәне рәнйеп осоп йөрөйҙөр.

Ана, күктә, аҡ фәрештә булып,
Осоп йөрөй йәне, танийһыңмы?..
Скальпель тотҡан табип! Һин нисәгә
Бүлгеләнең минең сабыйымды?!

Төнгө күктән ялбарыулы ҡарай
Сабый күҙе төҫлө йондоҙҙар.
Гүйә, улар беҙгә өндәшәләр:
«Һеҙ, кешеләр, шундай ҡанһыҙҙар!»

Йондоҙҙар ҙа, хатта йондоҙҙар ҙа
Йондоҙ түгел кеүек миңә күптән,
Әйтерһең дә, баҙрап күк йөҙөнә
Сабыйымдың ҡаны сәсрәп киткән.

Әйтерһең дә, бар тарафым — тамуҡ,
Ҡотолғоһоҙ уттан сәсәйем.
Йән ҡыйыуҙар — оло гонаһ тиеп,
Өйрәткәйне миңә әсәйем.

* * *

Беҙ биш бала үҫтек. Өй эсебеҙ
Хәтерләтте кескәй тирмәне.
Беҙ биш бала үҫтек!
Тик әсәйем
Беребеҙҙе артыҡ тимәне.

Гөрләп торҙо беҙҙең кескәй ожмах,
Беребеҙгә беребеҙ иш ине.
Әсәйемдең ҡайғы-шатлығы ла
Берәү генә түгел, биш ине.

Ҡояш кеүек бөтә йылылығын
Өләште ул беҙгә тип-тигеҙ.
Барыһына бында урын етә,
Өйөбөҙгә беҙҙең килегеҙ!

Бала сағым йәшенеп ҡалған өйҙөң
Ҡояшы ла ине яғымлы,
Әллә шуға гел ҡояшлы итеп
Иҫкә алам тыуған яғымды.

Беҙҙең өйҙө йәмләп торған ҡояш
Һин инең бит, әсәй, ҡәҙерлем.

Ә мин иһә оятымдан бөгөн
Утҡа инергә лә әҙермен.

Ҡырҡ дүрттә тапҡан мине әсәй,
Көлгән унан күрше-күләндәр:
«Етем ҡала инде был сабыйың,
Үлеп-фәлән китһәң!» — тигәндәр.

Ҡарамаған кеше һүҙҙәренә,
Ер өҫтәрен япҡас аҡ юрған,
Ап-аҡ ҡыштың саф бер иртәһендә
Әсәкәйем мине тыуҙырған.

Көндөҙ миңә ҡояш көлөп баҡҡан,
Йылмайғандыр төнөн ай ҡыйғас.
Ә күршеләр көлгән: «Ахмаҡ ҡатын
Бала тапҡан, — тиеп, — ҡартайғас!»

Сабырлыҡтың үҙе — әсәй йәне,
Әйтерһең дә, сағыл имәне.
Беҙ биш бала үҫтек, тик әсәйем
Беребеҙҙе артыҡ тимәне.

Етем булманым мин. Әсәкәйем —
Әле булһа миңә ныҡ терәк.
Кешеләрҙең төртмә телдәренән
Унын наҙы булды көслөрәк.

Етем булманым мин. Әсәйемә
Хоҙайҙан гел ғүмер теләнем,

Үҫеп еткәс, һөйөп баға ине
Миңә барлыҡ күрше-күләнем.

Ә бәхетем ниндәй оло ине,
Өлкән ине минең быяса!
Мин гонаһлы хәҙер: өйөм ҡотһоҙ,
Күңелемдән хатта йыр ҡаса.

Йырым ҡаса. Нишләһен ул минең
Ҡото киткән һалҡын күңелдә.
Йыр — ирекле. Минең йәнем ише
Зар илаған тотҡон түгел дә.

Йәнем — тотҡон. Ҡасыр ине ул да,
Ташлап китер мәле етмәгән.
Әле уның күрер ҡайғылары,
Күрер шатлыҡтары бөтмәгән.

Ә мин китһәм, әсәкәйем илар,
Уға бит мин һаман балалыр.
Бишебеҙҙең биш ҡайғыһын йөкмәп,
Йәшәү көсөн ҡайҙан алалыр?!

Барыбыҙ ҙа бергә йыйылғанда
Ҡайтмай ҡалһа әгәр беребеҙ,
Шыҡһыҙ һымаҡ уға өй эстәре,
Йәмһеҙ һымаҡ уға түребеҙ.

Минең дә бит өйөм бола һымаҡ,
Аш һымаҡ та түгел ашҡайым.

Биш ҡайғынан түгел, бер ҡайғынан
Эйелде лә түбән башҡайым.

Әй ҡайтаһы килә бала саҡҡа!
Мин бәләкәй унда, мин — бала,
Ҡайғылар ҙа, шатлыҡтар ҙа унда
Тик ҡояшта ереп юғала.

Барыбыҙға ҡояш тигеҙ көлдө,
Һәм йылытты беҙҙең тирмәне.
Беҙ биш бала үҫтек, тик әсәйем
Беребеҙҙе артыҡ тимәне.

* * *

Был өнөммө, был төшөммө минең?
Тирә-яғым тотош ҡара ҡан.
Арынырға теләп артыҡ йөктән
Ерме әллә аборт яһаған?!

Аңлауҙары ҡыйын — ниндәй миҙгел:
Йәй ҙә түгел, түгел көҙ мәле.
Ҡарт әсәнең күҙ йәштәре кеүек,
Кибеп бөткән йылға үҙәне.

Элек ғорур торған сал ҡаялар
Ҡайғынанмы төшкән ишелеп?
Буш тауҙарҙы ярып мин ҡысҡырҙым,
Ҡайҙа булған, тиеп, Кешелек?

Шәрә тауҙар бер ни өндәшмәне,
Бары бушлыҡ бында хакимдар.
Бер япраҡһыҙ ағас ботаҡтары,
Әйтерһең дә, түлһеҙ ҡатындар.

Ә нисек һуң йәнем тере ҡалған?
Терелеге — үҙе мөғжизә.
Гонаһтарын йөкмәп иңдәренә
Япа-яңғыҙ ғына ил гиҙә.

Ә ниңә һуң йәнем тере ҡалған?
Уға бында шыҡһыҙ, һыуыҡ та.
Ожмах ишектәре ябыҡ уға,
Ҡапҡаларын асмай тамуҡ та.

Ярлыҡауҙар һорап күккә бағам,
Ә ул бейек шундай, тып-тыныс,
Тик бушлыҡтан торған был донъяла
Яңғыҙ ҡалыуҙарым ҡурҡыныс.

Нисәнсе ҡат инде ҡабатлайым:
«Ҡайҙа булған, ҡайҙа Кешелек?»
Ер тетрәне шул саҡ һәм дә ҡапыл
Күк көмбәҙе китте тишелеп.

Күктән, әллә ерҙән, мин белмәйем,
Яңғыраны тауыш набаттай:
«Ни эшләнең, Кеше? Туҡта, зинһар!
Тәбиғәт бит һине ҡабатлай!

Килерендә белдем һәм шуға ла
Әҙер минең күптән яуабым:
Йәшәү өсөн һәр бер йән эйәһе
Ҡалдыра бит ерҙә дауамын.

Әйтмәһәң дә беләм, ниндәй уйҙар
Йөрәгеңде бөгөн яндыра.
Йәшәү өсөн хатта үҫемлектәр
Орлоҡтарын һибеп ҡалдыра.

Эй, бисара кеше! Тыңлар булһаң,
Әйтер инем шуны иң элек.
Үҙ әсәһе быуғас тыуыр йәнде
Нисек дауам итһен тереклек?!

Тереклектең көсө — Әсәлектә,
Әсә наҙы менән ул имен.
Һин ваз кистең унан, бахыр бәндә!»
Бар көсөмдө йыйып: «Юҡ!» — тинем.

«Бала бағыу — иң-иң изге бурыс.
Ҡатындарҙың баҫҡан ул иңен.
Еңел тормош һеҙгә өҫтөнөрәк!»
Зиһенемде туплап: «Юҡ!» — тинем.

«Нимә етмәй ине һиңә, Кешем?
Өҫтөң бөтөн, үҙең туҡ инең,
Аҡтыҡ ҡына балаң артыҡмы һуң?
Асырғанып шул саҡ: «Юҡ!» — тинем.

«Юҡ!
        Юҡ!
                Юҡ!» — тинем мин.
Ҡотом ҡайтһын,
Йәнгенәмә ҡайтһын иманым.
Ҡулдарымды ҡиблаларға һуҙып,
Ҡаҡ бушлыҡҡа ятып иланым.

* * *

Күпме ятҡанмындыр. Күҙем асһам,
Аҡ фәрештә миңә инәлә:
«Әсәй, әсәкәйем, иламасы,
Һин илағас ҡыйын миңә лә!

Мин йәлләйем һине. Теге ваҡыт
Тормаһаң да мине һин яҡлап.
Ә шулай ҙа нисек түҙҙең, әсәй,
Ырғытҡанда мине тураҡлап?!

Мин бит һине шундай яратҡайным,
Шундай йылы ине ҡуйынын.
Ниҙер буласағын алдан һиҙеп,
Яҡлау эҙләп һиңә һыйындым.

Күпһендең шул мине, йәлләмәнең.
Иремәне йәнең, боҙ инең,
Ә мин һиңә бары шатлыҡ өҫтәр
Зәңгәр күҙле матур ҡыҙ инем.

Юҡ, йәлләүҙән түгел, ауыртыуҙан
Иренеңде ҡыҫып тешләнең.
Мин тыуып та хатта өлгөрмәнем,
Нишләнең һин, әсәй, нишләнең?

Һуңғы сиккә тиклем мин ялбарҙым
Иман һорап һиңә, аң һорап.
Сабый ғына йәнем күккә ашты,
Ә һин ятып ҡалдың ҡанһырап.

Йәнем шундуҡ күккә ашты минең,
Әйтерһең дә, атҡан уҡ инде.
Күпһенһәң дә мине, әсәкәйем,
Үлтерергә хаҡың юҡ ине!

Һуңлап ҡына, эйе, һуңлап ҡына
Һин аңыңа килдең: юҡ ҡыҙың...
Өҙгөләнеп шул саҡ һинең өсөн:
«Әсәкәйем!» — тиеп ҡысҡырҙым.

Беләм, хәҙер үкенәһең, әсәй,
Тик терһәкте нисек тешләйһең?
Мин тыуып та хатта өлгөрмәнем,
Нисек килә ине йәшәйһем!

Күреүҙәре ауыр миңә, әсәй,
Күҙ йәштәре ерҙе өткәнен.
Һин үҙең дә күрҙең, иман ҡаçһа,
Ерҙе ниндәй афәт көткәнен.

Ташлап китмә мине икенсе ҡат,
Тағы аҙға ғына ҡал бында.
Әсәйемдең гонаһтарын юй, тип
Мин һорармын Тәңре алдында.

Гонаһлымы, гонаһһыҙмы килеш,
Мин бит һине бары яратам!
Ризалығын бирһә олуғ Тәңре,
Ҡайтыр инем һиңә ҡабаттан...»

* * *

«Тәңрем! — тинем. —
Ҡайтар сабыйымды!
Гонаһтарҙан, зинһар, арала.
Күтәргеһеҙ ҡайғыларҙан юҡһа
Зиһендәрем минең тарала».
«Күрәһеңме, тирә-яғың бушлыҡ! —
Яңғыраны тауыш. — Ашыҡма!»
«Мин — ҡатын-ҡыҙ, Тәңрем, һөйөүемдән
Сәскә атыр хатта ташлыҡ та,
Тик баламды ҡайтар!»
«Әйткәндәрең
Ихлас һымаҡ былай, эй, ҡатын!
Ҡотоң ҡайтыр, иманың да ҡайтыр,
Үтәләсәк булһа бер шартым».
«Мин үтәрмен, — тинем. — Ерем генә
Йәшеллеккә бары күмелһен!»
«Мин ышанам, — тине теге тауыш, —
Һин аҡылһыҙ ҡатын түгелһең!

Шартым ошо, — тине, — Әсәлектән
Өҫтөнөрәк ҡуйма бер ниҙе.
Һәм онотма: ҡулыңдағы сабый —
Ҡурсалауға мохтаж Ер үҙе!»

* * *

Йәм-йәшел Ер минең ҡосағымда,
Күкрәгемдә — сабый — ҡояшым.
Урап үтмәгеҙсе беҙҙең өйҙө,
Барығыҙға етер һый-ашым.
Ҡурҡмайынса, бер хәүефһеҙ генә
Асығыҙ һеҙ өйөм ишеген.
Күрегеҙсе: иң-иң түргә элдем
Сабыйымдың нурлы бишеген.
Йүгереп йөрөп мин өй йыйыштырам:
Таҙалайым күңел бүлмәһен.
Сәңгелдәктә ятҡан сабыйғынам
Бола сағын уның күрмәһен.
Күңелемдең моңһоу сағы булһа,
Килтерәмен тиҙерәк уны ипкә.
«Мин — Әсә! — тип —
Йәнем нур сәсә!» — тип,
Ҡояш һымаҡ бағам
Кешелеккә!
Күңелемдең иң бәхетле мәлен
Юрайым да бары изгелеккә:
«Мин — Әсә! — тип —
Йәнем нур сәсә!» — тип,
Намыҫ менән бағам
Кешелеккә!

*1999—2000*

## Әҙәм үә Һауа

Балсыҡтарҙан Әҙәм атабыҙҙы
Әүәләгәс Хоҙай, йән өргән.
Ожмахта ла йәне толҡа тапмай,
Ул үҙ ишен эҙләп йүгергән.

Ҡабырғанан Һауа әүәләнгән,
Ҡайҙа уға еткән һылыулыҡ?!
Ожмах баҡсаһынан икәүләшеп
Китһәләр ҙә улар ҡыуылып,

Әҙәм атабыҙға көс-дәрт биргән
Тоғро мөхәббәте Һауаның.
Мин ҡалғанын һеҙгә һөйләмәйем,
Үҙегеҙ беләһегеҙ дауамын...

Маймылдарҙан Кеше яралмаған!
Ниндәй аҡылһыҙлыҡ! Был — ялған!
Оло мөхәббәттән тыуған Кеше,
Мөхәббәттән донъя яралған!

Һәр беребеҙҙә Әҙәм ҡаны аға,
Һөйөү уты дөрләй Һауаның —
Һәр бер ирҙә!
Һәр бер ҡатын-ҡыҙҙа!
Үҙегеҙ беләһегеҙ ҡалғанын...

*4.04.2017*

## Мөғжизә

Бер-беребеҙгә асылмаҫлыҡ сер ҙә,
Бер-беребеҙгә — йомаҡ,
Ике йәндең бергә ҡушылыуы
Бер мөғжизә һымаҡ!

Икебеҙҙең татлы хыялыбыҙ,
Уй-тойғоһо, хисе,
Бер-беребеҙгә аңһыҙ ылыҡтырған,
Һанһыҙ зарыҡтырған
Ҙур тартылыу көсө...

Икебеҙҙең усаҡ:
Беребеҙ — утын,
Беребеҙ — ут һәм күмер.
Ике йәнде бергә иҙ(е)рәтеп,
Ярала
Яңы ғүмер...

Тик икебеҙ генә белгән сер ул,
Икебеҙҙең йомаҡ.
Икебеҙҙе берәү иткән
Бала —
Бер мөғжизә һымаҡ!

## Беҙҙең усаҡ

Беҙҙең усаҡ өтөп бара ине,
Хәҙер һүнеп бөтөп бара инде,
Һауаларҙа уйнар тик көлө...
Һөйөүебеҙ нәҡ ут шикелле
Һүнеп бара. Донъя, эй, шыҡһыҙ!
Ышыҡ эҙләйексе! Ышыҡһыҙ,
Дымлы утын күреп ҡосаҡта,
Ямғыр бейей беҙҙең усаҡта.

*1993*

## Үп һин мине

Үп һин мине, үп һин, һурып,
Түгел улай урыҡ-һурыҡ.
Тының менән ал һин ҡурып,
Бар шиктәрем ҡалһын тороп.

Албырғатһын һинең ҡылыҡ.
Ҡалайыҡ беҙ наҙға тулып.
Мин — Ләйлә, һин Мәжнүн булып,
Үп һин мине, онотолоп.

* * *

Һин инең бит бәғеремде
Өшөтөргә әҙер,

Ҡыуан әйҙә, шатлан әйҙә,
Мин һыуытҡыс хәҙер!

Һинең боҙло ҡарашыңдан
Һүнгәс һуңғы ялҡын,
Хәҙер миңә генә түгел,
Үҙеңә лә һалҡын.

## Һин дә ямғыр булып...

Ҡыҙҙырҙы ла ҡояш иртә менән,
Һөйөү кеүек, белмәй аяуҙы,
Саҡ сабылған бесән өҫтәренә
Әллә ямғыр, әллә йыр яуҙы!

Һин дә ямғыр булып килгәйнең бит,
Ниңә генә хәҙер йыраҡһың?!
Һин киткәстен, йәнем үрһәләнеп,
Ҡара көйгән бакуй һымаҡмын...

*1993*

* * *

Тәнде түгел, йәнде өшөткәнгә
Һалҡынлығы һинең ҡосаҡтың,
Йөрәк әрнеүҙәрен баҫайым тип,
Ете төндә тороп ут яҡтым.

Һәм ялҡынға йән йылыһын ҡушып,
Йылытырға булдым өй эсен, —
Аралағы һалҡынлыҡты тойоп,
Өшөп уянмаһын бәпесем.

* * *

Йырҙарымдан йыртыҡ эҙләмәгеҙ,
Мин арыным инде ғәйбәттән.
Юлға сыҡһам, юлым уңып тора,
Тормошом да, шөкөр, һәйбәттән.

Һөйөлөп һәм һөйөп йәшәйем мин,
Аҫыл ирҙең наҙлы йәремен.
Зар илайым бары һағынғанда
Тыуған яҡтың күкһел әремен.

Йырҙарымдан йыртыҡ эҙләгәндәр,
Мин бәхетле һеҙҙән йөҙләтә!
Тыуған яҡтың әремдәре генә
Төштәремә инеп йөҙәтә...

*1998*

## Һиҙәм...

Уян, уян, уян!
Балҡып торһон ояң:
Бөгөн таңдан тороп,
Тәмле ҡоймаҡ ҡоям,
Ҡайтырыңды тоям!..

Ялтлап торһон иҙән,
Ашҡа ҡорот иҙәм,
Тик һорама, зинһар,
Бойоҡһоң тип, ниҙән?
Китереңде һиҙәм...

*26.08.11*

## Төймә

Юғалтмаһын төймәһен, тип,
Яттар ҡулы теймәһен, тип,
Күлдәгеңә төймә тағам,
Өнһөҙ генә һиңә бағам.

Юл әйбереҢ әҙер күптән
Иламайым хәҙерүктән.
Юғалтмаһын төймәһен, тип,
Сит-яттарҙы һөймәһен, тип,
Төймә тағам...

## Ете йән

Ҡатын-ҡыҙҙың йәне етәү.

*Халыҡ әйтеме*

Йәнем минең бөтөн түгел,
Киҫкеләнгән етегә,
Ете йәнем ете яҡта
Берегә алмай интегә.

Ете төҫлө йәйғор булып
Шатлығым балҡый өҫтә.
Башымды түбән эйҙергән
Ҡайғым да ете төҫтә.

Йәндәй күргән йәнем дә бит
Әйләнде ете-ятҡа.
Бер бөтөн генә бәхетем
Бүленде ете яҡҡа.

Ете яҡта ете өлөш —
Ялғай алмай интегәм,
Иңрәй-иңрәй, күккә ашҡан
Минең йән ул — Етегән!

## Һин һәм мин

Бөркөткә бит моңһоу кәкүк
Пар түгел.
Минең зарым һинең өсөн
Зар түгел.

Һин — ҡыйғыр ҡош, зәңгәр күктә
Саңҡыған.
Мин — бисара, һағыштарҙан
Шаңҡыған.

Кемгә бәхет, ә кемгәлер
Дан етмәй,
Нисек бергә йәшәйбеҙҙер —
Аң етмәй...

## Битәрләмә

Битәрләмә...
Йәнем әрней
Һүҙҙәремә ышанмаһаң,
Шикләнеп һәм икеләнеп,
Һөйөүемде тышаулаһаң.

Битәрләмә —
Яндарыңа, эй, һағынып ҡайтҡанымда,
Күҙҙәреңә һөйөү тулы
Күҙҙәр менән баҡҡанымда,
Ҡосағыңа ал һин!

Әммә
Хистәремде бөтәрләмә.
Йәме?!.

## Көлгә ҡалғас...

Ҡара көйгән ҡатынмын мин:
Рәнйетелгән, ташланғанмын.
Көлгә ҡалғас, юҡ әлегә
Яңы тормош башлағаным.

...Ә һин башла!
Тик һөйгәнең
Һине бер ҙә ташламаһын,
Ә ташлаһа, һип яраңа
Минең көлдөң ашламаһын!

* * *

Ҡотороп та яуған был ямғырҙан
Тәҡәттәрем инде ҡалманы.
Хәҙер минең күлдәккенәм түгел,
Йәнкәйҙәрем һығып алмалы.

Сабырлыҡтар һорап күккә бағам,
Ләкин ямғыр һис тә тартынмай,
Түгелеп тә илай, рәнйеүенән
Алйыр сиккә еткән ҡатындай.

Түҙсе, йәнем! Барыһы ла була:
Бергә-бергә шулай көн күргәс.
Туҡтар әле ямғыр, аҙған Ерҙең
Гонаһтарын йыуып бөтөргәс...

* * *

*Р-гә*

Ауыр һүҙҙе, һинең ауыр һүҙҙе
Өнһөҙ генә киләм күтәреп.
Дуҫтар илар, дошман ҡыуаныр, тим,
Яңылыштан ҡуйһам түңкәреп.

Өҫтөнлөктө кемгә бирер Тәңре —
Һиндә — ғәйрәт, миндә — сабырлыҡ:
Йән өшөткөс һүҙҙәр ишетеп тә,
Йән иретер һүҙҙәр табырлыҡ.

* * *

Күптән һинең менән һөйләшкән юҡ,
Ултыр әле, ултыр ҡаршыма.
Һуңғы араларҙа йәнем өшөй,
Төрлө уйҙар килә башыма.

Бергә-бергә күпме юлдар үттек,
Улдар бүләк иттем, ҡыҙ таптым.
Ғәфү итә-итә арып бөткән
Яраларҙы бөгөн ҡуҙғаттың.

Бер-беребеҙгә терәк булдыҡ микән
Икәүләшеп донъя көткәндә?!
Бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә мәлдәр
Барыһы ла ҡалыр үткәндә...

Хәл итергә һиңә. Мин бит бисә!
Башың эймә! Әйт һин ир һүҙен!
Өндәшмәйһең... Эстән уйлайһыңдыр:
«Һин һәр ваҡыт түҙҙең! Түҙерһең!»

Мин һәр ваҡыт түҙҙем. Инде хәҙер
Бисә һүҙен тыңла, булмаһа:
Ғәфү ит һин мине, наҙ күрмәһәң,
Ғәфү ит һин, ашым һуңлаһа...

Ғәфү ит һин, сабырлығым менән
Бәхетеңә әгәр ҡуйһам бик.
Кисермәһәм, бәлки, китер инең,
Кисергәнем өсөн ғәфү ит!..

* * *

Албырғатмай, һәүетемсә генә
Үтеп бара бына июль дә.
Һинһеҙ йәйҙең һис бер йәмдәре юҡ;
Йыр ҙа тыумай хатта күңелдә.

Йәйҙәр бойоҡ быйыл. Яманһыулап
Башҡайҙарын эйгән ҡылғандар.
Нисек кенә сабыр итә икән
Ғүмерлеккә йәрһеҙ ҡалғандар?!

Көйәнтәләр һалып һыуҙан ҡайтам,
Инйәр һыуы — ағын, Әй түгел!
Ҡайтырыңды көтөп күҙҙәр талды,
Һин булмағас, йәй ҙә йәй түгел...

*11.07.08*

## Йәлләмәгеҙ!

Бәхетһеҙ, тип, йәлләмәгеҙ,
Булһа ла моңһоу сағым.
Күңелем китек булһа ла,
Түңәрәк минең табын.
Йәлләмәгеҙ! Һеҙгә ҡарап,
Көлөп торам ай һымаҡ.
Миңә ҡалһа, ғүмер юлым
Шатлыҡҡа ла бай һымаҡ:
Сит ҡояшҡа ҡыҙыҡмайым,
Төнөм түгел ят айлы.

Бәхетһеҙ, тип, кәмһетмәгеҙ —
Балаларым атайлы!
Балаларым атайлы!

*2000*

## Мин – бәхетле?!

«Бәхетлеме?» — тиҙәр миңә,
Яуап бирәм:
«Уңдым инде!»
Ә бит һалҡын ҡарашыңдан
Туңдым инде!
Туңдым инде...
Йылы һүҙең ишетмәгәс,
Тамсы булып
Тулдым инде,
Һалҡын ҡарҙы тишеп сыҡҡан
Умырзая
Булдым инде...

## Ярлыҡаным

Ярлыҡаным...
Көсөм етте ярлыҡарға!
Исемеңде йәнә яҙҙым
Ап-аҡ ҡарға.
Исемеңә
Яуыр күктән мең биҙәктәр,

Һырып алыр һине тағы
Елбәҙәктәр.
Яуһын ҡарҙар!
Күңелдең нәҡ тиле мәле:
Кисерҙем мин, тик йөрәгем
Иремәне...

* * *

Яҙ һулышын тойоп мәллә
Йөрәгем тибә леп-леп,
Ҡыштың ап-аҡ еләне лә
Бөттө инде тишелеп.

«Көнөм бөттө!» — тиеп әрнеп,
Өндәшәлер ҡарға ҡар.
Яҙ килгәнгә ҡыуанышып,
Оса ҡара ҡарғалар.

Оҙаҡ түҙмәҫ, сигенер ҡыш —
Яҙ бит шундай мөләйем!
Тик мин һинең эҙең ҡалған
Аҡ ҡарҙарҙы йәлләйем.

## Көҙгөләге сағылыш

Яңылыш ул, яңылыш
Көҙгөләге сағылыш.
Бер ҡатын унан ҡарай:
Моңһоу йөҙ, бойоҡ сырай.

Йонсоған, төҫө ҡасҡан,
Иңдәрен донъя баҫҡан,
Етмәһә, бына тиле,
Танырға итә мине!
Ул да миңә бик таныш —
Көҙгөләге сағылыш.
...Тик хыялға тиң түгел!
Мин түгел ул! Мин түгел!

## Мең һорау

Төңөлөрҙәй сағым була —
Сабыр итәм.
Сабырлыҡтан әллә ниҙәр
Табыр итәм.
Янам, бешәм, ҡабат өрөп
Ҡабыр итәм.
Боҙ өҫтөндә ҡайнар усаҡ
Яғыр итәм.
Күңелдәге боҙҙар ирep
Ағыр микән?
Йөрәк һәр саҡ шулай әрнеп
Ҡағыр микән?
Китеп барһам, күҙемде ул
Ябыр микән?
Минең кеүек тоғро йәнде
Табыр микән?!
Сабыр итәм...

## Беҙ икебеҙ

Беҙ киләбеҙ бер һуҡмаҡтан
Бер-беребеҙгә терәү булып,
Беҙ йәшәйбеҙ был донъяла
Ике кеше берәү булып.
Беҙ икебеҙ бер бөтөн дә,
Ә, асылда, ике ярсыҡ.
Йылдар үтеп, берҙән-бер көн
Булһаҡ әгәр ҡарт һәм ҡарсыҡ,
Балаларға ҡанат үҫеп,
Кеше иткәс итәктәген,
Мине ҡартлыҡ көнөндә лә
Килер микән етәкләгең?

* * *

Мине күралмаған күҙҙәр
Миңә һөҙөп-һөҙөп ҡарай,
Үҙәктәрҙе өҙөп ҡарай,
Мине күралмаған күҙҙәр...
Мине теләмәгән ҡулдар
Иңдәремә ҡағылалар,
Беләм, улар минең янда
Сит берәүҙе һағыналар,
Мине теләмәгән ҡулдар...
Миңә арналмаған төндәр,
Һыуыҡ түшәк, еүеш мендәр.
Ҡосағында мин булһам да,
Уйҙарында — әллә кемдәр
Миңә арналмаған төндәр...

## Ә өнөмдә – тап киреһе...

Төштәремдә – һин эргәмдә,
Ул күҙҙәр, буй-һын!
Ирендәрең наҙлы итеп
Шыбырлай: «Буйһон!»

Хыялымда – һин эргәмдә,
Беҙ икәү. Аулаҡ.
Боҙҙай йәнемде иретеп,
Алаһың яулап!

Ә өнөмдә – тап киреһе:
Хыянат, алдаҡ.
Мин түшәктә япа-яңғыҙ,
Ҡулымда – балдаҡ...

* * *

Арабыҙҙа булған хис-тойғоға
Һөйөү тигән исем ҡуштыҡ та
Беҙ икебеҙ, юҡ, бер бөтөн түгел,
Айырылдыҡ ике йышлыҡҡа.

Беҙ икебеҙ, гүйә, ике тулҡын,
Һәр ҡайһыбыҙ ниҙән таба йәм?!
Һинең йышлыҡ йорт-ҡураға бәйле,
Минең йышлыҡ йырға көйләнгән.

Көйрәгәндә, йәки көйләгәндә
Ижад ғазабында был йышлыҡ,
Һин ирҙәрсә сабыр ғына йәшәп,
Утын әҙерләнең бер ҡышлыҡ.

Уҫал елдәр шуға ҡурҡытманы,
Көн иткәстен һинең ышыҡта.
Һинең дә бит йәнең үртәлгәндә
Күңелеңдә тыуған бушлыҡҡа,
Ҡушыла инең минең йырҙарыма,
Күсенә инең минең йышлыҡҡа.

Күңелемде һиңә көйләгәйнем
(Йөрәгемдә күпме ялҡын бар!),
Әммә әллә ҡайҙан юлын табып,
Килеп тулды башҡа тулҡындар.

Беҙҙең эфир, эй, буталды инде:
Әллә юрый, әллә яңылыш!
Ишетелмәй унда минең йырым,
Ишетелмәй һинең тын алыш...

Ни арала, әйтсе, ни арала
Һин күскәнһең бүтән йышлыҡҡа?!
Йыр илендә йәнем иҙрәйме һуң?!
Утын әҙерләйем ҡышлыҡҡа...

*2009*

## Һөйөү тәңгәленә нөктә ҡуйҙың*

Һөйөү тәңгәленә нөктә ҡуйҙың,
Ә мин ҡуйҙым һорау, өндәү, өтөр...
Әле бирелмәгән күп һорауға
Ғүмер буйы йөрәк яуап көтөр.

Эй, бисара йөрәк, күнә алмай,
Яндарыңа гелән өндәр кеүек!
Бөгөлөп төшөр шунан өтөрҙәрем
Һинһеҙ генә үткән көндәр кеүек.

Күп нөктәләр теҙеп иң һуңынан,
Күҙәтермен һине ситтән тороп.
Нөктәнән һуң һыҙған һыҙығың да
Арабыҙҙы тормаҫ тоташтырып.

* * *

Яҙ:
«Аҙ!» — тиҙер,
Аҙҙыр, бәлки,
Китһәм, йәлке...

Йәй:
«Әй!» — тиҙер,
Китһәм, бейер —
Бигерәк сәйер...

---

* Тимур Йосопов көйө.

Күҙ:
«Түҙ!» — тиҙер,
Түҙәм дә һуң —
Йөрәге туң...

Ҡыш:
«Хуш!» — тиҙер,
Тышта һыуыҡ —
Торма ҡыуып!

Мин китмәйем...

## Беҙ хушлаштыҡ

Яҙмышыңа үҙең хужа,
Үҙең — башлыҡ.
Уйһыҙ ҡылған ҡарар түгел —
Беҙ хушлаштыҡ...
Үҫеп килгән сибәрҙәр күп:
Ашыҡ, ашыҡ!
Миңә бәйле түгелһең бит —
Беҙ хушлаштыҡ.
Һинең тулҡындарҙы тотмай
Минең йышлыҡ:
Аңлай алмай, алдай алмай...
Беҙ хушлаштыҡ.
Һөйөү тулы күңелемдә
Хәҙер бушлыҡ,
Инде һиңә һис дәғүәм юҡ —
Беҙ хушлаштыҡ!

* * *

Һаман да минең хәтерҙә
Аҡ ҡарҙа, көрттә
Һин яҙып ҡалдырған яҙыу:
«Хәйерле иртә!»

Нисә яҙҙар инде талдар
Бөрөһөн тиртә.
Улар ҙа һөйөп сәләмләй:
«Хәйерле иртә!»

Йәйге елдәр ипләп кенә
Тәҙрәмде сиртһә,
Тап һинең кеүек шыбырлай:
«Хәйерле иртә!»

Тик көҙҙәрем генә моңһоу
Ҡарашын һирпә.
Уларға үҙем өндәшәм:
«Хәйерле иртә!»

Ишетергә,
Иш итергә
Һин генә ситтә...

* * *

Ҡош юлынан китеп барам әле,
Һаумы, Тимерҡаҙыҡ, Етегән!

Һеҙҙең хәлдәр нисек? Минең иһә —
Ҡап уртаға йәнем кителгән.

Яңғыҙлыҡтың хөкөмдәре ҡаты —
Ярты йәнем ситкә тибелгән.
Йондоҙ-тиҫбе булып үкенестәр
Күк йөҙөнә, гүйә, һибелгән.

Ҡош юлынан китеп барам әле:
Алда өмөт көтөп торғандай.
Аймылышҡан яҙмыштарҙы барлап,
Тиҫбе тарта күктә тулған Ай.

* * *

Ҡайһы миҙгел һине аҙаштырҙы,
Ҡайһы миҙгел һаҡлай эҙҙәрең?
Уҫал ҡыштың ап-аҡ биләменән
Эҙләп ялҡҡас һине күҙҙәрем,
Яҙҙарҙалыр, тинем, ләкин яҙҙар
Наҙлы түгел хәҙер, эреләр.
Әллә белеп, әллә минән көлөп,
Тел шартлатып ҡалды бөрөләр.
Йүгерә-атлай йәйҙәремә киттем,
Осратырмын, тинем, түҙмәнем,
Эҙләй-эҙләй һинең эҙҙәреңде,
Ғүмер үткәнен дә һиҙмәнем.
Көҙөмдә лә юҡһың. Зар-интизар
Күпме миҙгел, күпме ер ашып,
Мин тапманым һине,
Берҙән-берем,
Һин ҡайҙарҙа ҡалдың аҙашып?!

## Мираж

Эй, яуапһыҙ һөйөү! Ниңә генә
Һуғылдың һин миңә юл ыңғай?!
Кәртә эсендәге бәйле аттай
Йөрәккәйем ярһып сығынлай.

Битарафлыҡ менән язалама,
Йөрәгеңме һинең әллә боҙ?
Мин һөйөүҙең ни икәнен белдем:
Ғазап икән түҙеп торғоһоҙ!

Был ғазаптан арынырмын, тимә,
Һәм йәшәрмен, тимә, бирмәй һыр:
Һөйөү — сүллек. Унда мираж эҙләй
Тыныслығын юйған мосафир...

*2002*

## Ҡайҙаһығыҙ?!

Һеҙҙең Яҙмыш дәфтәрендә,
Әйтегеҙсе, мин кем һуң:
Онотолоп ҡалған әйбер,
Йә өҙөлөп ҡалған моң?
Осраҡлы бер юлаусымы
Һеҙгә килеп юлыҡҡан,
Яҡты шәмме ҡыйын саҡта
Йәнегеҙҙе йылытҡан
Һәм дә иреп юҡҡа сыҡҡан
(Әрнеүем дә шуғалыр!)...

Бәлки, Һеҙҙең тарафтан мин
Онотолған доғалыр?
Доға?! Бәлки, дағалыр мин,
Дағалыр мин тутыҡҡан!
Тутыҡ дағa... Кемдер уны
Юл өҫтөндә оноттҡан?!
Ни булһа ла онотолған,
Ни булһа ла ҡәҙерһеҙ.
Йәндәй яҡын күргән Кешем,
Ҡайҙаһығыҙ хәҙер Һеҙ?!

*2010*

## Көтмәгәндә

Ҡайҙан ғына килеп сыҡтығыҙ һеҙ?!
Ниәтегеҙ миңә билгеһеҙ.
Улай бик тиҙ генә арбай алғас,
Фәрештәме, әллә енме һеҙ?
Ҡарайһығыҙ...
Ниңә ҡарайһығыҙ
Күҙегеҙҙе алмай күҙемдән.
Осоп барған йәнем, гүйә, һеҙҙең
Керпек остарына эленгән.

Бар йәмдәрҙән йәнем төңөлгәндә
Ҡабыҙҙығыҙ йәнә бер усаҡ
(Күңелемдә күпме ҡуҙҙар янды,
Һүнгәндәре уның бихисап).

Күмерләнеп бөткән йөрәгемде
Аһ, көйҙөрөр инде утығыҙ.
Көтмәгәндә...
Һис бер көтмәгәндә
Ҡайҙан ғына килеп сыҡтығыҙ?!

## Һеҙҙе күрһәм...*

Әлдә һеҙ бар!
Әлдә һеҙ бар!
Һәр һүҙегеҙ дауа һымаҡ.
Һеҙҙе күрһәм, өҫтәремә
Аҡ бәхеттәр яуа һымаҡ!
Һеҙ юҡ саҡта йөрәгемдә
Асыла ла һулҡый яра.
Уй етмәҫлек хыял кеүек
Буй етмәҫлек беҙҙең ара.
Хыял күккә ашыр ине,
Хистәремә табам сиктәр.
Тик булһа ла араларҙа
Мең-мең кәртә, мең-мең биктәр,
Әллә ниңә һеҙҙең янға
Әйләнә лә ҡайта уйым.
Һеҙҙе күрһәм, шундай рәхәт!
Һеҙҙе күрһәм, шундай ҡыйын...

---

* Урал Иҙелбаев көйө.

## Ғашиҡ булдым!

Йәй аҙағы. Әрһеҙ һалҡын елдәр
Шаярыша бала-сағалай,
Һуңғы хыял, һуңғы өмөтөмдө
Өшөтөргә әллә самалай?

Елдәр һыуыҡ. Мин дә хафаланам:
Етеп булыр микән ҡышҡа, тип.
(Зинһар өсөн, алдан киҫәтмәгеҙ,
Ымһыныуың бары бушҡа, тип!)

Хоҙай биргән әжер-сауаптарға
Ирешербеҙ микән түҙһәк тә;
Йән иретер яҙҙар ҡайҙа икән,
Өшөүҙәрем үтте үҙәккә?!

Һин эргәмдә булһаң, беләм инде,
Уҫал ҡыш та хатта еңелер
(Яҙ көҫәүең көҙгә инер саҡта
Сәйерлектең, бәлки, сигелер?!)...

Йәй аҙағы. Яҙҙар артта ҡалған.
Алда — көҙҙәр, ҡыштар һағалай!
Туңдырмағыҙ һуңғы хыялымды,
Ғашиҡ булдым бала-сағалай...

* * *

Әйтте микән Хоҙай:
Күр ҙә берҙе, ғүмер
                    һуңынаса
Һин уфтан.
Рухың азатлығы — Салауаттан,
Күңел матурлығы — Йософтан!

Минең өсөн шундай юғары һин,
Ә мин ерҙә инде,
                    түбәндә.
Бер күрергә зар-интизар булып,
Тәҡәтенән яҙған бер бәндә.

Әминә лә, Зөләйха ла түгел...

## Һеҙҙең хаҡта хыял йөрөттөм

Бик баҙнатһыҙ, ҡыймай ғына хатта
Һеҙҙең хаҡта хыял йөрөттөм,
Күрекһеҙ ҙә миләш сәскәләрен
Хәтерләтә ине өмөтөм.
Барыһын да алдан күрһәң икән:
Килмәйерәк торһа был көҙө!
Абайламай ҡалдым, ни арала
Миләштәрем бешеп өлгөрҙө...
Хыялымдың утлы тәлгәштәре
Йөрәгемде тойҙом өткәнен

(Ниҙәр генә булып бөтөр ине
Алдарыма килһә көткәнем!)...
Хистәремде төпкә йәшерҙем мин,
Тормаһындар берүк һиҙелеп:
Ап-аҡ ҡарҙа ҡыҙыл миләш кеүек
Хыялдарым ята иҙелеп...

## Йәшмә

Һинең күҙҙәреңдең төҫө инде
Өҫтәлемдә торған был йәшмә.
Зинһар өсөн, һин асыла күрмә —
Барыр кешем дә юҡ кәңәшкә.

Һинең йәнгә шундай ауаздаш ул,
Сер һаҡларын беләм йәшмәнең.
Мин дә йәшмә ише: нисә йылдар
Йөрәгемә һыйып йәшәнең!

Бер кемгә лә сисмәҫ серем булып
Шул йәшмәгә күпме йәш һеңгән...
Күҙҙәреңдән генә уҡып белгән
Уй-хистәрең унда йәшенгән.

Беҙ икебеҙ әйтеп аңлашмаған
Күпме серҙе һаҡлай ул йәшмә!
Зинһар өсөн, һин асыла күрмә,
Барыһын да беләм... Өндәшмә!

## Мин бында!

Юлдарыңа ҡаршы сыҡҡаным юҡ,
Әйткәнем юҡ һиңә: «Мин бында!»
Беҙҙең хаҡта әкиәттәр тыуа,
Беҙҙең хаҡта тыуа легенда.
Риүәйәттәр тыуа. Үҙем хатта
Ҡайһы ваҡыт китәм ышанып,
Ни еребеҙ менән оҡшаманыҡ,
Ни еребеҙ менән оҡшаныҡ?!
Барыһы ла селпәрәмә килһен,
Ҡысҡырайым микән: «Мин бында!»
Бигерәк серле ине был әкиәт,
Бигерәк матур ине легенда...

## Буталсыҡ

Мин бутаным барлыҡ миҙгелдәрҙе:
Ҡышты, яҙҙы, йәйҙе, көҙҙәрҙе.
Мин бутаным ваҡыт арауығын,
Һәм булмышым минең үҙгәрҙе.
Буталанды донъям! Мин бер булдым
Тағата алмай ошо төйөндө.
«Юғалттым!» — тип, берсә көйҙө йәнем,
«Таптым!» — тиеп, берсә һөйөндө.
Мин буталдым. Зинһар, ҡағылмағыҙ,
Ҡалдырығыҙ яңғыҙ бер килке!
Юғалтһам да, ул минеке түгел
Һәм тапһам да түгел минеке...

Буталанды барса миҙгелдәрем,
Хистәрем дә бөттө буталып.
Буталанды донъям. Кемдән хәҙер
Мин йәшәргә тейеш ут алып?!
Миңә генә яҙған оло һөйөү
Ҡайҙа ғына икән, ҡайҙа бар?!
Эҙләһә лә мине, тапмаç инде,
Буталсыҡ шул хәҙер донъялар...

*6.04.2017*

## Барыһы һине хәтерләтә

Барыһы һине хәтерләтә:
Шау-шыулы Өфө,
Исемеңдең тәү хәрефен
Йөрөткән кафе.
Барыһы һине хәтерләтә:
Ярым-ярты ай,
Рельстарынан сыға алмай
Һуңлаған трамвай.
Планетарий. Ял баҡсаһы.
Пар аҡҡошло күл.
Баштарҙы зыр әйләндергән
Ғәмһеҙ карусель.
Урамдағы дымлы асфальт,
Күктәге болот —
Барыһы һине хәтерләтә,
Тик әйтә: «Онот!»

...Йөрәгеңдә инде миңә
Юҡтыр шул урын,
Юғалайым юлдарыбыҙ
Киҫешмәҫ борон!
Һиңә мине хәтерләтһен
Бушаған перрон...

## Аксаков баҡсаһында тыуған уйҙар...

Күл өҫтөндә өс аҡҡош —
Өсөһө лә матур ҡош.
Береһе оҡшаған һиңә,
Береһе оҡшаған миңә,
Береһе оҡшаған уға,
Күңелем бойоҡ шуға...
Күл өҫтөндә өс аҡҡош —
Өсөһө лә ғорур ҡош
(Тәбиғәттәме хата:
Ике инә, бер ата
Зиһенемде тағата).
Ата аҡҡош дәрәжәле,
Урыны гел түрҙәндер,
Икенсеһе — уның пары
Яҙмышына күнгәндер,
Өсөнсөһө зарлы ҡош —
Күҙҙәре тулы һағыш,
Эй тырыша шул һағышын
Сайпылтмаҫҡа яңылыш.

Был күренеш бик таныш!
...Рәнйеткәндә үҙ парым,
Баҫып хистәр буранын,
Һеҙ икәүләп үткән саҡта
Саҡ эйәрмәй торамын!
Күл өҫтөндә өс аҡҡош...

## Гел көтһөн өсөн...

Умырзая сәскәләре
Өшөгән инде,
Шул сәскәләр кеүек мин дә
Күшегәм инде.
Ҡосағында — рауза гөлдәр,
Һауалы, эре...
Һин кемдеңдер ҡәҙерлеһе
Һәм берҙән-бере!
Ҡарҙы тишеп сыҡҡан сәскә —
Умырзая мин.
Зарланмайым! Был яҙмышты
Үҙем теләнем:
Бер-берәүҙе ап-аҡ ҡарҙар
Өркөтһөн өсөн,
Умырзаялы яҙҙарын
Гел көтһөн өсөн!

*2017*

## Һөйөү көсө

Һинһеҙ ҡалғас ҡына белдем
Был донъяның төҫһөҙлөгөн,
Теҙләнергә алдарыңа
Ҡайҙа минең көсһөҙлөгөм?!

Хистәр әйҙәй: «Ян һин! Дөрлә!»
Аҡыл әйтә: «Һыуын! Һыуын!»
Быуынһыҙ ҙа булып ҡалған
Мәлдәремде юҡһыныуым.

«Яҙыҡ! Яҙыҡ!» — ти шул аҡыл,
Тик баш бирмәй уға йөрәк.
Һөйөү, ахыры, ерҙәге бар
Ҡанундарҙан өҫтөнөрәк...

## Тик хыялда

Уйҙарымда гелән бергәбеҙ беҙ,
Уйҙарымда гелән беҙ йәнәш,
Тик хыялда кейәү егете һин,
Ә мин янындағы йәш кәләш.
Хыялымда беҙ һис ҡартаймайбыҙ,
Һаҡланабыҙ гел йәш көйө беҙ:
Һөйөү менән тулы йөрәгебеҙ,
Бәхет менән тулы өйөбөҙ.

Хыялымда мин бик затлы ҡатын:
Улым үҫә һиңә оҡшаған!
Ә, асылда, йылы һүҙең етә,
Шылтыратыр инең, бушаһаң?!

*2010*

* * *

Күҙҙәреңә ҡарай алманым мин,
Әйтә алманым һиңә бөтәһен.
Хәйерлегә булһын! Сабыр итәм,
Йыраҡ юлға йәнә китәһең.

Хәйер, бында ла һин алыҫ инең,
Арабыҙҙа — меӊ-меӊ кәртәләр,
Минең сәләмем, тип уйламаҫһың,
Таңғы елдәр һине үпһәләр.

Таңғы елдәр уятмаҫтар һине,
Бик һаҡ ҡына улар ҡағылыр...
Минең янда, минең йәнәшәлә
Бүтән берәү һине һағыныр.

Ул кисергән һағыныу ғазаптары
Түгел ситен миңә, түгел ят.
Белмәһәң дә минең көткәнемде,
Иҫән-һауҙар ғына йөрөп ҡайт!

## Көҙ

Әллә һине юҡһыныуҙан
Һарғайған ҡала,
Көнө-төнө күҙ йәш түгә,
Әйтерһең, бала.
Хатта тәбиғәт сыҙамай —
Һағышы һары,
Нисек мин сабыр итәйем,
Түҙ, тиһең, бары?!
Нисек мин сыҙарға тейеш —
Күңелем китек,
Нисә йыл инде йәшәйем
Ҡайтҡаның көтөп!
Йөрәгем бит таштан түгел —
Миңә ни ҡала?!
Һине юҡһыныуҙан хатта
Һарғайған ҡала...

*2015*

## Парадокс

Һин дә минең наҙға мохтаж,
Минең дә таша хисем.
Беҙ тыуғанбыҙ бер-беребеҙҙе
Бәхетле итер өсөн.
Ләкин мин кәрәк башҡаға,
Һин — терәк бүтән өсөн.
Беҙ тыуғанбыҙ бер-беребеҙҙе
Бәхетһеҙ итер өсөн.

* * *

Хистәремде гөлдәй теҙеп
Үргем килде таҡыя,
Минең хистәр бик күп төҫтә —
Йөрәгемә саҡ һыя!
Хистәремде йәйғор итеп
Сөйгөм килде күктәргә,
Хистәремдең ете төҫө
Оҡшар ине күптәргә!
Япраҡ сыңы — хистәремдә,
Тамсылары ямғырҙың,
Шул хистәрҙе һинән күпме
Йәшерәм, тип, ҡаңғырҙым.
Ә бит ара шундай яҡын,
Аралар түгел йыраҡ,
Тик хистәрем йоҙаҡланған
Буяу кибете һымаҡ...

*2015*

## Мин иланым

Бөгөн кисен мин иланым,
Мин иланым һағынғанға,
Мин иланым кемдер берәү
Иңдәремә ҡағылғанға.
  Күҙ йәштәрем әсе түгел,
  Күҙ йәштәрем — татлы ғына!
  Мин иланым бөгөн кисен
  Сыҙай алмай шатлығыма...

Юҡ, алдашам! Әсе ине
Күҙ йәштәрем — ғазап ҡына!
Күтәрелеп ҡарай алмай,
Баҫып торҙом баҙап ҡына.

Мин иланым: йылдар үткәс
Һуңлап ҡына һүҙ ҡатҡанға,
Мин иланым бөгөн тағы
Бәхетемде юғалтҡанға!

Ҡарашымды йәшерһәм дә,
Шатлығым бит оло ине
(Иңдәремдән һөйҙө берәү —
Һөйгәнемдең ҡулы ине...)!

## Виртуаль һөйөү

Контакттағы* битеңдә
Яҙғым килде: «Бөркөтөм!»
Һине күпме эҙләнем мин,
Һине күпме мин көттөм...

Контакттағы битеңә
Яҙғым килде: «Һағындым!
Сейәләрен өҙгөм килә
Һинең тыуған яғындың...»

---

* «Бәйләнештә» сайты.

Контакттағы битеңә
Яҙғым килде: «Йөрәгем!»
...Үҙ бәхеткәйең түңәрәк,
Юҡтыр инде кәрәгем

(Әгәр яҙһам: «Һағындым!» — тип,
Яҙһам әгәр: «Яратам!»
Күҙҙәреңә нисек итеп
Күренермен аҙаҡтан?!)...

Мин түгел дә шәйләмәгән
Сәстәргә сал ҡунғанын!
Исемеңде кире юйҙым...
Бер ни яҙып торманым:)))

## Ике һағыныу

— Өзләдем*! Өзләдем! Өзләдем!
Мин килдем яныңа — түҙмәнем!
Мин һине күктәрҙән күҙләнем,
Мин һине ни ғүмер эҙләнем!
Өзләдем... Өзләдем... Өзләдем...
— Һағындым! Һағындым! Һағындым!
Мин көттөм, гел көттөм — табылдың!
Һин күктән нур булып яғылдың,
Йәнемә йыр булып һарылдың!
Һағындым... Һағындым... Һағындым...

* *Өзләдем* — (төрөксә) һағындым.

* * *

Аралар бикләнде,
Юлдарым — өҙәрем.
Нисек һин түҙерһең,
Нисек мин түҙәрем?!

Аралар бикләнде
Ерҙән дә, күктән дә.
Хаҡ юлды тапмайса
Аҙашыр күп бәндә...

Мин һине табырмын!
Һуҡмағым икенсе.
Сәләмем еткерер
Таңғы ел — үткенсе.

Уйҙа һәм хыялда,
Төнөн һәм көндә лә
Доғалар юлլармын
Төштә лә, өндә лә.

Юл булыр ап-асыҡ,
Һин көслө — һиҙерһең!
Мин нисек түҙәйем,
Һин нисек түҙерһең...

*26.11.2015*

## Күтәралмам...

Хоҙай һине миңә, мине — һиңә
Яралтҡандыр, бәлки, иш итеп,
Ниңә тертләйем һуң тик торғанда
Исемеңде генә ишетеп?

Күпме ғазап йәнде телгеләне,
Күпме уйҙар үтте был баштан,
Ниңә ҡасам әле һөйөп баҡҡан
Мине һағалаған ҡараштан?!

Сөнки яҙыҡ! Барыһы ла яҙыҡ!
Яҙмыш ҡайсаҡ шундай буталсыҡ.
Күңелең ишектәрен шаҡымайым,
Булғанда ла
Минең өсөн генә ул асыҡ.

Әллә ҡайҙан һине урап уҙам
(Мине күрҙениһәң, һин йәшен!),
Өҙөлөп һөйгәндә лә күтәралмам
Башҡаларҙың әсе күҙ йәшен...

## Иренемдә — еләк тәме

Тыуған ерең — шау еләклек,
Өҙөп ҡаптым еләктәрен.
Их үҙеңде бер күрергә
Бар ине шул теләктәрем.

Их үҙеңде бер күрергә!
Күҙәтергә бары ситтән
(Иренемдә — еләк тәме,
Башҡа берәү үбер иртән)...

Ни эшләйһең, ҡанундар бар:
Яраған һәм ярамаған!
Иренемдә — еләк тәме,
Һин тәмләп тә ҡарамаған...

*2009*

## Йыр һәм хыял

Был талсыҡҡан күңелемә
Булырмы ял?
Ысынбарлыҡҡа хаҡым юҡ,
Мин — тик хыял!

Хыял булғас, йыраҡ һинән,
Ситтә, ҡырҙа.
Һәм һине лә йәшәтәм мин
Бары йырҙа.

Сөнки беләм: тирә-йүндә
Ҡубыр янъял,
Ҡушылһалар бер көн килеп
Йыр һәм хыял...

*2002*

## Битарафлыҡ

Күҙҙәреңдә һинең — битарафлыҡ,
Әллә шуға күңелем өшөнө.
Асылдарың миңә аңлайышһыҙ,
Үтә күреп булмай кешене.

Күҙҙәремдә минең — битарафлыҡ,
Әйҙә, йәнем, һин дә ғазаплан!
Был фиғелгә беҙ күнербеҙ микән,
Үкенербеҙ микән аҙаҡтан?!

Бер-беребеҙгә шундай битараф беҙ,
Һәм йәшерен беҙҙең уй-ниәт,
Ҡараштарҙа — әсе ысынбарлыҡ,
Ә күңелдә йәшәй әкиәт...

## Төңөлөү

Тәҙрәңдә тик ике күҙем,
Тәҙрәңдә — ҡараштарым.
Һине күргәс, ергә төштөм,
Күктәрҙә аҙашманым.

Һөйөү көсәй буламмы мин
Бер-берәүҙең йәренән?!
Айға күсерҙем ҡарашты
Тәҙрәңдәге тәренән.

* * *

Зинһар өсөн, инмә төштәремә,
Зинһар өсөн, йәнем уңалһын!
Ошо ҡырыҫ фани донъяларҙа
Һин бары тик яҡты хыялһың...

Буй етмәҫлек, уй етмәҫлек хыял,
Ысынбарлыҡ әммә башҡаға.
Һинең янға Айым өндәгәндә,
«Ярамай!» — тип Ҡояш баш ҡаға...

Көс-хәл менән көндө үткәргәстен,
Оноторға теләп, ыҙалап,
Зинһар өсөн, төштәремә инмә,
Мөхәббәтең менән яҙалап...

Хәйер, китмә минең төштәремдән,
Һәм ҡыйратма хыял донъяһын!
Әле минең йәшәгеләр килә,
Татлы ғазап килә тояһым...

## Бер һүҙ

Беләм, ул һүҙ бер әйтелер
Ҡасан да булһа,
Бәлки, ҡара сәсебеҙгә
Ап-аҡ сал ҡунһа.

Бәлки, әйтелер ул һүҙҙәр
Киткәс беребеҙ,
Бер кем дә белә алмаған
Ҡалыр серебеҙ.

Ул һүҙ инде барыбер ҙә
Һуңлап әйтелер,
Ғүмер буйы йөрәктәрҙе
Үкенес телер.

Аҡыл — һаҡта. Йөрәк яна
Уға ҡарамай.
Ул әйтелер ине бөгөн,
Әле ярамай.

Ул әйтелер ине бөгөн
Һәм хәҙер хатта,
Араларҙа әллә күпме
Яҙмыштар ята...

## Кәрәкмәй!

Кәрәкмәй уттары,
Кәрәкмәй ҡуҙы ла!
Йөрәгем һыҙыла:
Улы бар,
Ҡыҙы ла...
Кәрәкмәй төндәре,
Кәрәкмәй кистәре,

Кемдеңдер күҙ йәше,
Йәшерен хистәре...
Кәрәкмәй!
Кәрәкмәй!
Мин түгел уғ(ы)ры!
Мин ситтә булһам да,
Һөйөүгә тоғ(о)ро.
Мин өнһөҙ күтәрәм
Яҙмыштың өйгәнен,
Бер Хоҙай беләлер:
Кемдең ут көйгәнен!
Кем кемде һөйгәнен...

*6.04.2017*

* * *

Исемеңде мин эҙләйем
Ҡырҙан,
Йырҙан,
Компьютерҙан.
Ҡабатлайым доға итеп:
Ҡундырмайым уға туҙан...

Исемеңде онотоорға...
Бирһә икән Хоҙай ярҙам!
Мин йыр итеп уны яҙам:
Үткән саҡта ап-аҡ ҡарҙан.

Доға итеп ҡабатлайым,
Уянғас та тел осонда.

Һинән йыраҡ булһам да мин,
Исемдәрең гел ошонда.

Йырҙай матур исемеңде
Оноторға етмәй көсөм!
Ниңә миңә ундай яза,
Бер кемгә лә юҡ та үсем?!

Ниндәйен һуң гонаһым бар,
Язаларға шулай ҙурҙан?!
Исемеңде юйып булмай
Йөрәк тигән компьютерҙан...

*2009*

* * *

Ымһындырҙың!!!
Их, һындырҙың
Ҡанатымды!
Һуңлап әйттең,
Бик һуң әйттең:
«Яратам»ды...
Албырғаттың!!!
Ах, илаттың
Көтмәгәндә.
Үтте тигән хистәр,
Ахыр(ы)һы,
Үтмәгән дә...
Ышандырҙың...

(Их, ҡаңғырҙым
Онотам тип!)
Ҡабатла (ә)ле
Тағы берҙе
«Яратам!» — тип...
Һин ҡабатла
Тағы берҙе,
Табып яйын!
Ымһынайым,
Албырғайым,
Ышанайым...

*2017*

* * *

Хат көтмәйем һинән,
Ант көтмәйем.
Һин — беҙәге матур осорҙоң,
Һөйөү тулы юлдар яҙып һиңә,
Ҡобараңды әллә осорҙом?!
Ҡурҡыттыммы, әллә
Өркөттөммө?!
Бер һүҙ генә әйттем:
«Гел көттөм!»
Зәңгәр күктән асыҡ устарыма
Бер ҡаурыйы төштө
Бөркөттөң...
Отолдом шул! Онотолор ине
Күҙ алдымдан китмәҫ

Ауыр һын,
Ҡайҙан ғына һиңә, ҡайҙан ғына
Һөйөү һүҙен яҙҙы
Ҡауырһын...
Хат көтмәйем һинән,
Ант көтмәйем,
Хыялдарҙан йәнем
Төңөлгән...
Кемдер һөйҙө, ахыры, юрый ғына,
Кемдер һөйҙө
Ысын күңелдән...
Хафаланма!
Юҡ, юҡ, яфаланма!
Үртәлер ҙә тымыр был йөрәк,
Ҡайҙан ғына һиңә хаттар яҙҙым?!
Йүләрмен дә инде
Бигерәк!..

*2017*

## Хәлдәремде генә һораны...

Яндарымдан үтеп барған ыңғай,
Хәлдәремде генә һораны:
Күңелемдән аҡман-тоҡман үтте,
Ҡубарылды хистәр бураны,
Туғарылды барса тойғоларым,
Емерелде Һиллек ҡорамы.
Йөрәк әйтте: «Йүгер ҡаршыһына!»

Аҡыл әйтте: «Ул бит һуңланы!!!» —
Мөхәббәткә, гүйә, хөкөм булып
Яңғыраны һуңғы ораны.
Ысынлап та...
Бер ни булманы бит!
Хәлкәйемде генә һораны...

*3.04.2017*

## Мең дә ике шиғыр...

Мең дә ике шиғыр яҙырһың!

*Һөйләшеүҙән*

Мең дә бер кис, мең дә ике шиғыр...
Баштарымда ҡайнай мең-мең уй.
Ни әйтһәң дә, ышанырға торам,
Бер нимә лә әйтмә, әйтмә, ҡуй!
Мең дә бер кис йоҡо алмай үткән,
Һағыштарға үткән төрөнөп.
Хыялда ла яҡын баралманым —
Етәкләшеп кенә йөрөнөк...
Мең дә ике шиғыр яҙылмаған...
Яҙылмаç та инде, мин беләм!
Улар инде күптән әсенеүҙән
Күҙ йәштәре булып түгелгән.
Мең-мең уйҙар ғына баштан китмәй,
Мең-мең уйҙар йөрөй уратып:
Өлгөрҙөммө икән яратылып,
Өлгөрҙөммө икән яратып?!

Һөйҙөрөргә һәм дә һөйөргә лә
Мин алманым, ахыры, эшкинә:
Меңдә бер кис —
Уныһы хыял ғына!
Меңдә ике шиғыр —
Төш кенә...

*5.04.2017*

## Күҙаллауҙар

Үлән өҫтөндәге
Ысыҡ инем,
Май ҡояшы кеүек
Асыҡ инем.
Бер бөтөндө бүлгән
Ярсыҡ инем,
Ғүмер буйы көткән
Ҡарсыҡ инем...
Бар серҙәрең һыйыр
Янсыҡ инем...
Һин тапҡанда инде
Балсыҡ инем.
Юҡ, оҡшамай!
Зинһар,
Ысыҡты тап!
Ғүмер буйы көттөм,
Китмә тапап:
Тоташырға тейеш
Ике ярсыҡ!

Әкиәттә ҡалһын
Ҡарсыҡ,
Балсыҡ...
Ә сер һаҡлай белмәç
Теге янсыҡ:
«Тапты!» — тигән булһын —
Үәт, маҡтансыҡ!!!

*6.04.2017*

* * *

Яҙҙар ҡышҡа йасин сыға:
Бөрөләрҙең тулышҡаны!
Илерткәнгә күңелемде
Яҙҙың йылы һулыштары,
Шаян миҙгел тапмаһын, тип,
Мин ҡышыма йәшеренәм.
Өркәк ҡышым ҡурҡып ҡаса
Үләндәрҙең йәшеленән.
Мин дә ҡасам, хистәремде
Йөрәгемә бикләй-бикләй,
Ләкин бушҡа: ғүмер буйы
Мине яҙҙар эҙәрлекләй!

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Нур бөркөүсе һүҙҙәр. *Р. Т. Бикбаев (баш һүҙ)* ...... 3


*Доға ҡылам: «Илем! — тип, —*
*Минең берҙән-берем!» — тип.*
*Ерем, телем, динем, тип,*
*Ерем, Телем, Динем, тип!*


Мин — башҡорт, тип танышығыҙ... ..............10
Йәрем, мине ситкә алып китмә!..............11
Дыуан, тиһәм... ..............12
«Һаумы әле, һаумы, Иҫке Хәлил!..»..............13
Ауылымда мәсет төҙөлә..............14
Яр өҫтөндә тал ине ..............15
Һарыбикә ..............16
«Инәйемде төштә күрҙем...» ..............16
«Ошо һүҙҙе өҙөлөп юҡһыныуым...» ..............18
Атаҡайым тышта ҡарҙар көрәй... ..............19
Ауылым ағайҙары ..............20
Еңгәләргә мәҙхиә..............21
Рауилә еңгәм иҫтәлегенә..............22
Яңғыҙ ҡатын ..............24
Атай йорто ..............24
Мәҙинә-гөлкәйем ..............25
Рәфисә апайыма..............27
Дыуан бульвары ..............28
Аҡ намаҙлыҡ халҡым түшәһен!..............29
Башҡортостан ..............30
Бәхетемдер, тимен... ..............31
Мөздәлифә доғаһы ..............32
Булһаҡ ине илгә беҙ терәк!..............33
Торатау дәфтәренән ..............34
Ил инәһе әйткәне..............34
Батырҙарҙың әйткәне..............35
Сәсәндәрҙең әйткәне ..............36

Аҡһаҡалдар әйткәне . . . . . . . . . . . . . . . . . .37
Әүлиәләр әйткәне . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .37
«Телһеҙ, моңһоҙ мин кем инде?..» . . . . . . . . . .38
Башҡортлоҡтоң орлоҡтарын сәсәм . . . . . . . . .39
«Тиңләмәгеҙ аҡҡоштарға...» . . . . . . . . . . . . . .40
Мин бит әле башҡорт ҡыҙы . . . . . . . . . . . . . . .41
Ҡыуанмағыҙ! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .42
Ағинәйҙәр маршы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .43
Ил өҫтөндә иң яманы... . . . . . . . . . . . . . . . . . .43
«Илкәйемдә шундай апайҙар бар...» . . . . . . . . .44
Көрәшергә һүҙ усынды... . . . . . . . . . . . . . . . . .45
Ултыртайыҡ ҡарағайҙар! . . . . . . . . . . . . . . . . .46
Аманат . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .48
Кемегеҙгә нимә ҡалдырырға? . . . . . . . . . . . . . .49
Бауырҙашым, тиеп... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .50
Оҡшашлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .51
Таш-ҡатын . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .52
Өнһөҙлөк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .54
Урам булып... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .55
Ете ҡыҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .55
Башҡортлоҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .56
Һаҡлар өсөн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .57
Утайҙар... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .58
Кем һуң нимәне һайлай... . . . . . . . . . . . . . . . .59
Ватаным, тип... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .60
Сөйөмбикә манараһы янында . . . . . . . . . . . . . .60
Глобализацияға ҡаршы . . . . . . . . . . . . . . . . . .61
Өфө етә барыһына ла... . . . . . . . . . . . . . . . . . .62
«Мине, һүнгән, тимәгеҙсе...» . . . . . . . . . . . . . .62
Ил, тием дә... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .63
Инә бөркөт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .64
Аҡымбәттән — Күсембәткә . . . . . . . . . . . . . . .65
«Һылыуҙары күп халҡымдың...» . . . . . . . . . . . .66
Китәм, тиһең . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .67
«Һыҙҙырт әле ҡурайыңды...» . . . . . . . . . . . . . . .68

Баҙарҙа тыуған уйҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . .70
Мәскәү бесәйенә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .71
Яҙмышыбыҙ беҙҙең бер икән . . . . . . . . . . . . . . .72
Йәмәлетау. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .73
Юлаусы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .75
Ҡурай йыры . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .75
Шүлгәнташҡа өндәшеү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .76
Хәйбуллалар миңә шәл яптылар . . . . . . . . . . . . .77
Ностальгия . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .78
Таныр микән? . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .79
Ҡәйнә теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .80
Казбек . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .81
Тартылыу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .82
Саҡ менән Суҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .83
Күршеләргә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .84
Германия — Юбирленген . . . . . . . . . . . . . . . . . .85
«Эй замана! Асылымдан биҙеп...» . . . . . . . . . . . .86
Тауҙар менән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .87
Китәм инде . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .88
Ауыл һәм ҡала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .89
Һаумы, ҡала! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .89
«Өфө миңә еңел бирелмәне...» . . . . . . . . . . . . . .90
Өйһөҙлөк... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .91
Баштар һәм башҡалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .92
Көҙгө ҡала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .92
Ҡарағайҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .93
Шыршы булһам . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .94
«Инәкәйем йөн иләй ҙә...» . . . . . . . . . . . . . . . . . .95
«Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн...» . . . .96
Эй, башҡортом! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .96
Аллаһу — Раббүл ғәләмин . . . . . . . . . . . . . . . . .97
И Рамазан — нурлы ай! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .99
Йәннәтле бул, милләтем! . . . . . . . . . . . . . . . . . . .99
«Ер йөҙөнә әлмисаҡтан...» . . . . . . . . . . . . . . . . .100
Шул хис менән йәнем Ергә килде... . . . . . . . . . .101

Доға ҡылам . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .102
«Бер-беребеҙҙе кисерәйек...» . . . . . . . . . . . . . . . .103
«Их, яулыҡһыҙ йөрөйбөҙ шул, ҡыҙҙар...» . . . . . . .104
Алғыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .105
Сирләгәндә. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .107
Аҡ ҡорбан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .108
Сабыр ит, бәндә! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .108
«Мин бары тик...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .109
Көрткә сумды ҡала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .110
«Намаҙлыҡ ишеме, алдымда...» . . . . . . . . . . . . . .112
Ауыр һүҙ әйтһәм.... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .112
Бөжәктәр тураһында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .113
Кешегә ҡарап рәнйемә!. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .113
Килен булып әйткәнем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .114
Көртмәле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .115
Семафор . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .115
Иҫән-һау йөрө! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .116
Эштәрем булғанға... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .117
Ҡояшым бар! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .117
«Аҫыл ирҙең күңелендә...» . . . . . . . . . . . . . . . . . .118
«Икмәк һалған ҡатын-ҡыҙҙың...» . . . . . . . . . . . . .119
Буй еткерҙе инде улым.... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .19
Миҙгелдәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .120
Һеңлемә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .120
Апай булғас... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .121
Бикәсте оҙатҡанда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .121
Теләк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .122
Ҡоҙалар, ҡоҙағыйҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .123
«Беҙ икәүгә сүп өйәләр...» . . . . . . . . . . . . . . . . . .124
Йоҡоһоҙлоҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .124
Шиғырһыҙ төн . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .125
Төнгө ҡунаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .126
Төнгө күбәләк . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .127
«Ҡыр ҡаҙҙары, тағы ҡайттығыҙмы...» . . . . . . . . . .129
Ҡурҡам . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .129

Яҙ башы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .130
Мин уртала . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .131
Атым туғарылды . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .131
Мин — йөк аты . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .132
Тышаулы толпар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .133
Йорт ҡаҙы монологы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .134
«Күк көмбәҙе — түңкәрелгән кәсә...» . . . . . . . . . .135
Ҡәләмдәштәремә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .136
Ә шағирә, ил, тип яна... . . . . . . . . . . . . . . . . .136
«Әйлеләрҙең яугир уҙаманы...» . . . . . . . . . . . . .138
Төш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .139
Юҡһыныу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .140
Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла... . . . . . . . . . . . . . . . .141
«Ике алма тотоп килдең...» . . . . . . . . . . . . . . . .143
Бесән өҫтө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .144
Бына шулай минең хәлдәрем . . . . . . . . . . . . . . .145
Аҡ тирмәләр ҡороп йәшәнең . . . . . . . . . . . . . . .147
Һин тораһың ғаләм уртаһында . . . . . . . . . . . . . .148
Әкиәт һөйлә әле! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .149
Улар сөйөр әле бөркөттәр! . . . . . . . . . . . . . . . .150

*Оло мөхәббәттән тыуған Кеше,*
*Мөхәббәттән донъя яралған!*

Ҡот *(поэма)* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .152
Әҙәм үә Һауа . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .167
Мөғжизә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .168
Беҙҙең усаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .169
Үп һин мине . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .169
«Һин инең бит бәғеремде...» . . . . . . . . . . . . . . .169
Һин дә ямғыр булып... . . . . . . . . . . . . . . . . . . .170
«Тәнде түгел, йәнде өшөткәнгә...» . . . . . . . . . . .170
«Йырҙарымдан йыртыҡ эҙләмәгеҙ...» . . . . . . . . . .171
Һиҙәм... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .171
Төймә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .172

Ете йән . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .172
Һин һәм мин . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .173
Битәрләмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .174
Көлгә ҡалғас... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .174
«Ҡотороп та яуған был ямғырҙан...» . . . . . . . . . .175
«Ауыр һүҙҙе, һинең ауыр һүҙҙе...» . . . . . . . . . . . .175
«Күптән һинең менән һөйләшкән юҡ...» . . . . . . . .176
«Албырғатмай, һәүетемсә генә...» . . . . . . . . . . . . .177
Йәлләмәгеҙ! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .177
Мин — бәхетле?! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .178
Ярлыҡаным . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .178
«Яҙ һулышын тойоп мәллә...» . . . . . . . . . . . . . . . .179
Көҙгөләге сағылыш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .179
Мең һорау . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .180
Беҙ икебеҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .181
«Мине күралмаған күҙҙәр...» . . . . . . . . . . . . . . . . .181
Ә өнөмдә — тап киреһе... . . . . . . . . . . . . . . . . . . .182
«Арабыҙҙа булған хис-тойғоға...» . . . . . . . . . . . . .182
Һөйөү тәңгәленә нөктә ҡуйҙың . . . . . . . . . . . . . . .184
«Яҙ: "Аҙ!" — тиҙер...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .184
Беҙ хушлаштыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .185
«Һаман да минең хәтерҙә...» . . . . . . . . . . . . . . . .186
«Ҡош юлынан китеп барам әле...» . . . . . . . . . . . . .186
«Ҡайһы миҙгел һине аҙаштырҙы...» . . . . . . . . . . . .187
Мираж . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .188
Ҡайҙаһығыҙ?! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .188
Көтмәгәндә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .189
Һеҙҙе күрһәм... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .190
Ғашиҡ булдым! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .191
«Әйтте микән Хоҙай...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .192
Һеҙҙең хаҡта хыял йөрөттөм . . . . . . . . . . . . . . . . .192
Йәшмә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .193
Мин бында! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .194
Буталсыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .194
Барыһы һине хәтерләтә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .195

Аксаков баҡсаһында тыуған уйҙар . . . . . . . . . . . . . . .196
Гел көтһөн өсөн... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .197
Һөйөү көсө . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .198
Тик хыялда . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .198
«Күҙҙәреңә ҡарай алманым мин...». . . . . . . . . . . . . . .199
Күҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .200
Парадокс . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .200
«Хистәремде гөлдәй теҙеп...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . .201
Мин иланым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .201
Виртуаль һөйөү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .202
Ике һағыныу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .203
«Аралар бикләнде...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .204
Күтәралмам... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .205
Иренемдә — еләк тәме . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .205
Йыр һәм хыял . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .206
Битарафлыҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .207
Төңөлөү . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .207
«Зинһар өсөн, инмә төштәремә...» . . . . . . . . . . . . . . .208
Бер һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .208
Кәрәкмәй!. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .209
«Исемеңде мин эҙләйем...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .210
«Ымһындырҙың!!!» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .211
«Хат көтмәйем һинән...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .212
Хәлдәремде генә һораны... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .213
Мең дә ике шиғыр... . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .214
Күҙаллауҙар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .215
«Яҙҙар ҡышҡа йасин сыға...» . . . . . . . . . . . . . . . . . . .216

В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 г. № 436-ФЗ 16+

2010 йылдың 29 декабрендәге 436-ФЗ һанлы
Федераль законға ярашлы 16+

*Литературно-художественное издание*

**Ханнанова** Зульфия Миндибаевна

**НАЗЫВАЙТЕ СЕБЯ БАШКИРОМ**

*Стихи, поэма*

*(на башкирском языке)*

*Әҙәби-нәфис баҫма*

**Ханнанова** Зөлфиә Миндебай ҡыҙы

**МИН – БАШҠОРТ, ТИП ТАНЫШЫҒЫҘ...**

*Шиғырҙар, поэма*

Тышлыҡтың биҙәлешендә
Эдуард Дилмөхәмәтовтың фотоһы файҙаланылды

Мөхәррире *Э. Ә. Яҡупова*
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *А. Х. Хәкимова, З. М. Камалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 29.03.2018. Форматы 70×90 $^{1}/_{32}$.
Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы. Офсет ысулы менән
баҫылды. Шартлы баҫма таб. 8,19. Шартлы буяу отт. 8,48.
Иҫәп-баҫма таб. 7,62. Тиражы 1000 дана. Заказ 1.0069.18.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева
исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.